ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 август (урағай) 2017

№33 (763)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Законда р үҙгәрә тора,



тик ул үҙгәрештәр граждандар файҙаһына булырға тейеш

3,5

Географик карталар...

халҡыбыҙ тарихында яңы биттәр асты



8-9

Көслөләр үҙ урынын таба...

тормошта ла, һөнәрҙә лә



11

Тамаҡ тамуҡҡа төшөрәме?



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Август аҙағына тиклем 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 518 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 463 һум 08 тингә яҙыла алаһығыҙ. Июль-августа гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар, барыһынан да бигерәк хаҡтар артыуынан ҡурҡабыҙ, тип яуап биргән. Ә һеҙҙе нимә ҡурҡыта?

***Айбулат ЗӘБИРОВ, иҡтисадсы:*** Белеүемсә, был һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар хаҡтар артыуынан тыш, хәрби конфликттар ихтималлығынан да, сәләмәтлектәре торошо ҡаҡшауынан, килемдәре түбәнәйеүенән дә, эшен юғалтыуҙан да ҡурҡыуын белдергән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы 1,6 мең респондент әле тотош Рәсәй түгел түгеллеген, шулай ҙа бынан ниндәйҙер һығымталар яһарға, мәҫәлән, халыҡтың дөйөм күңел төшөнкөлөгө кисереүен тоҫмалларға була. Халыҡ саҡ иркен тын алып йәшәй башлағайны ғына, иҡтисади көрсөк килеп сыҡты. Күптәр унын тиҙ генә үтеп китәсәгенә ышанмай ҙа, ахыры. Шуға ла халыҡ эш урынын юғалтыуҙан, финанс системаһынын емерелеүенән ҡурҡа, банктарға ышанмай, уларҙа иҫәптәре булмауға борсола. Был ҡурҡыуҙар уйлап сығарылмаған, ә ысынбарлыҡ, бөгөнгө тормошобоҙ. Хатта Рәсәй һуғыш алдында торған кеүек тойғолар ҡала. Социологтар, ҡурҡыуҙар артабан да үҫәсәк, тип белдерә етмәһә. Пенсия йәшен арттырыу кеүек яңылыҡтарҙын, хаҡтарҙын даими күтәрелеп тороуы ла халыҡтың кәйефенә йоғонто яһамай ҡалмайҙыр. Әлбиттә, был күренештәр мине лә хәүефләндерә. Кешене бит иртәгәге көнгә ышаныс йәшәтә, шул саҡта ғына күңел тыныс була. Тормоштоң ҡиммәтләнеүе һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең киҫкен булыуы һөҙөмтәһендә тыуған был социаль ҡурҡыуҙар халыҡты илдең сәйәси хәленә, шул иҫәптән, етәкселәргә ҡарата ла үҙ һығымталарын яһарға мәжбүр итәсәк. Ә алда - һайлауҙар. Шуға бәйле, бәлки, берәй ыңғай үҙгәрештәр ҙә булыр илдә, кем белә, ни тиһәң дә, астың асыуы яман, ти бит халыҡ. Халыҡтың һарыуын ҡайнатыу ил етәкселәре файҙаһына булмаҫ.

Ғаилә эсендәге проблемаларҙан ҡурҡыу, тигән яуап һорауламаның иң аҙағында урынлашҡан, бына быныһы ҡыуандыра. Был һорауға яуап биреүселәр, моғайын да, ғаилә эсендәге үҙ-ара мөнәсәбәттәргә бәйле мәсьәләләрҙе күҙ уңында тотҡандыр. Ә ғаиләнең килеме, матди тотороҡлолоғо әлеге лә баяғы илдәге иҡтисади һәм сәйәси хәлгә бәйле, бынан бер нисек ҡасып булмай. Ғаилә башлығы булараҡ, бына мин дә ай һайын ипотекаға алған фатирым өсөн, балалар баҡсаһына түләйем, тимәк, минең матди хәлем минең кәйефемде барыбер көйләйәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# РӘСӘЙҘЕҢ ИҢ ЯҠШЫ УМАРТАСЫҺЫ...

## Ишембайҙа йәшәй!

**Ишембай районынан Илгиз Шәңгәрәев үҙен Рәсәйҙең иң яҡшы умартасыһы тип таныт ты. Был аҙнала РФ Ауыл хужалығы министрлығы менән РФ Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге менән берлектә "Аҡбуҙат" ипподромында "Үҙ һөнәре буйынса иң яҡшыһы" Бөтә Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсының "Иң яҡшы умартасы" номинацияһы буйынса көс һынашыу ойошторҙо. Конкурс сараларын Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм Германиянан "Апимондия" Халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы президенты Филипп МакКейб, Рәсәй умартасыларының милли союзы президенты Арнольд Бутов, Рәсәй хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры урынбаҫары Любовь Ельцова ла күҙәтте.**




**(Дауамы 15-се биттә).**

✓ *Тел бит дәрес түгел, ә мөхит булырға тейеш, асылда. Мөхитте булдырыуҙы үҙеңдән башламаһаң, берәү ҙә уны һиңә яһап бирмәйәсәк. Мөхит булмағас, атай-әсәйҙәр башҡорт телен сабыйҙарына өйрәтергә ынтылмай.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнкәлдәргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠТЫҢ КИЛӘСӘГЕ...

## егәрлеләр ҡулында

*Рәис ИСМӘҒИЛЕВ, Нефтекама дәүләт филармонияһы директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:* Халыҡҡа мин, эшләргә, эшләргә һәм тағы ла эшләргә кәрәк, тип өндәшәм. Бөгөн генә түгел, кисә лә, өсөнсө көндө лә тормош еңел булмаған ул. Әммә ниндәй генә заманалар килмәһен, егәрле кешегә ҡарағанда, ялҡауға донъя көтөүе күпкә ауырыраҡ. Халыҡ ялҡауланды хәҙер, ауыл кешеһе хатта мал аҫрауҙы ла әллә ниндәй ауыр эш тип ҡабул итә. Ауылдарҙа күпләп мал үрсетеп, донъя көтөргә бөтә шарттар ҙа бар. Әммә кеше унар баш һыйыр аҫрағансы, эш юҡ, тип зарланып ятыуҙы хуп күрә һымаҡ. Беҙ бала саҡта атаәсәйҙәр менән йәй буйына бесән эшләй инек, бүленгән бесәнлектәрҙән генә түгел, урман төпкөләнә китеп саба торғайныҡ. Хәҙер күрәбеҙ: юл буйындағы йәйрәп ятҡан сабынлыҡтарға кеше ҡулы теймәгән, шул тиклем яҡшы үлән әрәм булып ултыра. Ауылда йәшәп, һөт һатып алып эскән, икмәген үҙе бешереп ашамаған кешеләр бар. Ярай ҙа шул икмәкте һатып алырға аҡсаһы күп булып, мохтажлыҡ кисереп йәшәмәгән булһа. Ләкин үҙ ғаиләһен аҫырарлыҡ ирҙәрҙең ата-әсә йортонда ҡарттарының пенсия аҡсаһына ғына мөрхәтһенеп йәшәгән осраҡтар ҙа һирәк түгел бит.

Был турала уйлай башлаһаң, халҡыбыҙ өсөн йән әрней. Элек-электән башҡорт үҙ йүнен үҙе күргән, бер ҡайҙан да ситтән ярҙам көтөп ултырмаған, йәки берәйһе эшен эшләр тип ялҡауланып ятмаған. Шулай булған булһа, Ватан имenлеге өсөн һынылышлы осорҙарҙа шул тиклем ҙур ярҙам күрһәтә алыр инекме? Уйлай китһәң, хәҙер ҡулынан эш килгән кешеләр генә түгел, балалар ҙа бөтә тормош мәшәҡәттәренә ҡул һелтәп, бөтә нәмәне лә артыҡ көс һалмай ғына башҡарырға өйрәнеп үҫә. Улар алдына ҡуйылған төп бурыс - уҡыу, белем алыу, шуны ла еренә еткереп үтәргә ялҡауҙары килә әле уларҙың.

Кем эшләмәй - шул ашамай. Был һүҙҙәр бер заманда ла актуаллеген юғалтмаған. Байҙар кеше ҡушып ҡына эшләтә, үҙҙәре эшләмәй, тиһәләр ҙә, ул кеше шул кимәлгә күтәрелгәнсе, күпме көс түккәнен үҙе генә белә. Йәмғиәттә хеҙмәткә ҡарата шундай мөнәсәбәт барлыҡҡа килеүендә киң мәғлүмәт сараларының да роле бар. Беҙҙең милли матбуғатта ла, рухи байлыкты өҫтөн ҡуйырға кәрәк, матди байлыҡ туплау мөһим әйбер түгел, тигән фекер йыш осрай. Нисек инде, матди байлыҡ мөһим булмаһын, бай кеше генә кеҫәһенән сығарып биреп, халҡына файҙалы эш эшләргә мөмкин. Ә бына, эш юҡ, тип, дәүләтте әрләп өйөндә ятҡан әҙәмдән нимә талап итәһең, ул үҙе һораныуҙан бушамай. Башҡорттар араһында ла текә эшҡыуарҙар, миллионерҙар, хатта миллиардерҙар булһа, яҙыҡ түгел. Шуға күрә, бөтә нәмәлә лә тигеҙлек һаҡлайыҡ, рухыбыҙҙы ла онотмайыҡ, матди байлыҡтан да ваз кисеп ҡуймайыҡ. Сөнки донъя көтөү, мал аҫрау, үҙең эшләгән өлкәлә ҙур килем алыу, мөлкәт йыйыу насар түгел: балаларың яҡшы йәшәр, уларға яңы мөмкинлектәргә юл асылыр, халҡыңа ярҙам булыр. Милләттәштәргә шуны әйтер инем: үҙегеҙҙе лә, балаларыбыҙҙы ла хеҙмәткә өйрәтеп, егәрле итеп тәрбиәләгеҙ, тырыш һәм уңған кешеләр генә уңыш ҡаҙана икәнен иҫтән сығармағыҙ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар, барыһынан да бигерәк хаҡтар артыуынан ҡурҡабыҙ, тип яуап биргән. Ә һеҙҙе нимә ҡурҡыта?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәфилә ХӘМИТОВА, Учалы районы:*** Әсә кеше булараҡ, мин балаларымды юғалтыуҙан ғына ҡурҡам. Бала ҡайғыһы кисерергә яҙмаһын, кисергәндәргә Алла түҙемлек бирһен, күрмәгәндәргә күрһәтмәһен. Башҡа бер нәмә лә ҡурҡытмай мине.

Ғөмүмән, үткән быуаттың 90-сы йылдарындағы көрсөктө кисергән, етешһеҙлекте күргән быуынды нимә менән ҡурҡытырға була икән һуң? Инәйемдең, кешеләр магазиндан күпләп ризыҡ һатып ала запасҡа, нәмә бөтә икән, тигәненә лә, йәшлегемә барып, ышанманым. 1991 йылда магазиндар кәштәһе, ысынлап та, бушап ҡалды. Һыйырҙар һыуалды, бөгөнгө замандағы кеүек, ҙур туңдырғыстар юҡ - ит бөттө. Ә балаларҙы ашатырға кәрәк. Ярай әле инәйем, мине тыңламайынса, төрлө ярмаһын алып ҡуйғайны. Шул ваҡиғаны бөгөн ҡабаттан кисереп ҡарайым да, шундай һығымтаға киләм - ниндәй ҙә булһа проблема килеп тыуһа, тыныслан да, Аллаға тапшыр ҙа ҡуй. Ярҙам уйламаған ерҙән, көтмәгән кешенән дә килә ул. Психологтар ҙа шундай кәңәш бирә бит.

Шул йылдар кешене нык сыныҡтырҙы бит ул. Бөгөн мин аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ булыр тип ҡурҡмайым. Сөнки ауылда йәшәйем, картуф, ит, май, һөт бар. Аслыҡтан, бәлки, ҡала кешеһе ҡурҡалыр. Һуғыш-фәлән булыр тип тә уйламайым, Аллаһы Тәғәлә быға юл ҡуймаç. Ахырызаман етер, тип тә хәүефләнмәйем, был әле генә булмаясаҡ. Рәсәй кешеһы нык ул, етмәһә, оптимист: кем менән генә һөйләшһәң дә, аҡса етмәй, тип һүҙ башлайҙар ҙа, ярай, барыһы ла яҡшы бит әле, тип һүҙҙе ыңғайға бороп та ҡуялар. Әле бына Америка сәйәсәте менән башты ҡатыра, тик был да бит беҙҙең рухты ныҡыта! Баланы тик яҡшы шарттарҙа иркәләтеп кенә тәрбиәләһәң, сибек була ул. Шуның шикелле, ауырлыҡ күрмәһәк, беҙ ҙә көсһөҙ булыр инек. Хатта эшһеҙлектән дә ҡурҡмайым, эшләйем тигән кеше эште ҡайҙан булһа ла таба.

Ҡурҡыу - ул гонаһ. Нимәнән ҡурҡаһың, шуны үҙеңә тартаһың, тигәне лә бар. Иманы ныҡ кеше бер нәмәнән дә ҡурмай ул. Бөтөн нәмә - яҡшыһы ла, беҙҙең өсөн насар булып тойолғаны ла Хоҙайҙан, шуға артыҡ борсолорға кәрәкмәй. Быны ошо ябай ғына хәҡиҡәтте аңларға кәрәктер, моғайын. Шуға ла ҡурҡыуҙы еңергә, доғалар уҡырға, үҙеңде рухи яҡтан үҫтерергә кәрәк.

***Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА, журналист:*** Был ҡурҡыу ҙа түгел, әммә балаларымдың киләсәктә ниндәй йәмғиәттә йәшәйәсәгенә борсолам. Сөнки уларҙың имenлеге, киләсәге өсөн хәүефләнәм. Иң ҡурҡканы - милләттәштәремдең тыуған телебеҙгә ҡарата күрһәткән битарафлығы. Был мәсьәләне мин генә хәл итә алмауым да аңлашыла. Мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытылмаясаҡ, тип лаф ороу ҙа асыуҙы килтерә. Тел бит дәрес түгел, ә мөхит булырға тейеш, асылда. Мөхитте булдырыуҙы үҙеңдән башламаһаң, берәү ҙә уны һиңә яһап бирмәйәсәк. Мөхит булмағас, атай-әсәйҙәр башҡорт телен сабыйҙарына өйрәтергә ынтылмай. Бөгөн хатта бик рухлы ата-әсәләргә лә туған телде балаһына һеңдереүе бик ауыр, ә аҡланыу өсөн мең сәбәп бар. Таныштарға, туғандарға, улың йә ҡыҙың нишләп урыса һөйләшә, тиһәң: "Апай, беҙҙе әллә өйҙә урыса аралаша тип уйлайһығыҙмы? Башҡортса ғына аралашабыҙ, тик балалар баҡсаһы, мәктәптә, унда тик башҡорттар булған осраҡта ла хатта, балам урыса фекерләүгә күскән", - тиҙәр. Минең дә ҡыҙым үтә рухлы, телдең ҡәҙерен аңлаған, тойған бала. Ә улым менән бик ауыр, урыса күберәк һөйләшә, сөнки ул ятраҡтан йәнһүрәттәр, уйындар һәм башҡа бөтөн заманса технологиялар рус телендә. Шуға ла үҙ балам һәм туғандарым менән тел өсөн көрәшергә лә тура килә. Милләтем тип йүгереп эшләп йөрөүселәрҙең дә хәле минеке һымаҡ. Мин уларҙы хәҙер аңлайым, әммә бөтөнләй аҡламайым. Тел - ул милләттең нигеҙе, көсө, наҙанлыҡ, битарафлыҡ арҡаһында шул хазинабыҙҙың юғалыуына юл ҡуйыубыҙҙан ҡурҡам мин.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺАБАҠТАР БУЛЫП ТОРА...



Тормош ризаһыҙлыҡтарҙы яратмай - күп тапҡырҙар һынағаным бар быны. Әгәр ҙә һин оҙаҡ ваҡыт һөмһөрөңдө ҡойоп, ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөйһөң икән, донъя һиңе "тәрбиәләй" башлай. Йәғни оло һынауҙар ебәрә. Ҡыҙғанысҡа күрә, ошо хәҡикәтте йылдар үткәс кенә, юғалтыуҙар, хаталар аша ғына аңлайһың шул. Быға ышандырыр әллә күпме миҫалдар килтерергә булыр ине. Мәҫәлән...

Бик оҙаҡ йылдар был апайҙың теленән "Уф, ауырыйым" тигән зар төшмәне. Бер үк ваҡытта ҡаты ауырығанға ла оҡшамағайны, үҙ аяҡтары менән атлап йөрөнө, үҙ ҡулдары менән ниндәйҙер эш башҡарҙы, ғаиләһен көттө. Ә берҙән-бер көндө ул дауалап булмай торған ҡаты сиргә тарыны, операция яһатты. Бына шунда ул үҙенең элекке хәленә шөкөр итмәгәненә үкенеп ятты: "Калай юҡҡа зарланғанмын, шуға Хоҙай сирҙең ҡатырағын ебәрҙе бит минә", - тине. Был хәл минең үҙемә лә ғүмерлек һабаҡ булды...

Һабаҡтар булып тора ул. Тик уларҙан ғибрәт ала белергә генә кәрәк. Ризаһыҙ булған саҡтарыңда үҙ-үҙеңә шундай һорау ҡуй: зарҙарыңды кемгәләр түгеү, насар кәйефеңде белгертеү берәй ваҡыт һинең проблемаңды ыңғай хәл иттеме? Кемдер һине йәлләп, һинең ауыртыныуҙарыңды ҡулы менән һыпырып ташлағандыр, бәлки? Юҡ, әлбиттә. Унан һуң... Һине бөгөн бик ныҡ үртәгән проблемаңың иртәгә, иртәнән һуңға битарафлыҡ тыуҙырыуы, хатта көлкө тойолоуы ла ихтимал бит. Шулай булғас...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда урып-йыйыу эштәренең тиҙлеге арта. Төбәктең Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы тәүлектә бөртөклө һәм ҡуҙаҡлы культуралар 32,5 мең гектарҙан йыйып алынған. Шул уҡ ваҡытта Благовар, Көйөргәҙе, Стәрлетамаҡ һәм Хәйбулла районы игенселәре бер юлы 1,5-2 мең гектарға үҙ күрһәткестәрен яҡшыртҡан. Һәр гектарҙан 23,2 центнер уңыш алғанда республикала 266 мең тонна иген һуғып алынған, тип хәбәр иттеләр аграр ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә.

✓Сибай ҡалаһы Советы депутаттары ҡала хакимиәте башлығы Хәлит Сөләймәновтың эштән китеү тураһындағы ғаризаһын ҡараны һәм ҡәнәғәтләндерҙе. Ваҡытлыса уның бурыстарын хакимиәттең эштәре менән идара итеүсе Айнур Иҙрисов башҡарасаҡ.

✓Башҡортостан статистары 1 июлгә ҡарата тәғәйенләнгән уртаса пенсия күләмен атаны. Статистика хеҙмәткәрҙәренең мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә уртаса пенсия 12 309 һум тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта, страховка пенсияһын алыусыларҙың пенсияһы 12 607 һум. Дәүләт пенсия тәьминәте буйынса алғандарҙың пенсияһы 9 048,5 һум тәшкил итә. Хәҙер республикала 1,168 миллиондан ашыу пенсионер иҫәпләнә. Уларҙан 1,07 миллиондан ашыу кеше страховка пенсияһын ала.

✓Өфөлә беренсе класс уҡыусыларының ата-әсәләре өсөн "кыҙыу линия" 23 августа көндөҙгө сәғәт 2-нән 5-кә тиклем эшләй. Белгестәр ауыр тормош хәлендәге ғаиләләргә социаль ярҙам саралары, балаларҙың мәктәпкә яраҡлашыу психологик үҙенсәлектәре һәм уҡыуҙағы ҡатмарлыҡтарҙы еңеп сығыу тураһында һөйләйәсәк. Һорауҙарға тәжрибәле уҡытыусылар һәм психологтар яуап бирәсәк."Кыҙыу линия" телефоны: (347) 223-22-11. Шылтыратыу бушлай.

✓Өфөлә йәйәүләр өсөн өс туристик маршрут әҙерләнә. Ул - баш ҡаланың парктары буйлап "Йәшел ҡала", "XIX-XX быуаттарҙағы Өфө ҡалаһының архитектура күренеше" һәм "Өфө ҡалаһының административ үҙәге". Ведомство коллегияһында Башҡортостан мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев хәбәр итеүенсә, эш музейҙар тәҡдим иткән хеҙмәттәргә киңәйтеү маҡсатында алып барыла.

***✓ Был закон бик кәрәк ине, сөнки иҫерткес эсемлектәрҙе рөхсәтһеҙ һатҡан өсөн ғәмәлдәге яуаплылыҡ саралары тейешле һөҙөмтәне бирмәй. Йыл һайын Рәсәйҙә сифатһыҙ алкоголь эсеп, күпме кеше һәләк була.***



*ДЕПУТАТ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ЗАКОНДАР ҮҘГӘРӘ ТОРА,

## тик ул үҙгәрештәр граждандар файҙаһына булырға тейеш



**Депутаттың эше - закондар сығарыуҙан ғына тормай, тигән фекерҙә бөгөнгө әңгәмәсебеҙ. "Һиңә ышаныс белдергән һәм һине яҡлаусыһы итеп тойған кешеләргә ярҙам итергә тырышам", - тигән һүҙҙәре лә хаҡ. Ошо арала үҙ көсөнә ингән яңы ҡанундар тураһында Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф БАЙҒУСҠАРОВ менән һөйләшәбеҙ.**

**➔ Зариф Закир улы, Дәүләт Думаһында яҙғы сессияла ҡабул ителгән закондар араһында Һеҙҙең өсөн иң әһәмиәтлеһе ниндәй?**

- 2017 йылдың яҙғы сессияһында Дәүләт Думаһында, билдәле булыуынса, бик күп төрлө закон проекттары ҡаралды. Тормош бер урында тормай, закондар ҙа иҫкерә, уларға өҫтәмәләр индерергә, яңынан ҡарарға кәрәк. Алтынсы саҡырылыш депутаттарынан 2020 закон проекты ҡаралмай ҡалғайны, яңынан 1027 закон проекты тәҡдим ителде һәм ошоларҙың барыһына ла өлгөрөргә тырыштыҡ. Әлбиттә, күп проекттар кире ҡағылды, 17 процент тирәһе ҡабул ителде. Әлеге мәлдә 840 закон проекты ҡалды, улары киләсәк эше. Шуға ла был сессия бик һөҙөмтәле булды, тип иҫәпләйем. Үҙем генә 82 тапҡыр сығыш яһаным, 8 закон проектын эшләүҙә әүҙем ҡатнаштым. Ғөмүмән, иң күп закондар мин ағзаһы булып торған Дәүләт төҙөлөшө һәм закондар сығарыу комитетында ҡаралды.

Улар араһында законһыҙ спиртлы эсемлектәр һатыусыларға яуаплылыҡты арттырыуға ҡағылған ҡанундың ҡабул ителеүе әһәмиәтле булды. Был закон бик кәрәк ине, сөнки иҫерткес эсемлектәрҙе рөхсәтһеҙ һатҡан өсөн ғәмәлдәге яуаплылыҡ саралары тейешле һөҙөмтәне бирмәй. Йыл һайын Рәсәйҙә сифатһыҙ алкоголь эсеп, күпме кеше һәләк була, эскелек һөҙөмтәһендә енәйәт ҡылыуҙар арта, кешеләрҙең һаулығына зыян килә, ғаиләләр тарҡала. Әлегә тиклем сифатһыҙ спиртлы эсемлек һатыусыға 2,5 мең һум штраф ҡаралғайны. Хәҙер РФ Административ һәм Енәйәт кодекстарына үҙгәрештәр индерелде.

**Уның буйынса, сифатһыҙ спиртлы эсемлек һатыусы физик шәхестәргә штраф күләме 200 мең һумға тиклем артты, шулай уҡ уның тауары ла конфискацияланасаҡ. Әгәр ҙә бер тапҡыр штраф түләгәндән һуң тағы ла был шөғөлдә тотола икән, уға енәйәт эше асыу мөмкин буласаҡ. Юридик шәхестәр, әйтәйек, магазиндар, предприятиелар законһыҙ алкоголь һата икән, уларға штраф күләме - 1 млн һум. Шулай уҡ эшмәкәрлектәрен 3 айға тиклем туҡтатыу мөмкинлеге лә ҡаралған.**

Был закон үҙ көсөнә август аҙағында инәсәк һәм сифатһыҙ спиртлы эсемлек һатыу ҡырҡа кәмер, тип ышанам. Закон ҡабул ителгәс тә республика район хакимиәттәре башлыҡтарына, полиция, прокуратура вәкилдәренә хаттар яҙҙым, хәҙер законды халыҡҡа еткерергә кәрәк, халыҡ белһә, үҙе үк һатыусыларҙы тыйып торасаҡ. Ауыл хакимиәте башлыҡтары, ауыл староставары, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр әүҙем булыр, тип ышанам. Беренсе ссиратта, кешенең һаулығын ҡайғыртырға кәрәк, бындай юл менән табылған килемдең бер кемгә бәрәкәт килтергәне юҡ.

Шулай уҡ "Баҡсасылыҡ, йәшелсәселек һәм дача хужалығы һәм Рәсәй Федерацияһының ҡайһы бер айырым закон актгарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон ҡабул ителде. Закон әлеге мәлдәге баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек ширҡәттәренең статусын яйға һалыуға йүнәлтелә. Бындай ширҡәттәрҙең ойоштороу-хоҡуҡ формалары әлегә тиклем бишәү булһа, улар икәүгә - коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ һәм коммерцияға ҡарамаған йәшелсәселек ширҡәттәренә ҡалдырылды. Ул 2019 йылдың 1 ғинуарында үҙ көсөнә инә.

**Был законда иң мөһиме шул: баҡса ерендә даими йәшәү өсөн капиталь йорт төҙөргә һәм унда теркәлергә мөмкин буласаҡ. Күп йәштәребеҙ ошо рәүешле торлаҡлы ла була, теркәлеү менән бәйле проблемаларын да хәл итә аласаҡ.**

Ә бына йәшелсә участкаһында капиталь төҙөлөш объекттары иҫәбенә инмәгән хужалыҡ ҡаралтылары ғына төҙөргә ярасаҡ. Закон проекты ширҡәт ағзаларынан төрлө иғәнәләр түләтеүҙе лә тәртипкә һала. Иҫәпләүҙең дөйөм принциптары, иғәнә тотонолорға тейешле маҡсаттар билдәләнгән. Улар ширҡәт ағзаларының дөйөм йыйылышында раҫланырға тейеш. Был закон нигеҙендә баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек менән шөғөлләнеү өсөн тотороҡло хоҡуҡи база барлыҡҡа киләсәк.

**(Дауамы 5-се биттә).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

**6-сы күҙәтеүем.** Сатирик шағирыбыҙ Буранбай Исҡужин мәрхүмдең бер һүҙен иҫкә төшөрөү урынлы булыр: "Ҡарап-ҡарап торам да, тормоштағы күп күренештәр башыма һыймай: әллә күренештәр үтә ҙур, әллә баш бәләкәй..." Мин иһә бер нәмәне аңлай алмайым: ни өсөн кешеләр күпләп дин юлына килгән һайын уларҙың араһында дошманлыҡ хисе көсәйә бара икән?

**7-се күҙәтеүем.** Бер тамсы никотин атты үлтерә, тиҙәр. Дөрөҫтөр. Уртаса алғанда, беҙҙең илдә сығарылған фильтрһыҙ сигареттарҙы әүҙем тартыусы ай самаһы ваҡыт эсендә бер атты үлтерерлек никотин һура. Йылына уртаса 12 ат килеп сыға. Үҙем иһә 15 йыл тарттым һәм үҙемдә 180 баш йылҡы малын үлтерҙем. 30 йыл тартыусы - 360, 45 йыл тартыусы 540 атты һәләк итә. Бына ҡайҙа китә милләттең көсө, әгәр ҙә ул "аттарҙы" һаҡлап ҡалып, дөрөҫ йүнәлеш биргәндә, еребеҙ һәм донъябыҙ гөл-баҡсаға әүерелер ине. Уйлап ҡарағыҙ: был бер тәмәкенең генә зыяны. Юҡҡа ғына Заря апай Бикташева тәмәкене "кеҫә Хиросима"һы, "кеҫә Нагасаки"һы тип атамай...

**8-се күҙәтеүем.** Ҡыҙым 1-се каналда Максим Галкин алып барған "Барыһынан да яҡшыраҡ..." ("Лучше всех") тигән программаны ҡарарға яратмай. Программаның балаларҙы сәмләндереү йәһәтенән ыңғай яҡтары, мотлаҡ, барҙыр, әммә мин уның зарарлы яҡтарын да түбәндәге сәбәптәрҙә күрәм:

- Программаның "Барыһынан да яҡшыраҡ..." тип аталыуы ғына башҡа балаларҙың насар, артта ҡалған булыуына ишара һәм бындай билдәләмә балаларҙа кәмселек комплексын барлыҡҡа килтермәҫ, тип кем әйтә ала?
- Телевизор аша бар донъяға күренгән балала тәкәбберлек сифаттары барлыҡҡа килмәүенә, уларҙың боҙолмауына ниндәй гарантия бар?
- Халыҡта күҙ тейеүҙе "һоғо тейеү" (һоҡланыу энергияһы зарары) тип әйтеү бар. Ул балаларға күҙ теймәй, тип кем әйтә ала?
- Вундеркинд, индиго һәм кристалик вибрацияға эйә балалар үҫеп еткәс тә, ябайҙарҙан ябайға әүерелә икән, был програманың маҡсаты бары тик шоуға ҡайтып ҡала һәм унда кескәйҙәр "тәжрибә ҡуяны" ролен башҡарырға тейешме?

**9-сы күҙәтеүем.** Телебеҙҙең ҡөҙрәте сикһеҙ! Хатта йәнәш килгән ике һүҙҙең урындарын алмаштырып ҡуйыу ҙа кешене шатлыҡ толпарына атландыра ала. Яңыраҡ кәйефе төшкән дуҫым килде. Ниңә улай күңелһеҙ йөрөүе хаҡында һорашҡайным: "Эй, эсем бошоп йөрөйөм әле", - тип яуапланы ул түбән тонда. Мин уға: "Тапҡанһың ҡайғырыр нәмә. Мына минең бошом эсеп йөрөй, әммә һис тә бирешмәйем", - тигәйнем, балтаһы һыуға төшкән дуҫым шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Шатланып һөйләшеп торҙоҡ та, ишәгенән шатлыҡ толпарына күсеп атланып китеп барҙы.

**10-сы күҙәтеүем.** Ауыр, ҡыйын хәлгә ҡалған кешене йәлләү тойғоһо беҙҙең ил кешеһендә характер булараҡ ныгынған. Беҙ хатта кемделер йәлләүҙән үҙебеҙгә кинәнес алабыҙ шикелле. "Бына бит, минән дә хөртөрәк йәшәгән, минән дә ауырыраҡ хәлгә тарыған кешеләр бар икән. Уларҙыҡы менән сағыштырғанда минеке әлхәм, Аллаға шөкөр", - тип тә уйлайбыҙ, буғай. Әлбиттә, тик Хоҙайҙан килгән мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек тойғолары хаҡында был рәүешле итеп фекер йөрөтөү яҙыҡ, сөнки изгелек иҫәпкә, ниндәйҙер шартты үтәүгә ҡоролмай. Ул була йә булмай. Әммә беҙ кемделер йәлләгән саҡта тырнаҡ эсенә алынған уйҙарға барыбер ҙә бирeләбеҙ. Кем белә, бәлки, шөкөр итеү тап шулай булырға тейештер ҙә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Round University Ranking (RUR) агентлығы 2017 йылда донъяның иң яҡшы университеттары рейтингын баҫып сығарҙы. Башҡортостандан был рейтингта ике университет бар - Өфө дәүләт авиация техник университеты (дөйөм исемлектә 657-се урын һәм Рәсәйҙекеләр араһында - 34-се) һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты (дөйөм исемлектә - 746-сы, Рәсәйҙекеләр араһында - 60-сы).

✓"Өфөнән һөйөү менән" һәм "Санкт-Петербург авторадиоһы" фильмдарының флагтарын Эльбрус тауының түбәһендә ҡуясаҡтар. Уртаҡ проект ошо көндәрҙә старт алды. Ул 16 авгусҡа ҡәҙәр һуҙылған "Өфөнән һөйөү менән" фильмының бөтә Рәсәй прокатына арналған.

✓"Рәсәй - Башҡортостан радиоһы"-ның тапшырыуы Дағстанда "Евразия тауышы-2017" Бөтә Рәсәй милли тапшырыуҙар фестивалендә еңеүсе булды. Проект "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн иң яҡшы радиотапшырыу" номинацияһында ҡатнашты. "Мәктәпкә атлауы күңелле" тапшырыуын "Ҡояшлы ҡала" редакцияһы әҙерләгән. Етәксеһе - уҡытыусы Элеонора Дударь. Авторҙар һәм алып барыусылар - Алан Мозафин, Әминә Мозафина, Алиса Розе, Дарья Халтурина, тауыш режиссеры - Гөлназ Ирсаева.

✓"BashMult" Асыҡ йәнһүрәттәр конкурсына ғаризалар ҡабул итеү дауам итә. Конкурс "BashMult -2017" II республика фестивале сиктәрендә уҙа. Конкурста 6 йәштән 25 йәшкәсә балалар һәм йәштәр ҡатнаша ала, географик һәм тел сикләүҙәре юҡ. Ғаризалар 2017 йылдың 1 октябренә көндөҙгө сәғәт 3-кә тиклем ҡабул ителә. Конкурс 18 ноябрҙә бүләкләү тантанаһы менән тамамланасаҡ. Конкурс партнерҙары һәм ҡатнашыусылары араһында - "Башҡортостан" киностудияһы, "Муха" студияһы, Banana Animation studio, Республика балалар белем биреү технопаркы, "Юлдаш" балалар ижады үҙәге, "Юла" анимация студияһы.

✓Башҡортостанда енси юл менән ВИЧ-инфекцияһын таратыу осраҡтарының һаны арҡандан-арта бара. Ағымдағы йыл башынан республикала лаборатор рәүештә 1418 ВИЧ-инфекциялы кеше асыҡланған. Йәшәү урыны буйынса поликлиникала йәки Республиканың СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш үҙәгендә (Достоевский урамы, 132, 15-се бүлмә, телефон: +7 (347) 251-11-36) бушлай һәм аноним рәүештә тест үтергә мөмкин.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Йәш ғаиләләр балаһы тыуғанда бер тапҡыр түләнә торған социаль түләү хоҡуғына эйә була. 300 мең һум торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелергә тейеш.*



ҠЫҪҠАСА



# БАШҠОРТ ТЕЛЕ УҠЫТЫЛАСАҠ!

✓Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһендә "Республикала башҡорт теле өйрәнеләсәк", тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов. "Тик башҡорт телен уҡытыу сифатын яҡшыртырға кәрәк. Һис шикһеҙ, методиканы яңынан ҡарау зарур, шунһыҙ башҡорт телен тейешенсә өйрәтеп булмаясаҡ. Баланы көсләп грамматика, яҙыу нигеҙҙәренә өйрәтергә кәрәкмәй",- тигән телләктәрен дә еткерҙе. Ата-әсәләр йәмәғәтселегенә мөрәжәғәт итеп, Рөстәм Зәки улы: "Беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ, әгәр мәктәптәрҙә аҙнаһына бер тапҡыр башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытылһа, бынан бер нindәй ҙә насарлыҡ юҡ, тик яҡшы ғына буласаҡ. Балалар тел мөхитенә йәлеп ителәсәк", - тип билдәләне.

✓Башҡортостан татарҙарының милли-мәҙәни автономияһы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Римма Үтәшева, туған телдәрҙе уҡытыу ҡыҙыҡлы һәм сифатлы булырға тейеш, тип иҫәпләүҙән белдерҙе. Ул: "Туған телдәрҙе уҡытыу программаһы бар һәм буласаҡ. Тотош Рәсәй буйынса ғәмәлдәге берҙәм стандарттар бар. Рәсәй Президенты туған телдәрҙең ил халҡының байлығы булыуын һәм уларҙың үҫенә һаҡсыл ҡараш талап итеүен асыҡ әйтте. Бынан тыш, ул Рәсәй Федерацияһы ҡануйдары һәм Конституцияһы туған телдәрҙе тулы күләмдә һәм сикләүҙәрһеҙ өйрәнеүгә хоҡуҡ биреүен дә билдәләне", - тине.

✓ Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов етәкселегендәге делегация мэр Ирек Ялалов ҡушыуы буйынса рәсми сәфәр менән Киров ҡалаһында булып, уларҙың Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (ТОС) органдары үҫтереү тәжрибәһе менән танышты. Киров ҡалаһында ТОС-ҡа йәлеп ителеүселәр һаны 80 мең кешенән ашыу. Һәр етенсе граждан муниципаль власть менән бергә ҡала мөхите өсөн мөһим булған мәсьәләне хәл итеүҙә ҡатнаша. Халыҡ инициативаһы һәм уларҙың ҡатнашлығы менән Кировта тәҙәкләндереү буйынса "Унайлы ҡала мөхитен формалаштырыу", "Сәскәле ҡала", "Минең ҡалам - минең йортом" кеүек эре федераль һәм ҡала проекттары тормошҡа ашырыла.

✓ Сананды йәй әҙерләө, тигән халыҡ мәҡәләнә таянып, муниципалитеттағы сираттағы оператив кәңәшмәлә ҡышҡы осорҙа ихаталарҙы ҡарҙан таҙартҡанда автомобилдәрҙе алыу мәсьәләһе күтәрелде. 1 октябргә тиклем ҡыҙыҡһыныусы хеҙмәттәр регламент эшләргә тейеш. Уға ярашлы, хужаһыҙ автомобилдәр йәки ҡар таҙартыу эштәре барған ваҡытта территорияла ултырған машиналар ихаталарҙың сығарыласаҡ. Яҡын арала идара итеүсе компаниялар ихаталарҙы тикшереп, хужаһыҙ транспорт сараларын асыҡлаясаҡ, территорияларҙы таҙартыу графигын төҙәйәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭШ ХАҠЫ - МӘҢГЕЛЕК ТЕМА



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Любовь Ельцова менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов һәм республиканың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ҡатнашты. Эш хаҡы һәм халыҡҡа социаль ярҙам итеү мәсьәләләре тикшерелде.**

Республика етәксеһе халыҡты социаль хеҙмәтләндереү менән бәйле аутсорсингҡа күсереү һорауҙары буйынса уңышлы эксперимент хаҡында һөйләне. Бөгөн был йүнәлеш буйынса Башҡортостан Рәсәй Федерацияһында лидер булып һанала. "Әммә бер нисә йүнәлеш буйынса етешһеҙлектәребеҙ бар әле. Атап әйткәндә, ул ғилми хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡына ҡағыла, - тине Рөстәм Хәмитов. - Беҙ әлегә федераль тәғәйенләнештәге ғилми учреждение етәкселәре менән уртаҡ тел таба алмайбыҙ..." Любовь Ельцова был мәсьәлә буйынса хәбәрҙар булыуы, киләсәктә Хеҙмәт министрлығының иғтибар үҙәгенә алынасағы тураһында хәбәр итте. Ул шулай уҡ республикала эш хаҡы буйынса бурыс мәсьәләһенең Рәсәй төбәктәре араһында уңышлыраҡ булыуын билдәләне.

Мәскәү ҡунағына Рөстәм Зәки улы шулай уҡ Башҡортостанда ғаилә сәйәсәте һорауҙары менән республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы шөғөлләнәсәген, министрлыҡ эсендә идаралыҡ ойошторыласағын хәбәр итте.

# БАШҠОРТ БАЛЫН ТАНЫТЫРҒА!



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Апимондия" Халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы президенты Филипп МакКейб етәкселегендәге делегация менән осрашты. Осрашыуҙа шулай уҡ Рәсәй умартасыларының милли союзы президенты Арнольд Бутов ҡатнашты. Яҡтар Өфөлә 2021 йылда Халыҡ-ара умартасылар конгресын уҙғарыу перспективаларын тикшерҙе.**

- Башҡортостанда һәм Өфөлә юғары сифатлы бал бар. Күп кенә илдәргә был кимәлгә етеү ҡыйын буласаҡ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Филипп МакКейб. - Кешеләр быңдай сифатлы балға күберәк аҡса түләйәсәк. Ысынында иһә, балды һәм умартасылыҡ продукцияһын халыҡ-ара баҙарға сығарыу мөһим, сөнки Башҡортостандың һәм хатта Рәсәйҙең балын бөтәһе лә белмәй. Был ҙур хата.

- 2021 йылда форумды Рәсәй Федерацияһында, Башҡортостан Республикаһында уҙғарыу кәрәклеге хаҡында һөйләгәндә беҙ, тәү сиратта, илдә умартасылыҡты үҫтереүгә яңы көс биреү кәрәклеген күҙ уңында тотабыҙ, - тине төбәк етәксеһе. - Әйе, ошондай кимәлдәге форумды ҡабул итеү, ҡунаҡтар менән аралашыу, үҙ ҡаҙаныштарыңды күрһәтеү бик абруйлы. Дания, Словения, Сербия - Рәсәйҙең етди конкуренттары, әммә Рәсәй ғаризаһының еңеүе илебеҙ умартасыларына икенсе кимәлгә сығырға, тәжрибә, фекерҙәр менән уртаҡлашырға ярҙам итәсәк, ә улар яңы һөҙөмтә бирәсәк.

Осрашыуҙа ҡатнашыусылар 2021 йылда XLVII Умартасылар конгресын уҙғарыуға Рәсәй Федерацияһының хоҡуҡ алыу мөмкинлектәрен юғары баһаланы. Улар фекеренсә, ошо сараны илебеҙҙә үткәреү БДБ илдәренән тағы ла күберәк ҡатнашыусыларҙы йәлеп итергә, Рәсәй төбәктәренең үҙенсәлекле умартасылыҡ тәжрибәһен өйрәнеүҙе ойоштороrға һәм тармаҡтың ғилми, техник һәм иҡтисади үҫешенә тәьҫир итергә мөмкинлек бирәсәк. Делегация ағзалары Халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһына ҡарауға тапшырылған Рәсәй умартасыларының милли союзының ғариза китабын айырым билдәләне. Унда конгресты уҙғарыу көнө һәм урыны, ғилми программа һәм махсуслаштырылған экскурсиялар буйынса тәҡдимдәр, ҡатнашыусыларҙы урынлаштырыу мөмкинлектәре һәм транспорт тәьминәте, сил илдән ҡатнашыусылар өсөн виза режимы һәм сараны әҙерләү һәм уҙғарыу һорауҙарын оператив хәл итеү өсөн урындағы ойоштороу комитеты буйынса мәғлүмәт бар. Филипп МакКейбтың һүҙҙәренсә, ғариза китабы ҡыҫҡа, бай йөкмәткеле итеп әҙерләнгән, шуға уны уҡыуы ла ҡыҙыҡ һәм еңел.

# ЙӘШТӘРҘЕ ҠЫУАНДЫРЫП...

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов йәш ата-әсәләргә 300 мең һумлыҡ тәүге сертификаттарҙы тапшырҙы.**



Бер тапҡыр түләнә торған социаль пособие торлаҡ мәсьәләһен хәл итергә ярҙам итәсәк. Уны яңыраҡ тәүге сабыйҙары тыуған биш ғаилә алды. Республика Башлығының һүҙҙәренсә, ярҙам программаһы яҡшы һөҙөмтә күрһәтһә, ул артабан да дауам иттереләсәк. Сертификат алған бәхетле ата-әсәләр хис-тойғоларын йәшермәне, Республика Башлығына рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары Зилиә һәм Айнур Ситдиҡовтар 2015 йылдың 1 декабренән ипотека түләйҙәр, әле алған аҡса йәш ғаиләгә өләшләтә торлаҡ сертификатын түләргә ярҙам итәсәк, тип өмөтләнәләр. Яҡуповтар ғаиләһенең үҙенең торлағы юҡ әле: 22-се Федераль яңғынға ҡаршы хеҙмәттә эшләүсе Данил, тормош иптәше Лилиә һәм бәләкәй Ризуан менән Черниковкала ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәй һәм сертификат алыуҙарына әле һаман ышанмауҙарын белдерҙе.

Йәш ғаиләләргә ярҙам итеү программаһы быйыл башланды. Март айында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә демографик хәлде яҡшыртыу буйынса өҫтәмә саралар тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, йәш ғаиләләр балаһы тыуғанда бер тапҡыр түләнә торған социаль түләү хоҡуғына эйә була. 300 мең һум торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелергә тейеш.

**"Башинформ".**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Нуғай ауылында 1250 уҡыусыға иҫәпләнгән яңы белем усағы төҙөлөшө тамамлана. Ул үҙ ишектәрен Белем көнөндә асасаҡ. Дүрт ҡатлы бинала 52 класс бүлмәһе бар, шул иҫәптән 16 кабинет - башланғыс синыфтарға бирелә. Мәктәп заманса талаптарҙы күҙ уңында тотоп йыһазландырылған.

✓26 августа Салауат Юлаев майҙанында VII "Һөт иле" фестивале үтәсәк. Быйыл сара территорияһында 20-нән ашыу майҙансыҡ эшләйәсәк. Ойоштороусылар бай мәҙәни-күңел асыу программаһын әҙерләй. Шулай уҡ быйыл беренсе тапҡыр "Һөт иле" маршруттары буйынса " Иң ҙур квест" һәм Башҡортостан Республикаһының гастрономик картаһының исем туйы үткәреләсәк.

✓Башҡортостандың Һалым хеҙмәте идаралығы 2016 йылға декларация компанияһының йомғаҡтарын баҫып сығарҙы. Йылдан-йыл 10 миллион һумдан юғары табыш күрһәтелгән декларацияларҙың иҫәбе артыуы билдәләнгән. Миллиардерҙар һаны берәүгә кәмегән: һигеҙ булған, хәҙер ете кеше ҡалған.

✓Өфөнөң Октябрь районы биләмәһендә эттәрҙе йөрөтөү өсөн махсус майҙансыҡ төҙөләсәк. Өфө хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, дүрт аяҡлы дуҫтар өсөн махсуслаштырылған майҙансыҡ Рихард Зорге урамындағы "Өфө йүкәләре" сәләмәтлек һүкмағында урынлашасаҡ. Биләмәне кәртәләү һәм күнекмәләр, өйрәтеү һәм ял итеү өсөн кәрәкле инвентарь менән йыһазландырыу күҙ уңында тотола. Киләсәктә был зона эт аҫрауселарҙың осрашыу һәм кинолог конкурстарын ойоштороу урыны булырға тейеш.

✓2018 йылда Башҡортостанда НХЛ стандарттарына ярашлы яңы хоккей майҙансығы асыла. Ул Күмертауҙа төҙәлә башлаған Боҙ һарайында урынлашасаҡ. Боҙ аренаһы 602 тамашасыға иҫәпләнгән, командалар өсөн алты сисенеү бүлмәһе ҡаралған. Ошо объектты төҙәгән "Акрополь" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте әлеге ваҡытта биләмәне төҙөкләндереү, эске селтәрҙәрҙе һәм ҡоралдарҙы монтажлау эштәрен дауам итә.

✓Ошо йылдың июнь айынан Өфөнән Геленджикка рейстарҙы яңы ташыусы башҡара. Авиакомпания маршрутта 50 пассажирға иҫәпләнгән CRJ-200 самолетын файҙаланырға ниәтләй. Авиаташыусы рейстарҙы 14 июндән 20 сентябргә ҡәҙәр башҡарасаҡ. Маршрут буйынса самолет һәр шаршамбы осоп китә. Кирегә рейстар шулай уҡ шаршамбы һайын башҡарыласаҡ. Ҡалалар араһында осоу оҙайлылығы 2,5 сәғәт тәшкил итәсәк.

✔ *Төҙөүсе ойошмаларға талаптар арта. Төҙөүсе ойошманың өлөшө төҙөләсәк йорттоң планлаштырылған суммаһының 10 процентынан да кәм булмаҫка, шундай уҡ сумманы ул гарантия сифатында банк иҫәбендә торорға тейеш.*



*ДЕПУТАТ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# ЗАКОНДАР ҮҘГӘРӘ ТОРА,

## тик ул үҙгәрештәр граждандар файҙаһына булырға тейеш

**(Башы 3-сө биттә).**

➔ **Ауыл хужалығын үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырған яңы закондар менән дә таныштырып үтһәгеҙ ине.**

- 2017 йылдың яҙғы сессияһында Дәүләт Думаһы ауыл хужалығы өлкәһендә ҡабул иткән иң мөһим закондарҙың береһе - "Аквамәҙәниәт (балыҡсылыҡ) өлкәһендәге мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыу мәсьәләләре буйынса Рәсәй Федерацияһының айырым закон актына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль закон. Рәсәй Федерацияһы Президенты уға 1 июлдә ҡул ҡуйҙы. Ошо закон менән ҡоролмалар ярҙамында ағын булған ерҙә яһалған быуаларҙа балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырыуға йүнәлтелгән ҡайһы бер саралар ғәмәлгә индерелде. Әлегә тиклем бындай быуалар федераль милеккә ҡарай ине. Әгәр ер участкаһының хужаһы унда быуа төҙөй икән, ер барыбер федераль милектә ҡалырға тейеш. Ә бындай быуаларҙа балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү рөхсәт ителмәй ине.

**Яңы закон ер участкаһы милексеһенә балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн үҙ ерендә быуа төҙөү хоҡуғын бирә. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙә лә ошондай быуалар төҙөргә була, төҙөлөштән һуң хужаның ергә милек хоҡуғы һаҡланып ҡала. Шулай уҡ урман ерҙәрендә лә балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн тәғәйенләнгән ваҡытлыса ҡаралтылар урынлаштырырға мөмкин.**

Башҡортостандың күп райондарында был законды көтөп алдылар. Әле генә Стәрлебаш, Федоровка, Көйөргәҙе райондарында булдым, халыҡ был яңылыҡты бик ыңғай ҡабул иткән. Балыҡсылыҡты үҫтереү яңы эш урындары булдырыуға ғына түгел, республика, шулай уҡ илебеҙҙең башҡа төбәктәре халҡын балыҡ менән туйындырырға ла булышлыҡ итәсәк. Эшҡыуарҙарға был "йәшел юл" аса.

➔ **Ысынлап та, закондар халыҡтың йәшәйешен еңеләйтергә тейеш. Был йәһәттән үҙ көсөнә ингән тағы ла ниндәй закондарҙы халыҡ белергә тейеш?**

- Быға тиклем дәүләткә 10 мең һум бурысы булғандар сит илгә сыға алмай ине. Был законға үҙгәрештәр индергәс, был сумма 30 меңгә күтәрелде. Кемгәлер дауаланырға, йәки яҡындарына ярҙам итер өсөн дә сит илгә сығырға тура килә, тормош булғас, төрлө хәлдәр булыуы бар. Бурысын түләгәндәр ҙә бер тәүлек эсендә сит илгә сыға аласаҡ, әлеге мәлдә 7-10 көн үтмәйенсә, мәсьәләне ыңғай хәл итеп булмай. Закон алимент түләмәй ҡасып йөрөүселәр, шулай уҡ енәйәт эшләп, мораль зыян килтергән өсөн һалынған штрафтары булғандарға ҡағылмай. Бурысын 2 ай эсендә түләмәгәндәр өсөн 10 мең һум бурыс сит илгә сығыу өсөн кәртә булып торасаҡ. Закон 2017 йылдың 1 октябренән үҙ көсөнә инәсәк.

Төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашыу тураһында закон ҡабул ителде. Бөгөнгө көндә төҙөлөп ятҡан йорттан фатир һатып алып, алданғандар ҙа бар.

**Һатып алыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау өсөн компенсация фонды булдырыласаҡ. Төҙөүсе ойошма өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу тураһындағы килешеү хаҡының 1,2 процентын ошо компенсация фондына күсерергә бурыслы. Әгәр ҙә төҙөлөш ойошмаһы ниндәйҙер сәбәп менән йортто төҙөп бөтә алмай икән, өлөшләтә төҙөлөшкә аҡсаһын һалыусылар аҡсаларын кире алырға, йәки компенсация фонды иҫәбенә уны башҡа ойошма төҙөп бөтөүенә ризалығын бирә ала.**

Яңы төҙөүсе ойошма конкурс аша үтәсәк. Закон үҙ көсөнә август аҙаҡтарына инәсәк һәм ул көсөнә ингән мәлдән генә эшләй башлаясаҡ. Йәғни, быға тиклем өлөшләтә төҙөлөшкә аҡса күсереп, алданған кешеләр компенсация фонды механизмына бер нисек тә эләгә алмай. Төҙөүсе ойошмаларға һәм уларҙың финанс хәленә талаптар арта. Төҙөүсе ойошманың өлөшө төҙөләсәк йорттоң планлаштырылған суммаһының 10 процентынан да кәм булмаҫка, шундай уҡ сумманы ул гарантия сифатында банк иҫәбендә торорға тейеш. Шулай уҡ Торлаҡ төҙөлөшөнөң берҙәм мәғлүмәти системаһы булдырыла, унда төҙөлөш менән шөғөлләнгән предприятиелар тураһында бөтөн мәғлүмәт буласаҡ.

Алименттарға ҡағылышлы ике закон тәҡдим ителде, мин шулай уҡ уларҙың авторы булып торам. Беренсеһе - йәшәү минимумы үҙгәргән һайын, суд ҡарары менән билдәләнгән алимент күләме лә автоматик рәүештә артасаҡ. Быны алимент тотоп барыусы ойошма күҙәтәсәк. Сөнки әсә кешенең закондарҙы күҙәтеп бармауы ла бар. Унан һуң, суд приставына мөрәжәғәт итеп, алимент күләмен яңынан иҫәпләтеп йөрөү әсәгә уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра ине. Икенсеһе - былтыр ҡабул ителгән законға төҙәтеү. Уның буйынса, алимент түләмәй ҡасып йөрөүсене енәйәт эшенә тарттырып булмай, башта административ штраф һалына. Суд приставтары штраф һалыр өсөн ул кешене торорға тейеш, ә бының өсөн уларҙың вәкәләттәре юҡ ине. Шуға ла суд приставы полиция хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеп кенә был эште башҡара ала ине. Шул рәүешле әллә күпме ваҡыт юғала, процедура оҙаҡҡа һуҙыла. Хәҙер суд приставтарына бындай хоҡуҡ бирергә тигән закон проекты тәҡдим ителде. Ул тәүге уҡыуҙы үтте, көҙгө сессияла ҡабул ителер, тип уйлайым. Шулай уҡ штрафтары булғандарҙың суд приставы тарафынан банктағы иҫәбенә арест һалыу менән бәйле бер яңылыҡ бар. Суд приставы банктағы был иҫәптең ниндәй икәнен ҡарай ҙа алмай. Ә закон буйынса балаларға алимент, пособие алған иҫәпкә арест һалырға ярамай. Арест һалынғас, аҡсаларҙы кире ҡайтарыу өсөн кеше суд юлын тапарға мәжбүр була ине. Хәҙер улар өсөн айырым иҫәп булырға тейеш, уға арест һалыу мөмкин булмаясаҡ. Закон сентябрь айында ҡабул ителәсәк.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ВӘҒӘҘӘЛӘРЕ ҮТӘЛМӘЙ...



**Дональд Трамптың власҡа килеүенә ярты йылдан ашыуыраҡ ваҡыт үтте. Ошо арауыҡ эсендә ул үҙен һайлау алдынан биргән вәғәҙәләренең тап киреһен эшләүсе лидер итеп күрһәтте. Трамп әлегәсә башҡа илдәрҙең йәшәйешенә, уларҙың сәйәсәтенә ҡыҫылмаясағы тураһындағы һүҙҙәрен онотҡандай ҡылана. Американың һуңғы ваҡытта былай ҙа күпселек илдәр менән мөнәсәбәте "һыуыҡ" ине, ә бөгөнгө көнгә ул хатта үҙенең күптәнге һәм ышанысһы союздаштары менән дә конфликтҡа инде.**

Бөгөн бөтә донъя йәмәғәтселеге АҠШ менән Ҡытай араһындағы бәхәстең нимә менән бөтөрөн көтә. Дональд Трамп ҡәтғи рәүештә Ҡытай яғынан Американың интеллектуаль милкен урлау мөмкинлеген тикшерергә ҡушты. Шулай уҡ ул ике ил араһындағы сауҙа бәйләнештәренең ғәҙел булыуын күҙ уңында тотоусы талаптарҙы ҡатыландырыуға әҙер икәнен дә белдерҙе. Ҡытай ҙа, үҙ сиратында, ошондай уҡ аҙымдар эшләйәсәге тураһында хәбәр итте. Әлегә тиклем тығыҙ сауҙа-иҡтисади бәйләнештә булған ике ил араһындағы был мәсьәлә ыңғай хәл ителмәһә, уның эҙемтәләре ниндәй булырын күҙаллауы ауыр. Һәр хәлдә, бөтә донъя сауҙа бәйләнештәренең үҙгәреш кисереүен һәм иҡтисадта сираттағы тулҡынланыуҙарҙы көтөргә ҡала.

АҠШ-тың Иран менән дә бәйләнештәре өҙөлөү сигендә. Үҙенә ҡарата ҡабул ителгән яңы санкцияларға яуап итеп, Иран йәҙрә ракетаһы программаһына бүленгән аҡсаны арттырыуы тураһында белдерҙе. Шулай уҡ ил президенты Хәсән Роухани, әгәр ҙә Вашингтон санкциялар исемлеген киңәйтә ҡалһа, йәҙрә программаһы килешеүенән сығасағы хаҡында ла иҫкәртте. Йәҙрә ракетаһына ҡағылышлы һүҙҙәргә бармаҡ аша ҡарап булмай, сөнки һуңғы сиккә еткерелгән ниндәйҙер ил үҙенең был мөмкинлеге менән файҙалана ҡалһа, Америкаға ғына түгел, ә бөтә донъяға ҡурҡыныс янаясаҡ.

Америка шулай уҡ Венесуэланың йәшәйешенә лә "ҡыҫылып" маташа, КНДР-ға ла хәрби операциялар менән янай, Сириялағы һуғыштың уртаһында ҡайнай. Ошондай киҫкен хәл-ваҡиғалар менән сағыштырғанда, Дональд Трамптың Рәсәй һәм Европа илдәренә ҡарата алып барған сәйәсәтенә әллә ни әһәмиәт бирмәҫкә лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта уларҙың эшмәкәрлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ла ярамай. Сөнки сәйәсәттә ваҡ әйбер һәм күренеш булмай.

Дональд Трампты әле булһа Америка халҡының күбеһе ҡабул итмәй. Шуға күрә ул үҙенең иле эсендәге бөткөһөҙ ҡыҫымға һәм талауға яуап итеп, сит илдәргә ҡарата сәйәсәтен ҡаты һәм агрессив йүнәлештә алып баралыр, күрәһең, тип тә уйларға мөмкин. Ләкин ул Аҡ йортҡа урамдан инеп ултырманы, әллә күпме йылдар илдең иҡтисади, сәйәси, йәмғиәти тормошо уртаһында ҡайнап йәшәүсе булараҡ, уның "кухняһын" бөтә яҡлап та яҡшы белә. Тимәк, уның һайлау алды кампанияһы ваҡытындағы һүҙҙәрен алдаҡ, буш вәғәҙә тип ҡабул итергәме? Ә бит Дональд Трамп балыҡ кеүек йөҙгән бизнес өлкәһе яуаплылыҡ, намыҫ, етдилек, әйткән һүҙҙә тора белеүҙе талап итә. Уның эшҡыуарлыҡта ниндәй оло бейеклектәр яулауын иҫәпкә алып, сәйәсәттә лә ошо уҡ сифаттарҙы тәүге урынға ҡуя башлар һәм үҙе тирәләй хәлдәрҙе яҡшыртыр, тип өмөт итәйек. Ни тиһәң дә, ҙур һығымталар эшләү өсөн ярты йыл ваҡыт бик әҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡул тиреһе

❖ Ҡул тиреһе ярылмаһын өсөн иртәнсәк һәм кискеһен бойҙай бутҡаһы менән йыуынығыҙ.

❖ Ҡул тиреһе ҡыҙарып торһа, тигеҙ күләмдә лимон һуты менән глицерин алығыҙ һәм ҡулға һөртөгөҙ.

❖ Ҡул тиреһе үтә тупаҫланып, ярылһа, ҡәһүә шамаһы менән йыуығыҙ.

### Теш һыҙлаһа...

❖ Йәйге эҫелә ҡан баҫымы күтәрелһә, теш һыҙлаусан. Был мәлдә бесәй үләне йәки ат ҡуҙғалағы япрағын сәйнәгеҙ.

❖ Теш тишелгән булһа, йә муйыл бөртөгө, йә еҫле ыҫмала киҫәге тығып ҡуйығыҙ. Әммә оҙаҡ тотмағыҙ, теш боҙола башлай. Был сараны табипҡа мөрәжәғәт иткәнсе генә ҡулланығыҙ.

❖ Ауыҙ ҡыуышлығын меңъяпраҡ, алма үләненең йылы төнәтмәһе менән сайҡарға.

### Сәс ҡойолоуҙан

❖ Сәс ҡойолмаһын өсөн 6-8 көн дауамында көн һайын алма һеркәһе ҡушылған 1 стакан һыу эсегеҙ. 1 стакан ҡайнаған һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһе ҡушырға. 2-3 көн туҡтап торғас, тағы эсергә була. Был төнәтмә сәстәрҙе нығыта һәм үҫеүенә көс бирә, матдәләр алышыныуын да яйға һала.

### Меңъяпраҡ

❖ Ел үтә һуғып, йә һалҡын һыу кисеп һалҡын тейҙергәндә 0,5 л араҡыға 4 ҙур ғына меңъяпраҡ япрағын һалырға, 4 көн төнәтергә. Тын юлдары ауыртҡанда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Шәкәр сире

❖ Шәкәр сире лә күп хәҙер. Был сирҙән 1 ҡалаҡ сирень бөрөһөн 1 л ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә һәм ас ҡарынға көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Һайлап аша

❖ Табала ҡыҙҙырып бешерелгән ризыҡ бауыр, ашҡаҙаны ауыртҡан кешегә бөтөнләй ярамай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Һәр ваҡиға-күренеште, проблемаларҙы, һынауҙарҙы иҫкәрмә кеүек, беҙгә дөрөҫ юл күрһәткән, хаталарҙан һаҡлаған тәбиғәт законы итеп ҡабул итергә өйрәнергә генә кәрәк беҙгә. Шул ваҡытта тормошҡа ла икенсерәк ҡарарбыҙ.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандар сафы арта бара

Юлда уны туғаны Нөәйем осрата һәм:

- Ҡайҙа юлландың? - тип һорай.

-Мөхәммәтте эҙләйем. Илаһтарға ҡаршы сығып, уларҙы мыҫҡыллауы арҡаһында күпме кеше ыҙғыша, күпме кеше Мәккәнән китергә мәжбүр. Етте! Бөгөн уның һуңғы көнө! - тип яуап бирә Ғүмәр.

- Беҙҙе хашим нәҫеле менән һуғыштырырға уйлайһыңмы? Һуҡыр! Иң тәүҙә үҙ йортоңдо тәртипкә килтер! - тип әрләй башлай Ғүмәрҙе Нөәйем.

- Ә йортомда ни булған һуң? - тип аптырай Ғүмәр.

- Зәйед кейәүең тураһында белмәйһеңме? Бер туған һылыуың Фатима тураһында белмәйһеңме? Ҡайт та, үҙҙәренән һора!

Тамам аптыранған Ғүмәр кейәүҙәренең йортона юллана. Был ваҡыт Хәббәб исемле мосолман уларға Ҡөрьәндең яңы сүрәләренең береһен - "Та һа" исемлеһен - уҡып ултыра. Ғүмәр ишек шаҡый башлағас, ул соланға йәшенә, ә Фатима ҡулъяҙманы йәшереп ҡуя.

- Кем бында ниҙер мыңғырҙай ине? - тип ҡысҡырып ебәрә Ғүмәр, килеп инеү менән.

- Бер кем дә юҡ... - тиҙәр Зәйед менән Фатима.

- Илаһтарым шаһит, мин ишеттем! Һеҙҙең Ислам динен ҡабул итеүегеҙ тураһында ла беләм! - ти ҙә Ғүмәр, ярһып, кейәүен туҡмай башлай. Фатима уны туҡтатырға тырыша. Ғүмәр уны этеп ебәрә, тик көсөн самаламағанлыҡтан, Фатиманы йәрәхәтләй. Һылыуының йөҙөндә ҡан күреү менән, уны йәлләп, шунда уҡ кейәүен туҡмауҙан туҡтай.

- Эйе, беҙ - мосолмандар! Әйҙә, үлтер беҙҙе, - тип ҡысҡыра уға Фатима.

- Ниндәй дин һуң ул Ислам? Ниндәйҙер уҡыныу ишеттем бит мин. Миңә лә әйтеп ишеттерегеҙ, улайһа, - ти Ғүмәр.

- Ҡулъяҙмаларҙың береһе беҙҙә бар. Әгәр уны йыртҡыламаҫҡа ант итһәң, уҡырға бирәм, - ти Фатима.

Ғүмәр ант итә. Тик Фатима ҡулъяҙманы шунда уҡ ҡына бирмәй.

Ҡөрьәнде ҡулға алыр алдынан тәһәрәт алырға кәрәклеген аңлата. Ғүмәр быныһын да эшләй. Шунан һуң ғына Фатима уға ҡулъяҙманы тоттора. Ғүмәр сүрәне иғтибар менән уҡып сыға, уҡығанда йөҙө яҡтырғандан-яҡтыра бара. Бер нисә тапҡыр уҡыуынан туҡтап:

- Ниндәй матур һүҙҙәр! Ҡайһылай дөрөҫ әйтелгән! - ти ул, һоҡланып.

Ул уҡыған арала йәшенгән урынынан Хәббәб тә килеп сыға. Ғүмәр уҡып бөткәндән һуң уның ҡулынан ҡулъяҙманы ала ла, Ислам тәғлимәтенең асылын аңлата.

- Быға са мин быларҙы белмәнем бит... Мине Мөхәммәт янына алып бар. Мин дә Ислам динен ҡабул итергә теләйем! - ти Ғүмәр.

Хәббәб Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе ҡайҙан табырға икәнен аңлата ла, үҙ эштәре менән китә. Ғүмәр шул йортто эҙләп табып, ишек шаҡый башлай. Ишекте асмайҙар. Ҡоралланған Ғүмәрҙе күргәс, йорттағыларҙың ҡото алына.

Төпкө бүлмәнән Мөхәммәт менән баһадир Хәмзә килеп сыға.

- Кем ишек шаҡый? - тип һорайҙар.

- Ғүмәр. Уның ҡылысы бар. Беҙҙең беребеҙҙең дә ҡоралыбыҙ юҡ, - тип яуап бирәләр уларға.

- Ишекте асығыҙ. Әгәр һөйләшер өсөн килгән икән, матур итеп ҡабул итербеҙ, һуғышыр өсөн килгән булһа, уны үҙенең үк ҡылысы менән үлтерермен, - ти ҡурҡыу белмәҫ баһадир Хәмзә.

Ғүмәрҙе индерәләр.

- Ни өсөн ҡорал тотоп килдең бында? - тип һорай Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Ғүмәр үҙенең Ислам динен ҡабул итергә теләүе тураһында әйтә. Мәккәнең данлы батыры Ғүмәрҙең Ислам динен ҡабул итеүе мосолмандар өсөн бик ҙур еңеү була.

**(Дауамы бар).**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# ЮҠЛЫҠ ТАЛАШТЫРА...

## барлыҡ яраштыра

**Күптән түгел баш ҡалала Лотфулла һәм Миңлезифа Мөхәмәтшиндар бергә ғүмер итеүҙәренең 60 йыллығын билдәләне. Уларҙы баш ҡаланың Калинин районы ЗАГС бүлегендә тәбрикләнеләр. Мөхәмәтшиндар ошо районда быйылғы йылда гәүһәр туйын билдәләүселәрҙең 12-сеһе. Ә инде алтын туйҙарын 20 ғаилә туйлаған. Бөгөн, айырылышыуҙар күп заманда, бындай хәбәр йәштәр өсөн үҙе бер мөғжизә кеүек ҡабул ителә. Ни өсөн элек айырылышыуҙар аҙ булған? Һорауҙарыбыҙҙы ошондай сюжеттар төшөрөргә яратыусы Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы Гүзәл БОРХАНОВАға юлланыҡ.**

➔ **Атай-олатайҙарыбыҙ ҡорған ғаиләләрҙең ныҡлығың сере нимәлә тип уйлайһығыҙ?**



- Боронғолар эш менән мәшғүл булған. Уларҙың бөгөнгө ҡайһы бер йәштәр кеүек әрепләшеп ултырырға түгел, бер-береһен битәрләргә, бер-береһенең кире һыҙатын эҙләп ултырырға теләге лә, ваҡыты ла булмаған. Ауылдарҙа итәк тулы балалар үҫтергәндәр. Бөгөн ҡалаларҙа ғына түгел, хатта ауылдарҙа әҙәп һәм әхлаҡ кәмей бара. Сәмләнеп донъя көтөүселәр бар, әммә улар күпселек түгел. Үҙгәртеп ҡороуҙар, оптималләштереү, башҡа ваҡиғалар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән эшһеҙлек һәм билдәһеҙлек халыҡты упҡынға тәгәрәтә. Юҡҡа ғына боронғолар "юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра" тимәгән.

➔ **Ғаилә абруйын ғына түгел, ғаиләлә атай абруйын, әсәй баһаһын үҫтереү өсөн нимә кәрәк? Өфөлә был йәһәттән нимәләр эшләнә тип уйлайһығыҙ?**

- Баш ҡалала был йәһәттән ыңғай үҙгәрештәр бар, тиер инем. ЗАГС-тарҙа никах тантаналары барышында милли йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр башҡарыла, матур ғаиләләр менән осрашыуҙар ойошторола. "Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тигәнгә ишаралап, ҡала урамдарында ҡолонло аттар, ҡауҙылар, йәғни парлы ғаиләләр образдарын тыуҙырған скульптуралар күренә башланы. Юҡҡа ғына, баланы һүҙ менән түгел, ғәмәлдәрең менән тәрбиәлә, тимәйҙәр. Ошондай матур ғаиләләр, ишаралар өлгөһөндә уларҙың күңелендә ныҡлы ғаилә образы формалаша. Бына "Киске Өфө" гәзитендә матур ғаиләләр менән әңгәмәләр эшләү тәжрибәһе лә был тәрбиәгә үҙ өлөшөн индерә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты инициативаһы менән башланған Башҡорт ғаиләһе көнөн билдәләү ҙә был йәһәттән яңы күренеш, яңы һулыш булды.

Әлбиттә, һәр ғаиләнең бәхетле булыуының үҙ сере бар, һәр ғаилә үҙенсә бәхетле. Шәхсән үҙемә тормош иптәшем һәм ҡыҙым өсөн аҙнаһына бер нисә мәртәбә ҡамыр аштары бешереү, уларҙың ошо ризыҡтарҙы тәмләп, яратып ашауы - үҙе әйтеп аңлатып булмаған бәхет. Әммә ғаиләлә һауыт-һаба ла шылтырамай тормай, шул ваҡытта ла саманан сығырға, атай абруйын ергә һалып тапарға, үҙеңдең ҡатын-ҡыҙ икәнлегеңде онотторға ярамай. Был ҡыҫҡа ғына ғүмерҙә үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәт һәм бер-береңде аңлап, ихтирам иткәндә генә татыу ғүмер кисерергә мөмкин. Дөйөмләштереп әйткәндә - барыһы ла үҙеңдең ҡулыңда.

➔ **Ысын ир-егетте, буласаҡ аҡһаҡалдарҙы әсәйҙәр тәрбиәләй, тигән фекер менән килешәһегеҙме? Килешмәһәгеҙ, ни өсөн килешмәйһегеҙ?**

- Ысын ир егетте ни эшләп әсәһе генә тәрбиәләһен? Бөтөн яуаплылыҡты әсәйҙәргә генә ҡайтарып ҡалдырырға ярамай, минеңсә. Мәҫәлән, Урал ҡустым атайымдан һәм олатайымдан бер тотам да ҡалмай ине. Уларға эйәреп, балта эшенә, утын әҙерләргә, бесән эшләргә, тимерселек һәм сварка эшенә өйрәнде. Башлы-күҙле булғас, атайым кеүек, балаларына йомшаҡ күңелле изгелекле атайға әйләнде. Ҡатынын хөрмәт итте. Бар тапҡанын атайым кеүек ғаиләһенә һәм балаларына тотондо. Әсәй ғаиләлә һүҙ менән тәрбиәләһә, атайҙар малайҙарҙы ир-егет, аҡһаҡал итеп үҙ өлгөһөндә тәрбиәләй. Һәр хәлдә, шулай булырға тейеш үҙебеҙҙең башҡорт йолаһы буйынса. Йолаларыбыҙҙы онотмайыҡ!

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ҺАБАҠТАР

# ОСРАҠЛЫ БУЛМАЙ БЕР НӘМӘ ЛӘ...



**Тормошобоҙ төрлө ваҡиғаларҙан тора. Эштә лә, ғаиләлә лә, урамда ла беҙҙе көн һайын ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр, хәлдәр көтә, яңы кешеләр осрай.**

Уларҙың ҡайһы берҙәрен беҙ иғтибарға ла алмайбыҙ. Айырыуса яҡшы күренештәрҙе, шулай булырға тейеш, тип кенә ҡабул итәбеҙ. Ниндәй ҙә булһа күңелһеҙлеккә осраһаҡ ҡына, йәки уйлағаныбыҙ алдыбыҙға килмәһә, дөрөҫөрәге, үҙебеҙ теләгәнсә булмаһа, бер аҙ уйланабыҙ, ғәйеплеләрҙе эҙләйбеҙ. Мәҫәлән, юлыбыҙ уңмаһа, юлға сыҡҡанда беренсе булып кем осрағанын иҫкә төшөрөргә маташабыҙ. Берәй ҡапма-ҡаршылыҡҡа осраһаҡ, күргән төштө хәтерләйбеҙ. Шунан үҙебеҙ өсөн юллыҡһыҙ, төшлөкһөҙ кешеләрҙе уйлап табабыҙ. Әммә теге йәки был һынауҙы үтергә тейешлегебеҙ хаҡында уйланмайбыҙ. Ныҡлабыраҡ уйланһаң ғына беҙҙе уратып алған хәл-ваҡиғаларҙың бөтәһендә лә тиерлек ниндәй ҙә булһа мәғәнә һәм бәйләнеш барлығын тояһың.

Кешеләр менән осрашыу, танышыу ҙа осраҡлы түгел. Ниндәйҙер көс тарафынанмы, әллә Аллаһы Тәғәлә әшкәртәме, бер-береһенә кәрәкле, мохтаж булғанға кеше кеше менән осраша.

Миҫалға күптән түгел үҙем менән булған хәлде килтермәксемен. Үҙәк урамдарҙың береһендә яҡут ҡашлы һыу тамсыһына оҡшаған һыңар алҡа табып алдым. Шунда уҡ ломбардҡа тапшырырға уйлағайным, сумкала паспорт булмай сыҡты. Быны иртәгәгә ҡалдырып, ҡайтып киттем. Ауылдан килгән күстәнәстәр менән сәй эсергә генә ултырғайным, телефон шылтыраны. Алһам - эш буйынса таныш икән. Йомошон әйтеп тә өлгөрмәне, мин уны сәйгә саҡырҙым - күмәкләп ашаһаң, күстәнәс тағы ла тәмлерәк була бит.

Быға тиклем аралашыуыбыҙ рәсми генә булһа ла, танышым баш тартманы. Һөйләшә-һөйләшә сәй эстек, йомош та йомошланды. Шулай, әңгәмәләшеп ултыра торғас: "Минең бөгөн бик күңелһеҙ көнөм - яратҡан алҡамды юғалттым", - тип әйтеүе булды, мин бер-бер артлы: "Алтынмы, ҡашы яҡутмы, тамсыға оҡшағанмы?" - тигән һорауҙарымды яуҙыра ла башланым. Береһенә яуап алып өлгөрмәйем, икенсеһен, өсөнсөһөн бирәм. Бөтәһенә лә яуап биреүенә алҡа уның ҡулында ине инде. Был хәлгә уның да, минең дә ғәжәпләнеүебеҙҙең сиге булманы. Бына бит, бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйған юлына! Көнө буйына бүләк-алҡаны төшөрөп ҡалдырыуына ҡайғырып йөрөгән булған, ә бында уны табырға осраҡ ярҙам итте.

Бер нәмә лә осраҡлы булмай, тигәнгә шулай тағы бер тапҡыр инандым. Һәр ваҡиға-күренеште, шулай уҡ проблемаларҙы, һынауҙарҙы иҫкәрмә кеүек, беҙгә дөрөҫ юл күрһәткән, хаталарҙан һаҡлаған тәбиғәт законы итеп ҡабул итергә өйрәнергә генә кәрәк беҙгә. Шул ваҡытта тормошҡа ла икенсерәк ҡарарбыҙ, сәбәләнмәҫбеҙ, күңелебеҙ тынысыраҡ булыр. Шулай иткәндә, яҡын кешеләребеҙ ҙә беҙҙең эргәлә үҙен рәхәтерәк тойор.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**✓ *Тамъяндарҙың ата-бабалары ҡасандыр Дим йылғаһының үрге ағымында көн итеп, һуңыраҡ көньяҡҡа, Ағиҙел буйына күсенгән. XIV быуатта уларҙың күбеһе бөрйәндәр һәм түңгәүерҙәр кеүек, урманлы-таулы ерҙәрҙе төйәк иткән.***

*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*

# МӨҒӘЛЛИМЛЕК -

## мәғрифәтсе олатайҙарым аманаты

**Бөйөк мәғрифәтсе-шағир Аҡмулла заманында халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн борсолоп, "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән оран ташлаған. Бөгөнгө көндә уҡыу, ғилем алыуҙың айырым бер кеше өсөн генә түгел, ә тотош халыҡтың киләсәге өсөн бик мөһим шарт булыуын бер кем дә инҡар итмәй. Ә кем булған һуң халыҡҡа белем нуры сәсеүсе, донъя мәҙәниәте байлыҡтары менән таныштырыусы, яңы, бығаса күрмәгән үрҙәргә әйҙәүсе кешеләр? Әлбиттә, мәғрифәтсе-уҡытыусылар.**



1918 йылдың июлендә Стәрлетамаҡты аҡ чехтар менән казактар баҫып ала. Тирә-яҡтағы урмандарҙа большевиктар партизан отрядтары ойоштора. Аҡтар Әлимғоловтың был ваҡытта Ҡамбулат ауылында йәшәгән ғаиләһен юҡ итеү менән янап, уның урмандан сығыуын талап итә. Казактар Әлимғоловтың өйөндә тентеү яһай. Өйҙәге бөтә нимәне пыран-заран килтерәләр, мендәрҙәрҙе ҡылыс менән тураҡлайҙар. Ултырғысты әйләндереп, ат итеп уйнап йөрөгән, ике йәше лә тулмаған Тәлғәтте: "На, малҡай, атайҙы барып алам", - тип йөрөгән еренән тибеп осоралар. Фатима Әлимғолова балаларын инә ҡаҙ кеүек бер мөйөшкә йыйып, ҡулдарын йәйеп, һаҡлап ҡалырға тырыша. Арыҫланбәк олатайҙың өлкән улы Мөҡәддәсте, ҡартайған атаһы Арыҫланғәли Әлимғоловты казактар үҙҙәре менән Ергәнгә алып китә. Икеһен дә иҫтән яҙғансы туҡмап, юл буйындағы канауға сығарып бәрәләр. Олатайым Мөҡәддәс һөйләүе буйынса, ул аңына килгәс, башта ҡайҙа икәнен дә аңламай. Олатаһының ыңғырашҡанын ишетеп, уның янына шыуышып бара. Олатаһын арҡаһына йөкмәп, Ағиҙел яғына табан ҡуҙғала. Ҡамбулатҡа Иҙел аша кәмәләр өҫтөнән һалынған күперҙән сығырға кәрәк. Күпер төбөн ике казак һаҡлап тора. Әлимғоловтар лаяҡыл иҫерек булып ҡыланып киләләр. Казактарҙың береһе быларҙы саҡ атмай, икенсеһе: "Сыҡһындар, иҫерек башҡорттар бит былар, улар ни эшләй алһын?"- ти. Ошо туҡмалыуҙан һуң Арыҫланғәли олатай түшәктән тора алмай, йыл буйы бөйөрө менән яфаланып ятҡандан һуң, вафат була. Ҡарт атаның тән яраларына йән яралары ла ҡушыла, ғаиләгә ҡара ҡайғы килә - оҙаҡламай Арыҫланбәк Әлимғоловтың Стәрлетамаҡта аҡтар тарафынан язаланып үлтерелеүе билдәле була.

Ғаиләһен һаҡлап ҡалыу өсөн Арыҫланбәк олатайыбыҙ үҙен ҡорбан итә. Тотҡон Арыҫланбәк Әлимғоловты казактар менән чехтар Аллағыуат ауылына алып килә, төнгөлөккә ҡәйнеше Насирйән өйөндә туҡтайҙар. Ҡәйнеше ҡасып китергә өндәһә лә, Арыҫланбәк: "Үҙегеҙҙе юҡ итерҙәр", - тип, риза булмай. Стәрлелә төрмәлә уны бик ҡаты язалайҙар, гел шомпол менән туҡмалған тәне сей яраға әйләнә. Уның янына барып йөрөгән Насирйән бабайыбыҙ еҙнәһенең тәненә һөртөргә тип шифалы майҙар ҙа алып барып ҡарай. Төрмәлә оҙайлы һорау алыу, язалауҙарҙан һуң Стәрлетамаҡтың реввоенкомитет ағзалары менән бергә уны аҡтар 1918 йылдың 27-28 сентябрендә Өфө трактының 5-се километрында атып үлтерә. Аҡтар Стәрлелә, Ишәй ауылы янында күпләп кеше атҡандарын халыҡҡа һиҙҙермәҫкә тырыша. Бары аҡтарҙы Стәрленән ҡыуғас, атылыуҙан осраҡлы ғына ҡотолоп ҡалған Фазыл Шәмсетдиновтың һөйләүе буйынса, фажиғә урынын табалар. Мәйеттәрҙе Стәрлетамаҡта больница барагына алып киләләр. Бер кемде лә танырлыҡ булмай, сөнки кешеләр мылтыҡ төйҙәһе менән туҡмалған, штык менән сәнселеп, ҡанға батҡан булған. "Стерлитамакский рабочий" гәзитендә 2016 йылда баҫылып сыҡҡан "Улица моего прадеда" тигән мәҡәләһендә В. Ивлев тигән автор шулай тип яҙа: *"Факт массовых расстрелов белые поначалу скрывали, говорили, что всех заключённых отправили в Сибирь. Тела расстрелянных обнаружили только в декабре, благодаря Фазылу Шамсутдинову, умудрившемуся сбежать в последний момент из-под расстрела. Их извлекли и привезли в бараки городской больницы, известили родственников для опознания. Это было нелегко. Тела были страшно изувечены, исколоты штыками, в крови вперемешку с землёй. Весь пол бараков был устлан трупами. К тому же там было очень темно. Одним из первых Любовь Ивлева опознала председателя ревкома Прозоровского и его супругу, обмыла их тела. Несколько дней подряд она приходила в бараки вместе с дочерьми, обмывала останки и только по особым приметам, наконец, опознала супруга. Лицо его было разбито прикладом, как потом выяснилось, он попытался вырвать у охранника винтовку. Стерлитамакская трагедия 1918 года войдёт в историю города как одна из самых мрачных страниц".*

Арыҫланбәк Әлимғоловтың кәүҙәһен таныусы табылмай, ул урыҫ зыяратында йәшерен генә ерләнә. 1920 йылдарҙа Стәрлелә уҡыған малайҙары был урынға барып йөрөй. Коммунистарҙың атылған урынында һәйкәл ҡуйыла, тик унда бер нисә кешенең исеме яҙылмай ҡала.

Арыҫланбәк Арыҫланғәли улының балалары: Мөҡәддәс (1897-1985), Әхнәф (1906-1970), Искәндәр (1908-1974), Гөлсөм (1912-1968), Тәлғәт (1917-1941), Әнүәр (1919-1941); Фәриҙә, Мәрйәм (йәшләй вафат булалар). Уларҙың барыһы ла тиерлек уҡытыусы булып эшләне, олатайым Мөҡәддәс тә 1920 йылдарҙа Юлдаш ауылында (Ишембай районы) уҡытҡан. Инде оло йәштә сағында ла уға ҙур ғына урын биләгән кешеләр урыҫ телендә төрлө документ яҙҙырырға килә торған булған. Урыҫса сыҡҡан гәзит-журналдар алдырып уҡый, беҙгә хаттарҙы ла урыҫса яҙыр ине. Миңә был хәл бик ҡыҙыҡ булып тойола ине, сөнки тирә-яҡта улай рус телен яҡшы белгән бабай-әбейҙе күргәнем булманы.

Ни өсөн яҙҙым һуң мин был яҙманы? Әлбиттә, бик күп нимә бында сағылдырылып бөтмәне. Арыҫланғәли, Арыҫланбәк Әлимғоловтарҙың нәҫеле ишле, беҙ, уның ейән-бүләләре генә лә йөҙҙән ашыу. Һәр беребеҙ уларҙың бер ярсығы, хол-ҡобоҙҙа уларҙың сағылышы бар. Туғандарымдың күбеһе, олатайҙар кеүек, ғүмеребеҙҙе балалар уҡытыуға бағышланы. Был эште беҙ ауыр бер йөк итеп түгел, ә олатайҙарҙан ҡалған бер аманат итеп ҡабул итеп, ҙур ихласлыҡ менән, бар көсөбөҙҙө биреп башҡарабыҙ. Башҡортостандың автономия яулауына 100 йыл тулыу уңайынан халҡыбыҙға аң-белем таратыуҙа ҙур өлөш индергән аталы-уллы Арыҫланғәли Ғәләүетдин улы һәм Арыҫланбәк Арыҫланғәли улы Әлимғоловтарҙы ла иҫкә алыу урынлы булыр тип иҫәпләйем. Олатайҙарым менән ысын күңелдән ғорурланам, уларҙың исемен мәңгеләштереүҙе мөҡәддәс бер бурысым, тип иҫәпләйем.

**Миләүшә ӘХМӘТЙӘНОВА-ҒҮМӘРОВА,**
**уҡытыусы.**
**Балтас районы Иҫке Балтас ауылы.**
**(Аҙағы. Башы 31-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Тамъяндар

Тамъяндарҙың ата-бабалары ҡасандыр Уралға Алтайҙан күсеп килгән, тигән фекер әле лә йәшәй. Ҡаҙаҡ этнографтарының тама һәм тана ырыуҙары монголдарҙың тума ырыуы менән туғандаш тигән фаразы ҡыҙыҡлы. Рәшит-әт-дин мәғлүмәттәре буйынса, тумат ырыуы XIV быуатта Енисейҙың үрге ағымында көн иткән. Р. Кузеев ҡаҙаҡ ғалимдарының фаразын яҡлай: был дәүерҙә монголдар араһында тумэт ырыуы булған.

XVIII-XIX быуаттарға ҡараған архив сығанаҡтары буйынса Верхнеурал өйәҙендә Тамъян-Түңгәүер улысы булған, уға Хәлит, Үтәгән, Аҫҡар, Буранғол, Ярлыҡап ауылдары ҡараған. Уларҙы бер улысҡа индереү тамъяндар менән түңгәүерҙәрҙең күршеләш йәшәүе хаҡында һөйләй. Күрәһең, уларҙың ата-бабалары Саян, Алтай буйҙарында иңгә-иң терәшеп көн иткәндер. Тамъяндар монгол ҡәбиләләренең варисҭары булып һанала. Уларҙың көнсығыш Европаға күсенеү тарихына күҙ һалайыҡ. Төркиләшкән монголдар Төрөк ҡағанаты осоронда Етейылғаға, артабан көнбайышҡа күсенә. Әммә улар башҡа эре ҡәбиләләр араһында юғалып ҡала. Тама ырыуының бәшәнәктәр ағымында X быуатта уҡ бөрйән һәм үҫәргән башҡорттары менән Яйыҡ һәм Волга буйына күсенеүе ихтимал. Шуға күрә "там ян" атамаһы бәлки XI быуатта бергә йәшәгән "бөр йән", "үҫәр гән" ырыуҙарына оҡшатып барлыҡҡа килгәндер. Аҙаҡтан тамъяндар Уралға, бөрйәндәргә яҡынyраҡ урынға килгән. Яйыҡ һәм Ымба йылғалары араһында көн күргән Турғай буйы көнсығыш башҡорттары тамъяндар, ҡаҙаҡтар менән күршеләш тана ырыуҙары урта быуаттарҙа уҡ аралашып йәшәгәндәр. Ҡаҙаҡ ғалимы В. Востров тама менән тана ырыуҙары араһында айырмалыҡтың "м" һәм "н" хәрефтәренә генә ҡайтып ҡалыуын әйтә.

Мәғлүмәттәр буйынса, тамъяндарҙың ата-бабалары ҡасандыр Дим йылғаһының үрге ағымында көн итеп, һуңыраҡ көньяҡҡа, Ағиҙел буйына күсенгән. XIV быуатта уларҙың күбеһе бөрйәндәр һәм түңгәүерҙәр кеүек, урманлы-таулы ерҙәрҙе төйәк иткән.

### Түңгәүерҙәр

"Түңгәүер" этнонимы монголдар менән бәйле. Уны Ҡуңғырат бейҙең улы Дингәүер менән бәйләйҙәр. Күрәһең, түңгәүерҙәрҙең этник тарихы монголдарҙың боронғо ҡуңғырат ырыуы менән бәйлелер. Улар үҙ мәлендә төркиләшеп, үзбәк һәм башҡа төрки халыҡтарҙың формалашыуында ҡатнашҡан. Түңгәүерҙәрҙең төркиләшеүе Төрөк ҡағанаты йоғонтоһонда башланып, боронғо бәшәнәктәр мөхитендә тамамланған. Түңгәүер ҡәбиләһенә һыҙғы һәм өпәй ырыуҙары инә.

Һыҙғылар менән өпәйҙәр Урал алдының боронғо ырыуҙары, XIII-XIV быуаттарҙа улар дөйөм ырыуҙар ағымы менән төньяҡҡа һәм төньяҡ-көнсығышҡа йүнәлгән. Улар боронғо башҡорт мөхитендә үк, юрматы-юрмый, башҡорт-бөрйән этник синтезы осоронда төркиләшкән. Һуңынан монголдар ҡыҫымында улар көньяҡ Уралға күскән. Артабан сәйәси ваҡиғалар уларҙы Нөгөш, Ағиҙел буйына алып килгән.

**(Дауамы бар).**

*✓ Табылған мәғлүмәттәрҙән сығып, географик билдәләнеш буйынса, ошо ике йылға тоташҡан ерҙәге ҡаланың, йәғни әлеге Өфө урынындағы ҡаланың, тап "Башҡорт ҡала" тип аталыуына иманым камил.*

# ГЕОГРАФИК
## халҡыбыҙ тарихында

**Фән өсөн заман да, ваҡыт та юҡтыр. Ул ниндәй генә быуаттарҙа, йылдарҙа һәм шарттарҙа ла асыштар яһауҙан, яңылыҡтар алып килеүҙән туҡтамай. Кешелек ниндәй генә осор, хәл һәм ваҡиғалар кисергәндә лә фән эҙләнеү өҫтөндә. Ул һуғыштарҙан, сәйәсәттән ситен, яһалмалыҡтан, алдаҡтан өҫтөн, тыйыу-сикләүҙәргә һыймаҫ, хис-тойғоға бирелмәҫ, ә бары хәҡиҡәтте генә ярып бирер айырым бер донъялыр. Һәм был донъяға бары тик уның асылын һәм мөһимлеген аңлаусылар ғына хеҙмәт итә торғандыр. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, география фәндәре докторы, профессор Айбулат Вәли улы ПСӘНЧИН дә ана шундайҙарҙан. Ул ғалим ғаиләһендә тыуып үҫеп, шул мөхит ҡиммәттәрендә тәрбиәләнеп, бөгөн үҙе лә ошо өлкәгә хеҙмәт итеүселәрҙән.**



***АЙБУЛАТ ПСӘНЧИН:***

*Бөгөн башҡорт телендә аралаша алғандар инглиз телен, төрки телдәрҙе тиҙ өйрәнә. Башҡортса белгән көйө генә лә теләһә ниндәй төрки телле илгә сыҡ - аңлашаһың. Шунлыҡтан, һәр ата-әсә балаһын телһеҙ башҡорт итмәҫкә тырышһын ине.*

**Һеҙҙең ғаилә уникаль күренеш - бер өйҙән өс профессор. Атайығыҙ Вәли Шәғәли улы башҡорт тел белгесе, төркиәтсе, БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, ағайығыҙ Юлай Вәли улы шулай уҡ башҡорт филологияһы фәнен өйрәнеүсе ғалим. Тотош бер ғалимдар династияһын булдырғанһығыҙ. Һөйләп китегеҙ әле, нисек тәрбиәләнеләр һеҙҙе - буласаҡ ғалимдарҙы?**

- Эйе, беҙ бер ғаиләнән өс фән докторы сыҡҡанбыҙ. Әммә бының өсөн нисектер айырым тәрбиәләндек, тимәҫ инем. Әйтемдәгесә, атанан күргән - уҡ юнған, йәки, баланы һүҙ менән тәрбиәләмә, ул барыбер үҙең кеүек буласаҡ. Шуның һымаҡ, беҙ ҙә бәләкәйҙән атайыбыҙҙың өҫтәл артында яҙышып ултырып, фән донъяһына хеҙмәт иткәнен күреп үҫтек. Әсәйебеҙ иһә, атай эшләгәндә шауламаҫҡа, ҡамасауламаҫҡа, уның хеҙмәтенә хөрмәт менән ҡарарға өйрәтте. Атайҙың аралашҡан ғаилә дуҫтары ла, коллегалары ла шундай уҡ фән белгестәре, бик ҡыҙыҡлы шәхестәр ине. Беҙ улар килгәндә, ҡыҙыу бәхәстәр, һөйләшеүҙәр алып барғанда, шым ғына тыңлап ултыра торғайныҡ.

Быларға өҫтәп, атайҙың бик бай китапханаһы булды. Шул китаптар донъяһында йөҙәнек инде. Ҡулға китап тоттороп, "уҡы", тигән кеше лә булманы, артыҡ баҫым яһап, дәрес әҙерләтеүсе лә юҡ ине. Әммә ағайым менән икебеҙҙең дә ҡулдан китап төшмәне, шул китапханалағы бар әҙәбиәтте лә, хатта үҙ йәшебеҙгә әле аңлайышһыҙ булған фәнни әҙәбиәтте лә белергә ынтылдыҡ. Төшөнөп етмәгәндәрҙе атайҙан һорап, һөйләтеп ала торғайныҡ. Ул да, нисек кенә эше күп булһа ла, беҙгә ваҡыт бүлә белде. Бергәләп саңғыға, каточка, һыу инергә йөрөнөк, йәйҙә шахмат-шашка уйнайныҡ, баҡсала тир түктек. Күреүегеҙсә, беҙҙе берәү ҙә ғалим итеү маҡсатында тәрбиәләмәгән, ябай балалар, ҡәҙимге малайҙар булып үҫтек.

**Атайығыҙ менән ағайығыҙ башҡорт тел ғилеме ғалимдары булһа, һеҙ ҡырҡа икенсе йүнәлеште - географияны һайлағанһығыҙ. Был ҡарар нимәгәләр нигеҙләндеме? Шулай уҡ картография өлкәһендәге хеҙмәттәрегеҙ хаҡында ла белге килә.**

- Баш ҡаланың 20-се мәктәбендә уҡығанда география фәне бик ҡыҙыҡлы итеп алып барылды һәм күп кенә балаларҙы үҙенә йәлеп итте. Мин был өлкәне яҡшы аңланым, география, геология буйынса олимпиадаларға йөрөп, башта Башҡортостан, унан Рәсәй йыйылма командаһына инеп киттем. Юғары кластарҙа геологтарға ҡушылып, экспедицияларға сыға башланыҡ. Унан инде юғары белем алырға ла география факультетына уҡырға индем. Аҙаҡ университетта бер нисә йыл эшләнем. Тарихҡа булған ҡыҙыҡһыныу ҙа көслө ине һәм мин тарихи география йүнәлешен һайланым. Рәил Ғүмәр улы Күзеев менән кәңәшләшеп, Археология һәм этнография музейында эш башланым. Мәскәүҙең этнология һәм антропология институтында стажировкаларҙа белемемде камиллаштырҙым.

Карталарҙы өйрәнеүгә килгәндә инде, был өлкәнең һаман беҙҙең ғалимдарҙың иғтибарынан ситтә ҡалып килеүе этәргес булғандыр. Башҡорт милли ҡомартҡыларын, телен, тарихын юғары кимәлдә өйрәнгән абруйлы ғалимдарыбыҙ булды, әммә тап карталарҙы тарихи сығанаҡ итеп өйрәнеү артыҡ үҫешмәне беҙҙә. Был мәғлүмәт инештәрен күберәк Рәсәй картографияһынан алдыҡ, ә унда урта быуат карталары һаҡланмаған да тигәндәй. Чертеждар Мәскәүҙәге яңғындар ваҡытында ла юҡҡа сыҡҡан, шулай уҡ башҡа сәбәптәре лә булғандыр, һәр хәлдә, беҙҙең ҡулға һуңғы быуаттар (ун алты-ун етенсе) карталары ғына килеп эләгә ине. Ә бит донъя карталарында бик боронғо замандарҙа ла Башҡорт ере, Урал төбәге билдәләнгән. Германия, Голландия, Италия, Франция һәм Көнсығыш карталарын ентекле тикшереп, был өлкә буйынса фәнни эш яҙырға тура килде,"Иҫке карталарҙағы Башҡортостан" тигән баҫма ла сыҡты.

Әйтеп үтергә кәрәк, Урал йылғаһы бик боронғо заманда уҡ Птолемейҙың картаһында ла Яйыҡ (Даикс) атамаһы аҫтында теркәлгән. 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ҡала янында йәшәүселәр ҙә башҡорттар тип күрһәтелгән. Ҡайһы бер ғалимдар бының менән килешмәй ҙә, әммә мин табылған мәғлүмәттәрҙән сығып, географик билдәләнеш буйынса, ошо ике йылға тоташҡан ерҙәге ҡаланың, йәғни әлеге Өфө урынындағы ҡаланың, тап "Башҡорт ҡала" тип аталыуына иманым камил. Был бер генә инештән алынған мәғлүмәт түгел. Мәҫәлән, ун һигеҙенсе быуатта Европанан килгән картограф ғалимдар эшләгән Азия картаһында ла ошо географик ерлектәге ҡала "Баскир" тип билдәләнә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу урыны аныҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә. Пашкерти тағы ла аныҡыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркаторҙың атласы 1595 йылда автор вафат булғас донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай.

Бөгөн беҙгә карталар буйынса сит илдәрҙә эшләү етмәй. Мәҫәлән, Ватикан китапханаһында бай тарих барлығын белебеҙ һәм шунда эҙләнеү эштәре ойоштороу хаҡында хыялланабыҙ. Париж милли архивында ла Рәсәй һәм Башҡортостан буйынса мәғлүмәттәр булырға тейеш. Киләсәктә был пландар ҙа тормошҡа ашыр тип уйлайым.

**Әҙәбиәт йәштәргә ҡытлыҡ кисерә, тигән оранды йыш ишетәбеҙ. Ә фәнгә киләме йәштәр? Йәшәрәме был өлкә, әллә уның киләсәге бик өмөтлө түгелме?**

- Йәшерен-батырыны юҡ, фәнгә йәштәр аҙ килә. Әммә был бер фән өлкәһенә генә хас түгел, ә бөтә донъяла шулай белем кимәленең түбәнәйеү күренеше күҙәтелә. Мәҫәлән, беҙҙең йәш ғалимдар күберәген ауылдарҙан сыға. Һәм улар алдында иң беренсе сиратта торлаҡ мәсьәләһе тора. Күп кенә ғалим булып үҫерҙәй йәштәр, ошо сәбәпле, районға ҡайтып китергә мәжбүр. Бының етди мәсьәлә икәнлеген аңлап, Рәсәй Фәндәр академияһы, хәҙер инде Федераль агентлыҡ был проблеманы хәл итергә тырыша. Мәҫәлән, утыҙ биш йәшкәсә, биш йыллыҡ стажы булған ғалимдарға торлаҡҡа сертификат бирелә. Беҙҙә был ярҙам менән ҡулланыусылар бар.

Шулай ҙа беҙҙең институтта йәштәр бөтөнләй юҡ түгел, уларҙың өсәүһе Рәсәй Президенты стипендиаты. Бөтә Рәсәй буйынса ҡарағанда, гуманитар өлкә академик учреждениеларында бер нисә генә аспирант булһа, шуларҙың өсәүһе беҙҙәке. Нисек кенә булғанда ла, ошонда көс һалған ветерандарҙың (уларҙың күптәре инде мәрхүмдәр) юлын дауам иттерергә кәрәк. Йәштәрҙе үҫтереү һәм бар яҡлап ярҙам ҡулы һуҙыу - беҙҙең бурыс.

**Башҡорт донъяһын өйрәнеү өлкәһендә ниндәйҙер яңылыҡтар бармы?**

- Башҡорттарҙы өйрәнеү буйынса донъялағы иң төп институт булараҡ, башҡортса белеүҙе генә түгел, иҫке төрки, ғәрәп, фарсы, инглиз телдәрен белеүҙе лә талап итеп ҡуйыбыҙ хәҙер. Хатта үҙебеҙҙә махсус курстар булдырҙыҡ. Беҙҙең барлыҡ сығанаҡтар шул иҫке телдәрҙә, ғәрәп-фарсы, инглиз һәм башҡа ил сәйәхәтселәре, ғалим-тикшеренеүселәре яҙмаларында һаҡлана.

Шуны аңларға кәрәк: Башҡортостан, Рәсәй фәне генә түгел, ә донъя фәне бар. Шуның өсөн беҙҙең ғилми хеҙмәткәрҙәр донъяуи проблемаларҙа ла күрә белергә тейеш. Фәнде ана шул донъяуи күҙлектән, комплекслы итеп өйрәнергә кәрәк тә. Бөгөн беҙҙең йәш ғалимдар сит илдәрҙә уҙғарылған инглиз телле конференцияларҙа ҡатнашырлыҡ кимәлдә булырға тейештәр.

**Бөгөнгө генетик тикшереүҙәр быға тиклем тел, филология һәм башҡа тарихи сығанаҡтар аша яһалған асыштарҙың күптәренә төҙәтмә индерҙе, ә ҡайһы берҙәрен кире лә ҡаҡты. Ниндәйҙер баҫмалар төҫһөҙләнеп тә ҡалды, шулай бит?**

- Мин быны ниндәйҙер революция итеп ҡабул итмәйем, бының да үҙ аңлатмаһы бар. Фән тарихына ҡараһаҡ, ул төрлө осорҙар кисерә. Һәр фәндә лә интеграциялар, дифференциация бар. Ул үҫә-үҫә килә төрлө тармаҡтарға бүленә башлай. Шулай бүленә-бүленә лә, кире дөйөмләшә.

# КАРТАЛАР...

## яңы биттәр асты

Мин был үҙгәрештәрҙе, яңылыҡтарҙы фәндәге төрлө алымдар тип ҡарайым.

Мәҫәлән, лингвистиканы алайыҡ. Илленсе йылдарҙа компьютерҙар ҡулланыуға инә башланғас, эвм машиналар, лингвистикала математик алымдар бик популяр булып китә. Хатта был өлкә башҡа юлдар менән дөрөҫ өйрәнелмәгән һәм инде икенсе төрлө өйрәнеү булмаҫ та кеүек ине. Әммә бара-бара был ысул яйлап һүнде. Әлеге этно-генетик тикшеренеүҙәр ҙә халыҡты тикшереүҙең иң төп йәки иң хатаһыҙ ысулы була алмай. Гаплотөркөмгә генә ҡарап, тотош халыҡты ҡуҙаллау етерлек түгел. Әлбиттә, был тикшереүҙәрҙең ыңғай яҡтарын да күрәм һәм баһалайым. Әммә тел, фольклор һәм яҙма сығанаҡтарһыҙ, дөйөм ҡуҙаллау, дөйөм күренеш барлыҡҡа килмәй. Тик этногенетик күрһәткестәргә генә ҡарап, яңы фекерҙәр әйтеү ҙә бик үк дөрөҫ булмаҫ ине. Бында баланс булырға тейеш. Сөнки фән - ул шундай нәмә, ваҡыт үтеү менән был асыштар барыбер тикшеренеү ысулы булып ҡына ҡалыр - кем белә...

**Башҡорт теле юғалып барған телдәр иҫәбендә, тиҙәр. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

- Был проблеманың төрлө яҡтары бар. Тел, тигәндә, беҙ үҙ ерлек халҡын ғына алабыҙ. Административ картаға ҡараһаң, башҡорттар күрше өлкәләрҙә лә күп йәшәй. Улар милли-мәҙәни аралашыуҙан мәхрүм булып ҡалған, шулайтып, уларҙы юғалтабыҙ ҙа. Мәҫәлән, ырымбурҙар башҡортса һөйләшеү түгел, башҡортса сараны ла йылына бер генә үткәрә алалыр. Был тәңгәлдә мәҙәниәт, телевидение, яҙыусылар, уҡыу-уҡытыу мәсьәләләрен дә үҙ эсенә алған комплекслы программа менән эшләү фарыҙ.

Өфөлә бөгөн башҡорт мөхите бар. Әлегерәк ул да юҡ ине. Телде һаҡлауға, үҫтереүгә булышлыҡ иткән закондар барлығын оноторға ярамай. Ғөмүмән, башҡорт теле бөтә, тип оран һалыу ярамай. Донъя кимәленән ҡарағанда, бар телдәрҙә лә ябайлаштырыуға йүнәлеш алынған. Халыҡтар бер-береһенә йөгөнтө яһаған кеүек үк, телдәр ҙә бер-береһенә үтеп инә. Телдең конструкцияһы ла ҡыҫҡартыла, ябайлаштырыла. Был бигерәк тә һөйләү теленә ҡағыла. Был тәңгәлдә лә ғалимдарыбыҙ тикшеренеүҙәр алып бара, әлбиттә.

Социологияла, шәхес социализацияһы, тигән шундай төшөнсә бар. Социализация ғаиләлә башлана. Мин, мәҫәлән, Өфөлә тыуып үҫһәм дә, башҡортса яҡшы беләм. Бәләкәй саҡта беҙҙең менән өйҙә башҡортса һөйләштеләр - шул ғына. Үҫә бара, әлбиттә, руссаға күсеп кителде, әммә туған тел ҡанға, аңға һалынып өлгөргәйне инде. Балаһы туған телдә өйрәтеү - ғаилә бурысы. Бында башҡа бер кем дә ғәйепле түгел, тик ата-әсәлә бар яуаплылыҡ! Элек тә ауылдарҙа мәктәптәр аҙ булды, бәләкәй ауылдарҙа йәшәүселәр балаларын ҡалаға йәки район үҙәктәренә йөрөтөп уҡытты. Башҡорт кластары ла бөтә ерҙә лә булманы, әммә беҙ бит туған телде белдек. Бөгөн башҡорт телендә аралаша алғандар инглиз телен, төрки телдәрҙе тиҙ өйрәнә. Башҡортса белгән көйө генә лә теләһә ниндәй төрки телле илгә сыҡ - аңлашаһың. Шунлыҡтан, һәр ата-әсә балаһын телһеҙ башҡорт итмәҫкә тырышһын ине.

**Милләтселек ниндәй нигеҙҙә барлыҡҡа килә, һеҙҙеңсә? Ниндәйҙер халыҡтың ҡыҫырыҡланыуындамы, әллә башҡа сәбәптәрҙәнме?**

- Милләтселек, йәғни агрессив йөкмәткеле милләтселек ул рухи кимәлдә барлыҡҡа килмәй, уның сығанағы иҡтисади мәсьәләләрҙә яталыр, тип уйлайым. Иҡтисади ауырлыҡтар кисермәгән халыҡ агрессив булмай ҙа. Мәҫәлән, миңә эш хаҡы етә, мин ул аҡсаға ғаиләмде туйҙыра, балаларымдың киләсәген ҡайғырта, уларға бөтөн йәшәү шарттары булдыра алам икән, минең рухым да сәләмәт була. Кемдер мине кәмһетә, минең телемдән көлә, иркемде сикләй, тигән уйҙар башыма инеп тә сыҡмаясаҡ. Етешһеҙлек, халыҡҡа итеп әйткәндә, юҡлыҡ талаштыра ла, агрессив уйҙар уйлата ла, башҡаларҙан етешһеҙлек эҙләүгә этәрә лә.

Ә инде патриотик асылдағы милләтселек бары тик маҡтауға ғына лайыҡ. Йәғни, үҙ телеңде, мәҙәниәтеңде, тарихыңды белеү, хөрмәт итеү һәм уның үҫешенә өлөш индереү иң дан милләтселәрҙең эше ул.

**Балалар тәрбиәһендә ниндәй алымдарға өҫтөнлөк бирәһегеҙ? Һеҙҙең юлды дауам итеүселәр булырмы ғиләгеҙҙә? Һәм беҙҙең башҡорт зыялыларына бирелә торған традицион һорау: балалар башҡортса һөйләшәме?**

- Беҙҙең балалар бәләкәйерәк әлегә, алты йәштәре генә тула, шунлыҡтан, уларҙың киләсәге хаҡында фаразлау иртәрәктер. Алһыу менән Әминә исемле игеҙәк ҡыҙҙар үҫтерәбеҙ. Ҡатыным да иҡтисадсы-ғалимә. Әлбиттә, ҡыҙҙар туған башҡорт телендә һөйләшә, аңлай, башҡортса йырҙар йырлай, шиғырҙар ятлай, әкиәттәр һөйләй.

Тәрбиә алымдарына килгәндә, һәр сәйәхәттән йәки командировканан бүләккә китаптар алып ҡайтам. Рухи донъяға өҫтөнлөк биреп өйрәнһендәр, тип уйлайбыҙ. Әлегә тиклем ҡулдарына планшет тотторғаныбыҙ юҡ. Беҙҙең балаларҙың тағы ла бер бәхете - уларға ауылдағы өләсәй тәрбиәһе лә бирелә. Ҡәйнәм үҙе лә педагог булараҡ, бәләкәстәр менән ҡайнашып, мәшәҡәтләнеп йөрөүгә әүәҫ. Балаларҙың, уҡыу һәм өйрәнеүҙән тыш, матур бала сағы ла булырға тейеш. Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты.

**Нисек уйлайһығыҙ, башҡорт интеллигенцияһын тәшкил иткән, йәмәғәт эштәрендә янып-көйөп йөрөгән, милләт исеменән һүҙ һөйләгән зыялыларға ниндәй сифаттар хас булырға тейеш?**

- Иң беренсе, улар белемле булырға тейеш. Һәм бер өлкәлә генә түгел. Тағы ла, принциптары сикле бер фекергә генә нигеҙләнмәһен ине. Ошо сиклелек һәм белемһеҙлек күп проблемаларҙың башы ла инде. Маҡсатлы эшләй белеүгә өйрәнеү ҙә кәрәк. Ниндәй генә фекерҙәр һәм ҡараштар булғанда ла, үҙ идеяларына тоғро ҡалып, тышҡы факторҙарға артыҡ иғтибар бирмәй, алға барырға кәрәк. Ошо сифаттар ғына булғанда ла күп нәмәләргә өлгәшергә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рубрикаға ярашлы, Айбулат Вәли улынан ҡуберәк үҙенең шәхесе тураһында һөйләттерергә йыйынғайныҡ. Әммә ул үҙе тураһындағы һорауҙарға һаран ғына яуап бирҙе, шәхси һорауҙарҙы әҙәпле генә урап үтте. Ул ҡуберәк институт тормошо, уның эштәре, асыштары, яңылыҡтары хаҡында һүҙ алып барҙы (85 йыллыҡ юбилейы уңайы менән институт тураһында гәзитебеҙҙең быйылғы 22-се һанында бик ентекле әңгәмә ҡорғайныҡ, шуға ла был хаҡта ҡабатлап тормайыҡ). Ә шулай ҙа уҡыусыларыбыҙ әлеге әңгәмәнән дә был шәхестең мәртәбәһен, башҡарған эштәрен ҡуҙаллай алыр, тигән өмөттәбеҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ӘЙТӘГҮР!

# ТИҢДӘР АРАҺЫНДА ТИҢ БУЛЫРЛЫҠ...

## матур сифаттарыбыҙ бар



**"Тиңдәр араһында тиң булып йәшәүсе башҡорт ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?" тигән һорауға асыҡлыҡ индереү маҡсатында "Башҡорттоң намыҫ кодексы" тип аталған ҡағиҙәләр йыйынтығын төҙөүсе ғалимә - Башҡорт дәүләт университетының Учалы вәкиллеге директоры Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА менән әңгәмәләштек.**

- "Башҡорттоң намыҫ кодексы"н мин бик оҙаҡ уйланып йөрөгәндән һуң, халыҡҡа бер тәрбиәүи әсбап булһын тип яҙҙым. Ябай ғына ҡағиҙәләр, тәрбиә нормалары тупланыуға ҡарамаҫтан, ысын башҡорт кешеһе эйә булырға тейешле сифаттар тураһында мәғлүмәт бирелә бында. "Башҡорттоң намыҫ кодексы" башҡорт халҡының борондан килгән әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләрен, рухи ҡиммәттәрен генә түгел, заманға ярашлы булған талаптарҙы ла үҙ эсенә ала. Бындай кодекстар башҡа милләттәрҙә лә бар, мәҫәлән, японҙарҙың "Бусидо", йәһүдтәрҙең "Шулхан Арух" йыйынтығы бөтәһенә лә билдәле. Әйтергә кәрәк, японҙар Икенсе Бөтә донъя һуғышында еңелгәс, бик ауыр күңел төшөнкөлөгөнә бирелеләр, американдар уларҙың "Самурай кодексы"н көлкөгә әйләндерә. Унда яҙылған күп ҡағиҙәләр заманға ярашлы булмай, шуға япондар ошо ҡағиҙәләр йыйынтығына таянып, заманға яраҡлаштырып, яңы кодекс төҙөй.

Башҡорт халҡы өсөн "Урал батыр" эпосы шундай уҡ тормош ҡағиҙәләрен үҙ эсенә туплаған бер сығанаҡ булып тора, әммә йәштәргә бөгөнгө заманға яраҡлашып та, электән килгән традицияларыбыҙҙы ла онотмай йәшәргә кәрәк. Бар яҡлап та камил булырға ынтылған башҡорт кешеһе, тәү сиратта, үҙ халҡына тоғро хеҙмәт итеүсе. Ул башҡа милләттәр араһында абруйын һаҡлай белә, тыуған илен ярата, туған телендә яҡшы һөйләшә, ололарҙы хөрмәт итә, шәжәрәһен белә һәм ғаиләһен яҡшы аҫырай. Бөгөн милли йөҙөбөҙҙө юғалтмаҫ өсөн, әммә шул уҡ ваҡытта замандан да артта ятып ҡалмау маҡсатын күҙ уңында тотоп, быуындан-быуынға күсә килгән тәртип менән бергә әлеге көндә һәр кеше өсөн кәрәкле сифаттарҙы ла үҙебеҙҙә, балаларҙа тәрбиәләргә бурыслыбыҙ.

Мәҫәлән, "Башҡорттоң намыҫ кодексы"ның етенсе пунктында былай тип яҙылған: "Ысын башҡорт уңған, бар эште изге ниәт, ҙур теләк һәм намыҫ менән башҡара, балаларында бәләкәйҙән эшкә һөйөү тәрбиәләй. Кеҫәһендә һәр ваҡыт аҡсаһы бар, ул уны юҡ-барға тотонмай, ғөмүмән, үҙенең һәм балаларының белем алыуына, йәмәғәт эштәренә йәлләмәй. Ул - тәүәккәл, һәр береһенең шәхси эше бар, ул уның яраткан шөғөлөнә, хәләл һәм милли кәсепкә бәйле. Ысын башҡорт белемле, күп уҡый, яҡшы кимәлдә, кәмендә, өс тел белә. Теүәл фәндәрҙе үҙ итә. Сәсәндәр һәм шағирҙар ижадының иң сағыу юлдарын яттан һөйләй. Ысын башҡорт балаларына, үҙенә милли матбуғат алдыра, милли әҙәбиәтте, халҡының тарихын яҡшы белә, уға бәйле китаптарҙы, һүҙлектәрҙе һатып ала".

Күренеүенсә, барыһы ла бер-береһенә бәйле булырға тейеш. Тиңдәр араһында тиң булып йәшәү өсөн аҡса таба белеү генә түгел, тамырҙарың ҡайҙан булыуын, халҡыңдың рухи ҡомарткыларын яҡшы белеү, бер һүҙ менән әйткәндә, тиңдәр араһында кәмһенмәй, үҙеңде тиң итеп тота белеү ҙә мөһим. Шулай уҡ беҙҙең халыҡҡа маҡтаныу, кеше әйберенә тейеү, үҙенә тейеш булмағанды алыу, берәүҙе рәнйетеү, йәберләү, ғәйбәт һөйләү, бөхтәһеҙ булыу кеүек хас булмаған сифаттарҙы үҙләштереүҙе кисәтергә кәрәклеген тойоп, кодекста ошолар тураһында ла фекерҙәр урын алды. Сөнки таҙалыҡ, изгелекле булыу, ярҙамсыллыҡ кеүек сифаттар беҙҙең менталитетҡа айырыуса хас.

Минең ҡарамаҡҡа, "Башҡорттоң намыҫ кодексы"ның иң мөһим пункттарының береһе - бишенсе: "Ысын башҡорт ғаиләһе ҙур, татыу, кәмендә төрлө енесле ике балалы була. Уның үҙ өйө, йә фатиры бар. Донъяһы етеш, бөтөн, көйлө. Баҡсаһы сәскәгә, емеш-еләккә күмелгән, ғөмүмән, ул ағас ултыртырға ярата. Уның өйөнөң тышы һәм эске интерьеры милли традицияларға бәйләнгән", - тип яҙылған унда. Ысынлап та, тиңдәр араһында тиң булып йәшәү өсөн ошо кодекста яҙылған кәңәштәрҙе йәшәү рәүешебеҙ итеп алыу урынлы булыр ине.

Әйткәндәй, кодекс йәштәр һәм балалар тәрбиәһендә генә түгел, ололар өсөн дә бик фәһемле буласаҡ. "Ысын башҡорт олатайының һәм өләсәйенең һандығында кәмендә ете батыр, ете хайуан тураһында ете тылсымлы әкиәт, ете доға, ете шиғыр, ете йыр, ун ете таҡмаҡ ята - улар әйткәндәрҙе ейәндәренә өйрәтә", - бына нисек булырға тейеш. "Башҡорттоң намыҫ кодексы" - ул аҡыл өйрәтеү түгел, фекер алышыу, киләсәк быуындарҙы тәрбиәләү өсөн ҡулайлы әсбап булыр, тип ышанам.

Әлегә күргән-белгән кешеләр үҙ фекерҙәрен белдереп яҙып тора, халыҡ ыңғай ғына ҡабул итте. Шунда яҙылған һүҙҙәргә ҡолаҡ һалһалар, унда аталған сифаттарҙы балаларында, үҙҙәрендә тәрбиәләһәләр - ысын башҡорт ниндәй шәхес булырға тейешле икәнен һәр кем аңлар.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

***✓ Таш башына хәтле һыуға бармаһаң, урамыңдағы ҡойоң һайыҡҡанмы ни? Аръяҡтың күмере биръяҡтыҡынан ҡараҡмы ла, ҡуҙы эҫерәкме? Ҡалай шырҡылдығың асылған, ай-һай, сәй генә ҡайнатмағанһыңдыр, ахыры?***





# ЭШ САМАУЫРҘА ТҮГЕЛ...

Рәйлә САБИТОВА

(Хикәйә)

Яңы нәмә ул онотолған иҫке, тигәндәре ошо, ахыры. Ҡалай ябай ғына сюжетта кешеләр мөнәсәбәтен кинәйәләп, күңелгә ятышлы ғына тасуирлаған хикәйә баҫҡандар, тип уҡыһа, Сәғит Агиш тигән яҙыусының үткән быуат урталарында яҙылған әҫәре, имеш. Ауыл ҡарсығының ҡалаға, балаларына килгәс, самауыр сәйе эскеһе килеүе, ә ахырҙа эштең бөтөнләй ҙә самауырҙа түгеллеге асыҡлана. Шулай инде, маңлай күҙенә салынғаны бер, ә төптәге сәбәбе бөтөнләй бүтәндә булыусан. Самауыр тигәндән, һөртөп алаһы бар икән әле уныһын, тоноҡланып ҡалғандай әтеү. Хикәйәләгесә, ҡала фатирында йәшәһә лә, аш бүлмәһендә үрҙә самауыры тора Сәрүәрҙең дә. Тамырҙарың ауылға тоташһа, бала саҡтарың шунда үтһә, өләсәйҙәреңдә самими балаларса ысын һөйөү менән яратһаң, шундай бер ҡомартҡы булырға тейештер өйҙә.

Матур ҙа инде! Ун литр һыу һыйҙырышлы, һимметле уҙамандай дәү ҡорһаҡлы, олпат, ялтыр... Үҙ заманында оло табындар йыйылыр ине уның янында. Өләсәһе, олатаһы, уларҙың дүрт улы, ике ҡыҙы, килендәре, ейәнсәрҙәр... Ике тиҫтәнән дә артып китәләр. Самауырҙы бер-ике бушатып, ҡабат тыжлатмайынса, һөйләшеп хәбәрҙәре лә бөтмәҫ, уйын-көләш тыммаҫ. Сәрүәр кеүек бала-сағаларға сират тейгәнсе, емештәренән һығылып ултырған алмағастарҙы әллә нисә уратып баҫтырышып да, йәшенмәгән дә уйнап-ҡыуышып, сырҡылдыҡтары сығыр. Уйын менән мәж килһәләр ҙә, олаталарының мыҡты, һалмаҡ кәүҙәһенең ҡуҙғалғанын шәйләй һалалар, уның артынан башҡалары ҡыбырҙағанын түҙем генә көтөп алып, өҫтәл артына теҙелешәләр. Өләсәһенең һыйы шәп шул - йөҙәмә-күрәгәһе, балыҡаймағы, ҡоймағы-ҡорото... Сәрүәр гел самауыр янына йылыша. Сәй эскәндә күҙен алмай самауырҙың ялтыр һыртына текләп күҙәтеп ултыра. Үҙе бер серле донъя асыла бит уның биҙәктәренә сағылып! Табындағылар нимдәй генә сүрәткә кермәй. Йә баштүбән ашайҙар кеүек, танауҙары оло, күҙҙәре ҡыҫыҡ, ауыҙҙары бәлшәйгән, әкиәти иргәйелдәр, торғаны. Мәҙәк тә инде, телевизорың ары торһон. Әлегеләр ни, әллә ниндәй хан һыйы торһон алдарында, күҙҙәрен планшет-телефон экранынан айыра алмайҙар. Сәрүәрҙең бала сағындағыса, ҡаршыларында ошондай самауыр ултырмағанғалыр инде. Күрәһең, бала күҙе бер туҡтауһыҙ нимәләр күҙәтергә тейеш...

Ҡапҡасын тызып ултырып онотолоп киткәнсе. Былай ҙа ял-ялтыр бит инде ул! Әҙ ышҡығанмы ни уны Сәрүәр, ҡулына ҡабат килеп юлыҡҡас. Олатаһын ҡосаҡлағандай, һағынып ҡосоп, оҙаҡ ҡына буҫығып иланы. Ҡәҙерһеҙләнеп, тәҫһеҙләнеп, бәҫһеҙләнеп киткән өсөн үҙен ғәйепле итеп тойоп, ғәфүҙәр үтенде... Бигерәк тә оҙаҡ ваҡыт үткәйне шул "күрешмәгәндәренә".

...Сәрүәр үҫеп еткәнсе таралды шул самауыр артындағы ултырыштар. Иң беренсе табын йәме олатаһы китеп барҙы баҡыйына. Артынса һис тауыш күтәрә белмәгән, самауырҙай бер тигеҙ гөжләп кенә йөрөгән өләсәһе... Улар ҡорған донъя туҙҙы, усаҡтары һүнде. Атай йортонда дүрт улдың береһе лә ҡалмағайны, һәр береһенең үҙ нигеҙе. Нигеҙ тип ни... Бер ағаһы ғаилә ҡороп та өлгөрмәне, олатаһы менән бер ҡатарҙан тиерлек яман сирҙән вафат булды - Чернобылдә хеҙмәт итеү касафаты. Береһе заман сиренә юлыҡты - ҡатынын башҡа менән тотоп, гәрлегенән башын боғалаҡҡа тыҡты. Береһенең өҫтөнә ағас ауҙы урманда яңы нигеҙгә буралыҡ әҙерләгәндә. Береһе... Шул береһе генә йәшәп ята инде ғаиләһе менән иҫән-һау. Туған итеп күрешкәндәре лә, осрашҡандары ла юҡ хәҙер, ҡатынының һүҙенән сыға алмай. Сәрүәрҙең әсәһе ошо самауырҙы ғына алып китте атай йортонан, башҡа әнәһенә лә теймәне. Шуны еңгә тейешле кеше ауыл ултырып һөйләп сығарған.

- Самауырына тиклем тейәп алып киттеләр! Беҙгә, ҡарттарҙы ҡараған кешегә, бер ни ҡалдырманылар, - тип.

Ғәрлегендән ятып үлерһең, билләһи. Алмаш-тилмәш айҙар буйы ҡараны әсәһе олатайөләсәйҙе. Фатир тар тип тә бошманы, дауалау ҡиммәт, тип тә. Ҡыҫынҡылыҡтан, мәшәҡәттән ялҡыпмы, ирем икенсегә сығып китте тип тә ыңһарламаны, күндәм ат кеүек, күпме йөгө булһа, бер үҙе тартты, сыбыртҡы кәрәкмәне. И сабырҡай әсәһе... Сәрүәр китте кейәүгә баш-баштаҡланып ер аяғы ер башы ерҙәргә. Ологара бирнә менән барып төшкәйне, ошо самауырҙы ғына ла ала алмай сығып китте ҡәйнә йортонан. Бәлки алыр ҙа ине - үҙе лә самауыр хәтле ҡорһаҡ менән ине шул, балаҡайының тыуыр ваҡыты еткәйне. Шул китеүҙән ҡайтманы төшкән еренә. Үҙегенә үткәне кеше һүҙенән дә, оятан да, хатта иренә ҡарата кисергән йылы хистәрҙән дә өҫтөнөрәк булып сыҡты. Әсәһе, бахыр, үртәлгәндер инде. Оло ҡыҙың бер яҡтан ҡайтып керһен икәү булып, ике йыл да йәшәмәй. Икенсеһе кейәүгә йыйынған, ҙурҙан ҡубып туй табыны ҡорҙормаҡсы. Бирешмәнеләр, кесеһен дә туйлап оҙаттылар. Уның бирнәһенә үҙенең биш литрлы самауырын ҡуйҙы әсәһе. Сәрүәрҙең күңелендә юшҡын ҡалды инде. Күрмәҫлек булып сығып киткән еренә кире йүгереп барып, самауырын алып ҡына ҡайтырҙай булып аҙарынды. Әммә... Имсәк баланы башта үҫтерәһе бар әле, үҙ көнөңдө үҙең йүнләйһе... Әсәйҙең арыҡ елкәһендә ятып булмай инде, эше кәрәк, фатиры, балаһына баҡсаһы, ашары-кейере, күпме хәстәр! Илдә сыпсыҡ үлмәй, кешенән ҡалғанды ла кейҙерергә тура килгеләне, йәш тә түгелде, кәмһенеп тә кителде, барыһын кисерелде. Кемдәрҙер сәүектәй тәскелдәп, гәйбәтендә сәйнәп торһа ла, күпме ҡаршылыҡтар ҡалҡһа ла, бирешмәне әлдә. Фатиры ла бар, улы ла буй еткерҙе, "Самавар Фарвазовна" тип күҙенә ҡарап торған хеҙмәткәрҙәре лә. Исеменә тәүҙә өйрәнә алмай шулай әйткеләп алалар ҙа, аҙаҡ күнегәләр ул. Әйткән һүҙе үтемле, ҡушҡаны үтәүле, артындан ғәйбәтен ишеттергәндәре юҡ, шул етмәйме.

Ҡәйнә йортонан самауырын килтерткәнсе тиҫтә йылдар үтте. Кемдәр аша ғына хәбәр юлламаны ла, ниндәй генә һүҙҙәр ишетмәне. Ейәндәрен күрергә лә атлығып торманылар, улдарына ла атайлығын раҫларға хут бирмәнеләр ҡәйнә-ҡайны тигән есемдәр. Үҫеп, ҡул араһына керерлек булғас, саҡ иҫтәренә алдылар. Йәйгелекке атайы туғандарына барып ята хәҙер улыҡайы, шөкөр инде. Йөҙ һыуын түгеп инәлә торғас, бер заман самауырҙы ла ебәргәндәр. Дөрөҫөрәге, бер танышы кереп алған, машина менән командировкала барып сыҡҡанында. Иии, ундағы кисергәндәре... Бер яҡтан, ҡайтара алғанына һөйөнә, икенсе яҡтан, тегенең ташландыҡ меҫкен ҡиәфәткә ҡалғанына әрней. "Өләсәйем аслыҡтарҙы йырып сыҡҡан, һинән яҙмаған, һуғыш ваҡыттарын кисергән, юҡлыҡты, һатмаған да, юғалтмаған да... Ә мин! Тып-тыныс заманда һаҡлай алманым!"- тип һамаҡлап-һамаҡлап иланы. Иларһың да! Бысраҡты-санды йыйып төшөрөп була, йәнселгән ерҙе төҙҙәттерергә, тишекте ямарға мөмкин. Ҡәйнәһе "бирҙем" исеме булһын тип кенә биргән самауырҙы, ә иң кәрәкле ерен - һеңмәкте алып ҡалған! Һемәкһеҙ самауырға һыу һалып буламы ла, бороп ҡуйып, сәй яһап алып буламы! Нинә улай ҡыланырға инде оло кешегә? Ошо самауырҙы тыжлатып, үпкә йөҙҙөргәнсе хуш еҫле сәйен эсһә, китек күңеле төҙәлер ҙә, ҡәйнәһенә, иренә булған рәнйеүҙәре йыуылыр ҙа төшөр һымаҡ ине, булманы. Бесәй өҫтөндәге эт һымаҡ, үҙҙәре лә бәхет тәтетмәне, башҡаларға ла ирек бирмәнеләр. Самауырҙың ғына һыуы бөтә, ә ҡояштың нуры һәр кемгә лә тигеҙ төшә бит, ниңә айырырға һуң бәндәне бәндәнән?

Ий, самауырҡайы, хазинаһы, буйтым хәтирәләр-иҫтәлектәр һандығы, иң ҡәҙерле ҡомартҡы! Файҙаһыҙ шул. Баҡсаға алып барып, алмағас күләгәһендәге өҫтәл тирәһенә нәҫел-ырыуҙы, күрше-күләнде йыйып һыйлаһаң ине ул! Күңел асып, гәпләшеп ултырһаң ине. Кешегә күп кәрәкме ни. Асыҡ йөҙ ҙә, йылы һүҙ. Самауыр кеүек... Күп эҙләне Сәрүәр ярарлыҡ һемәкте. Барлыҡ дуҫ-белештәренең башын ҡатырып бөттө. Сирле сирен һөйләр, тигән шикелле, бер сиргә әйләнде был уй. Әллә сығарып бәреп, яңыны ғына һатып алып ҡуяйыммы, тип тә ҡалманы. Юҡ инде, ҡулы бармай. Әллә нимә көтә, әллә ниндәй мөғжизәгә ышана...

Тауыҡ төшөнә тары керә, тип көлә торғайнылар әхирәттәре, "төшөмдә самауыр күрҙем" тип һүҙ башлаһа. Бер заман түҙмәне, төш юраусы апайҙы юллап китте. Шөмгә һөйләйем, тип төшөнөң бар нескәлектәрен һөйләп бирҙе. Имеш, сүплектән самауыр табып алған. Башындағы кәнфәркәһе яп-ялтыр. Бар яҡлап та оҡшай инде, сүплектән алған тимәҫһең дә. Тик ҡайнатҡас, шуныһы асыҡланды - аға бит һемәге! Тамсылап та ултыра, супырлап!

- Яңғыҙыңмы? - тип һораны башта юраусы. Ыңғай яуап алғас, төҫө ҡарағыланып, шымып торҙо. - Һуңғы осорҙа ир кеше килеп сыҡтымы, ғаилә ҡорорлоҡтай? Ҡатынынан яңы айырылған, үҙе хәрби кеше, һинән олораҡ?

Сәрүәр иҫе китеп аптыраны. Төшөн генә һөйләгәйне, тормошон һөйләгәндәй итеп әйтәсе. Ысынлап та, отставкалағы полковник ҡыялата башлағайны янына. Оҡшағандай ҙа һымаҡ булғас, асылырға торған бәхетенә күҙ тейҙереүҙән ҡурҡып, бер әхирәтенә лә был турала әйтмәйерәк тора ине.

- Иии, туғанҡайым, - тип яҡын итеп әйтте апай. - Күңеләнә ауыр алма инде берүк. Мин күргән түгел, үҙең күргән төш, мин юраусы ғына. Өмөтләнгән кешеңдең күңеле яралы, һин лайыҡ һөйөү-иғтибарҙы бирә алмаҫ. Йәне менән дә, һәм һүҙҙең дөрөҫө кәрәк, тәне менән дә. Башыңды уттан алып һыуға тыҡма, эҫенешмәҫ элек өҙ ҙә ҡуй арағыҙҙы, икегеҙгә лә шулай ҡулай булыр...

Бер аҙ ваҡыттан юраусының әрәсәһенә төшөндә Сәрүәр. Һемәге юҡ ни, булып та ағыҙа икән, һәҙәмтә бер - самауырҙың рәте юҡ. Ир бәхете өләшкәндә ҡайҙа ғына йөрөп ҡалдым икән, тип, үҙен битәрләп иланы ла, тәҡдиренә күнгәндәй булып, артабан йәшәй әле.

Самауырының эсен-тышын сайып, ялтыратҡансы һөртөп, тағын юғарыға мендереп ултыртты ла, семәрле-биҙәкле һемәк тотҡаһын иҫенә алып, йәнә йәне көйҙө. Шуны ипләп кенә тотоп бороп, сәй яһап ултырған өләсәһе ҡулында булғандыр ул бәхет тотҡаһы! Ҡандай донъя таралды ла төштө ул киткәс, ҡарағайҙай улдар киҫкән шикелле ауҙы... Сәрүәр ҙә инде, бер йыбытҡы. Һемәк тотҡаһын һаҡлап тота алмағас, самауыр йылыһына ла тейенә алмай, и Алла...

Ярай, үҙ-үҙенде төйгәләүҙән ни файҙа инде эш үткәс. Хәтирәләрҙән елләнеп алырға була, һеңләһенең хәлен белеп ҡайтын әле. Ҡала ҡыҙымын тип торманы уныһы, ауылға кейәүгә сыҡты ла, шартлатып донъя көтөп алды ла китте. Бер нисә ҡала фатиры һыйырлыҡ йорт һалдылар, Сәрүәр эләкмәгән ишле бала бәхете татый. Ирен ир итеп тә тота, үҙе лә йөҙәк ҡашындай балҡый.

Ҡапҡанан уҡ сығып ҡаршы алды һеңлеһе. Үҙе туҡтай алмай көлә, апаһы килеүгә шатланыу ғына түгел, күрәмһең. Эсенә йыйып тотмай һеңлеһе бер нимәне. Ҡыуанысын да, асыуын да, хәбәрен дә, тейерен дә асып-ярып әйтеп бара.

- Иииһ апый, килеп йәтеш иттең әле! Арьяҡ күмере менән Таш башы ҡойоһонан һыуы менән генә ҡайнатҡан самауырым йырлап ҡына ултыра өҫтәлемдә, и-һа-һа-һай!..

- Таш башына хәтле һыуға бармаһаң, урамыңдағы ҡойоң һайыҡҡанмы ни? Арьяҡтың күмере бирьяҡтыҡынан ҡараҡмы ла, ҡуҙы эҫерәкме? Ҡалай шырҡылдығың асылған, ай-һай, сәй генә ҡайнатмағанһыңдыр, ахыры?

- Ҡатырағын ҡайнатаңдыр тинме, апый, ха-ха-ха...- уның һайын көлә һеңлекәше. - Ҡатырағы булһа, күрше Шупыр самауырымды урлар инеме лә, арьяҡ Сырурға бер полторашка "сәмәй"гә алмашыр инеме? Быуаса газда сәйнүк ҡайнатып эскәнемдә, әлдә генә бөгөн самауыр сәйен һағынып кит-

✓ Хәҙер милли кино үҫеше яңы этабын кисерә, тип иҫәпләйем - беҙ төрлө-төрлө кинолар төшөрә башланыҡ. Был өлкәгә күпләп йәштәр килде, улар төрлө темаларға, жанрҙарға мөрәжәғәт итә.



кәнмен! Эҙләп донъяны пыр туҙҙырҙым. Ярай әле, был яҡ күрше Мәймүнә әбей Шупырҙың беҙҙән сыҡҡанын күргән. Баҡса утарға сыҡҡанса ла йоҙаҡ элеп йөрөп булмай бит. Кемгә һаттың, тип боғаҙынан алдым теге иҫерекбаштың. Әйтмәй ҡырталаша, партизан аламаһы. Өҫтәп ярты бирәм, тип саҡ әйттерҙем. Ыңғайына сығып йүгерҙем, малай, аяҡта - иҫке галуш, башымда төҫө уңған яулыҡ, үәт килештерҙем, әй! Сырурҙар урам тултырып ҡунаҡ йыйғандар, минең самауырымды өҫтәлгә ҡуйып ҡына торалар ине. Һыпыра тартып алдым да, шул ярһыу менән күтәреп алып ҡайттым. Артымдан илай яҙып йүгерә теге, киленемдең йыуасаһына кеше алғайным, ниңә улай хаяһыҙ ҡыланаһың, ти. Беҙҙең заманда килендәр үҙ самауыры менән төшә торғайны, тим, нечего кешенекенә ауыҙ һәлберәтергә. Иҫләйеңме, күпме ҡанымды боҙғайны шул бисә. Күпме ғәйбәтемде сәйнәп аптыратты, аҙаҡ үҙ ире өҫтөнән минекенә шиҡылдап, наһырымды ҡоротто. Белмәй икән тимәһен, йыуаш икән тимәһен! Үҙемдекен ситтәргә тотторып ебәрергә тора инем, ти, шиш башына!

Сәрүәр һеңлеһенең саялығына һоҡланыуҙан шаңҡып торҙо. Ҡара әле ул ниндәй! Самауырҙай балҡып тора йөҙҙәре, эргәһендәгеләргә бөркөп тора йылыһын, һыйынғы, ятаҡы ғына килеп тора үҙен, эй бәхетле лә инде! Ҡайнап торған самауырҙы оло ҡунаҡ йыйылған табындан йолҡоп ала алған бит ул, ҡуҙҙан да, һүҙҙән дә ҡурҡмаған. Ниңә Сәрүәр асығауыҙланып йөрөй нисә йылдар? Быуын-быуынға күсеп килгән ҡомартҡы хаҡына бер ни эшләмәй? Күңел бөтөнлөгөнән мәхрүм, етмәһә, шуға күнеп ғүмер һөрә? Ул ғына ла түгел. Үҙенең, оло кешенең ҡулынан килмәгәнде үсмер генә улына йөкмәтеп маташа бит әле. "Өләсәйеңдән самауыр һемәген таптыр", имеш... Бар ҙа, аҫтын-өҫкә килтереп, үҙең эҙләп ал! Һинең тормош, һинең бәхет хәл ителә ләһә! Эҙләйһе лә юҡ ул һемәкте. Килен-ейәндәрҙән тәм-томдо бер мөйөштә бикләп, йәшереп тота торған ғәҙәте бар ҡәйнәһенең. Шул мөйөштә генә ята барыһы ла. Әле ризыҡ айырып, әллә нимә көҫәп йонсоған йөклө сағында шул мөйөштө ватырға ҡәһәтләнгәйне, йөрәге етмәне. Әмәлгә ҡалғандай, үрмәксе килеп сыҡты. Ә хәҙер ҡурҡырлыҡ ни ҡалды? Ҡәйнәһе үҙе ҡурҡһын, барырға ла туҙҙырырға, мөйөш-һәйеш һайын йөрөмәһен, ғәйбәт ауын үреп. Ә шунан? Ә шунан шажлатып самауыр ҡайнатыр, томһайып йөрөгән теге еңгәһенә тиклем саҡырып ҡунаҡ йыйыр, бер ҡыҙыҡ булыр! Үҙе инде самауыр төбөнә ултырыр, ситтән түгел. Ҡасандыр өләсәһе тотҡанды, Сәрүәр тотор донъя тотҡаһын.

Шул уйҙарҙан Сәрүәрҙең эсенә ҡуҙ төштөмө ни, сырайы яҡтырып, күңеле йылынып китте.

*ИЖАДХАНА*

# КӨСЛӨЛӘР ҮҘ УРЫНЫН ТАБА...

## тормошта ла, һөнәрҙә лә

**Арабыҙҙа шундай милләттәштәребеҙ бар, улар һүҙ һөйләп йөрөүгә ҡарағанда, күберәк эш менән мәшғүл. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ ҙа шундайҙар рәтенән. Һуңғы осорҙа башҡорт киноһы өлкәһендә барған ыңғай үҙгәрештәрҙә ул төшөргән фильмдарҙың да өлөшө булһа ла, эшмәкәрлеге тураһында сиселеп китеп һөйләшергә форсат сыҡҡаны юҡ ине. Йәш кинорежиссер, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы ҡыҙы Фәрзәнә УТАРБАЕВА менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ башҡорт киноһы үҫеше һәм, әлбиттә, уның үҙенең ижады тураһында булыр.**

### Мин киноны һайланым

Кино сәнғәтен мин бала саҡтан уҡ һайлағанмындыр. Актерҙар, актрисалар менән ҡыҙыҡһына, гәзит-журналдарҙан уларҙың фотоларын, әңгәмәләрен ҡырҡып алып, дөйөм дәфтәргә йәбештереп, туплап бара торғайным. Йондоҙҙар тормошо ғәжәп тойола ине. Хәҙер уйлап ҡараһам, уларҙың йәшәйешенән бигерәк, ошо сәнғәт тигән донъя ҡыҙыҡһындырғандыр мине, моғайын. "Оскар" кинопремияһы кемгә, ниндәй фильмға тапшырыла - шуны күҙәтә инем. Мәктәптә уҡығанда рәсем төшөрөү менән мауыҡтым, һуңынан - фото төшөрөү менән. Өфөлә фотосессиялар ойоштороу менән шөғөлләндем, "Шоңҡар" журналында эшләнем, фотоһүрәттәрем уның тышлығын биҙәне. "E7E-Медиа" компанияһы егеттәре менән клиптар төшөрҙөк. Шулай үҙемсә ижад менән шөғөлләнеп йөрөгән сағымда кинорежиссер Айнур Асҡаров менән таныштым. Ул минең, кино төшөргөм килә, тигән хыялдарымды яңынан дөрләтеп ебәрҙе. Мин кино сәнғәте өлкәһен һайланым һәм ошо һөнәр минең ғүмерлек эшем булыр, тип ышанам.

### "Аҡбуҙат" канат ҡуйҙы

Өфөлә үткән II "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале сиктәрендә беренсе тапҡыр питчинг үтә, тигәнде ишеткәс тә, "Ҡайтыу" тигән сценарий яҙып, унда ҡатнаштым. Сценарийҙың исеме лә, өлөшләтә үҙе лә төҙәтеүҙәр индерә-индерә үҙгәрҙе һуңынан. Питчинг, йәғни, режиссерҙар, продюсерҙар алдында үҙеңдең проектыңды яҡлау ҙур мөмкинлектәр бирә - быны йәштәр белһен ине. Мин ул йылды, мәҫәлән, призлы урын алдым һәм "Башҡортостан" киностудияһы миңә фильм төшөрөү өсөн техника биреп торҙо. Шулай уҡ Мәскәү компанияһының фильмды буяу өсөн сертификаты тапшырылды. Былар барыһы ла бушлай, минең фильм төшөрөү өсөн киткән сығымдарымдың яртыһы тиерлек шулай хәл ителде. Был сценарийҙы Мәскәүҙә үткән питчингҡа ла ебәрҙем һәм ул 600 эш араһынан иң яҡшы 7-әү араһына инде. Киностудия фильмды бергә төшөрөргә тәҡдим итте һәм беҙ 2016 йылдың йәйендә "Ҡырағай" тигән фильм төшөрҙөк. Ул Яңы йыл алдынан ҙур экранға сыҡты.

Тәүге киноға бағыусылар эҙләгән саҡта Өфөнөң "Медстандарт" тигән холдингы ярҙамға килгәйне. Ошо холдинг ҡыҙыҡһынып китеп, тағы ла бер киноға заказ бирҙе һәм тулыһынса уны финанс яҡтан тәьмин итте. "Мой лечащий враг" тип атала ул. Табиптарҙың тормошо, уларҙың шулай уҡ ғәҙәти кешеләр булыуын, уларға ла төрлө тойғолар кисереү хас икәнен күрһәтергә теләнек. "Ҡырағай"ҙағы кеүек үк, бында ла бала һәм ата-әсә мөнәсәбәте сағылды.

Сценарийҙарҙы башҡортса яҙам, питчингтар өсөн уларҙы рус, кино төшөрөлгәс фестивалдәр өсөн инглиз теленә тәржемә иттек. Теләк булһа, сценарий



яҙырға ла, кино төшөрөргә лә өйрәнеп була. Бөтәһенә лә ҡағылған темаларҙы яҡтыртырға тырышам. "Ҡырағай"ҙы яҙғанда күберәк эске тойғоларыма таяндым. Икенсе фильмға сценарий яҙырға миңә ярҙам иттеләр.

Британия һәм Америка кинорежиссеры, продюсер, сценарист Альфред Хичкок әйтеүенсә, яҡшы кино төшөрөү өсөн 3 төп нәмә кәрәк - сценарий, сценарий һәм сценарий. Әгәр ҙә сценарийың насар икән, миллиондар түгеп тә, фильм насар килеп сығыуы бар. Яҡшы сценарий менән телефонға төшөрөлгән кино ла яҡшы килеп сығасаҡ. Фильмдың нигеҙендә ятҡан фекер уны ҡиммәтле итә, ул тамашасаны уйландырырға тейеш. "Ҡырағай"ҙы ҡарағас, һәр кеше әсәһенә шылтыратһын, янына күптән ҡайтмаған булһа, ҡайтып килһен, тигән ниәтем тормошҡа ашты. Унан һуң, Өфөлә лә төрлө киномәктәптәр бар, уларға мөрәжәғәт итергә була. Макгаффин исемендәге киномәктәптә сценарий яҙыу курстары үттем һәм әлеге мәлдә минең өсөнсө сценарийым әҙер. Ул мистика жанрында һәм үсмерҙәр һәм йәштәр өсөн тәғәйенләнәсәк.

### Милли киноның яңы этабы

Һуңғы ваҡытта башҡорт киноһының үҫеше, уның үҙенә генә хас телен табыу тураһында күп һөйләнелә. Башҡорт телендә генә төшөрөргәме, юҡмы, тигән һорауҙар ҙа бар. Башҡортса фильм төшөрәһең икән, һин үҙеңдең тамашасыларыңдың һанын сикләйһең. Ә беҙгә бөгөн башҡорт киноһын үҫтерергә кәрәк. Уның үҫешенең киләһе баҫҡысы - ул республика ғына түгел, тотош Рәсәй прокатына сығыу тора, тип иҫәпләйем. Ҙурыраҡ майҙанға иҫәп тоторға кәрәк беҙгә, тип уйлайым. Шуға ла рус телендә лә төшөрөргә тура килә. Шулай ҙа үҙем өсөн ҡабул иткән бер принцип бар - 3 кино төшөрәм икән, уның 1-һе мотлаҡ башҡортса буласаҡ һәм мин һәр фильмымда башҡорт мәҙәниәтен, башҡорт милли үҙенсәлеген күрһәтәсәкмен. "Мой лечащий враг"та ла башҡорт телмәре лә яңғырай, башҡорт көнкүреше лә сағыла. Был йәһәттән кинорежиссер Айнур Асҡаровтың "Из Уфы с любовью" фильмы матур өлгө булып тора, әлеге мәлдә ул киң Рәсәй прокатына сыҡты. Рус телендә булһа ла, ул башҡорт киноһы.

Хәҙер милли кино үҫеше яңы этабын кисерә, тип иҫәпләйем - беҙ төрлө-төрлө кинолар төшөрә башланыҡ. Был өлкәгә күпләп йәштәр килде, улар төрлө темаларға, жанрҙарға мөрәжәғәт итә. Әмир Абдразаҡов, Ғилван Әмиров, Малик Яҡшымбәтовтар нигеҙ һалған башҡорт киноһы сәнғәтен лайыҡлы дауам итербеҙ, тип ышанам. Ҡыҫҡа метрлы кинолар менән бер рәттән, тулы метрлы картиналар күбәйә. Быйыл ғына Булат Йосоповтоң "Бабич"ы менән Айнур Асҡаровтың "Из Уфы с любовью" фильмы сыҡты, улар әле тағы ла тулы метрлы фильм төшөрөү менән мәшғүл. Һәр хәлдә, мөмкинлектәр юҡ, тип зарланып ултырмай бирәү ҙә. Киләсәктә мин дә тулы метрлы фильм төшөрөргә хыялланам, әлегә был яуаплы эшкә тотонор алдынан тәжрибә туплау дауам итә.

### Үҫеш - ул хәрәкәт

Ныҡ итеп теләһәң, космосҡа ла осорға була, тиҙәр. Һәр эш ҙур теләктән һәм маҡсаттан башлана. Кино төшөрөргә теләгем шул тиклем көслө, башҡа өлкәлә үҙемде күрмәйем дә. Иң мөһиме, ваҡытлыса булған ҡайһы бер проблемалар, уңышһыҙлыҡтарға бирешмәҫкә. Кино төшөрөү - ул күп көс һәм күп аҡса талап итә. Ҡасандыр режиссерҙар ҙа административ бурыстарҙы хәл итеүҙән, аҡса эҙләп йөрөүҙән азат булып, тик ижад менән генә шөғөлләнә алыр. Әлегә күңелебеҙҙе генә һүрелтмәҫкә һәм үҙеңде борсоған темаларға сценарийҙар яҙырға, ҡулдан килгәнсә фильмдар төшөрөргә тейешбеҙ.

Һөнәремдә холҡомдоң бер урында ултырып сыҙамай торған яғы ла ярҙам итә. Мин гел хәрәкәттә булырға тейеш, шунда ғына үҙемде ирекле ҡош итеп тоям. Кино төшөрөү процесы оҡшай, шул ваҡытта тулы ҡанлы тормош менән йәшәй башлайым кеүек. Әсәйем бәләкәй саҡта уҡ, тик ултырып сыҙаманың инде, тип әйтә торғайны. Хәҙер улар ҙа минең йәшәү рәүешемә өйрәнде, нимә менән генә шөғөлләнһәм дә, һәр саҡ ярҙам итәләр һәм теләктәшлек белдерәләр. Үҫеш, төрлө танышлыҡтар булдырырға ярҙам иткән фестивалдәрҙә лә ҡатнашырға тырышам. Яңыраҡ "Ҡырағай" фильмы сценарийы Чебоксарҙа X Халыҡ-ара кинофестивалдә "Иң яҡшы сценарий" номинацияһында еңеү яуланы. Сентябрҙә Ҡаҙанда Мосолман киноһы халыҡ-ара кинофестивалендә һәм Анапала үтәсәк "Киношок" Асыҡ фестивалендә ҡатнашасаҡмын. Федераль кино үҫешен төбәктәрҙә төшөрөлгән картиналар тәьмин итә, тип күптән әйтә кинотәнҡитселәр. Яңы исемдәр күберәк төбәктәрҙә барлыҡҡа килә. Шуға ла башҡорт киноһының йондоҙло сәғәттәре алда әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй генә һөнәр эйәһе булма, был өлкәләге шәхсән уңышыңдың нигеҙен тырышлыҡ һәм ныҡышмаллыҡ алып торалыр, моғайын. Тормош көслө рухлыларҙы, ирекле фекер йөрөтә белгәндәрҙе ярата, тап Фәрзәнә кеүек тормоштоң һәр мөмкинлеген ҡулланып, үҙ яҙмышын үҙе яҙғандарҙы үҙ итә ул. Кино сәнғәтенә 24 йәшендә генә килгән һәм бөгөнгө көндә ике фильм төшөрөп, киноға сценарий яҙыу кеүек ҡатмарлы һөнәрҙе бар нескәлегендә үҙләштереп өлгөргән һылыуҙың исемен әле күп ишетербеҙ әле. Сөнки тап көслөләр генә һөнәрҙә лә, тормошта ла үҙ урынын таба.**

Ләйсән ДАЯНОВА
әңгәмәләште.

✓ *Бына мин баҙҙың иҙәнендә, һынған таҡталар, ағас ярсыҡтары, кәкре ҡаҙау, сәсрәп тирә-яҡҡа һибелгән картуф араһында аунап ятам. Беренсе шок үткәндән һуң, уйларлыҡ хәлгә киләм.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠО ТУЙМАУҘЫҢ ЗЫЯНЫ ҘУР

■ Солсбери университеты тикшеренеүселәре ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Гарри Поттер тураһындағы китаптар һәм фильмдар кешене үлем тураһында күберәк уйландыра икән. Улар ошо рәүешле үлемдән ҡурҡыуға ҡаршы көрәшә, ти белгестәр. Һынауҙарҙа 400 студент ҡатнашҡан, улар нисә тапҡыр был китаптарҙы уҡыуы һәм фильмдарҙы ҡарауы хаҡындағы һорауға яуап биргән. Шулай уҡ "Үлем тураһында йыш уйлайһыңмы?" тигән һорау ҙа бирелгән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Гарри Поттер хаҡындағы китаптарҙы иң кәме 9 тапҡыр уҡыған һәм фильмдарын иң кәмендә 30 тапҡыр ҡараусылар иҫәпләүенсә, Гарри Поттер тураһындағы тарихта үлем төп урында тора. Бынан тыш, был ҡатнашыусылар үлем тураһында күберәк уйланған, был уларҙа хәүеф тойғоһо уятҡан.

■ Medisys компанияһы хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, даими рәүештә йоҡо туймау организм өсөн эскелек һөҙөмтәһендә килгән зыянға тиң. 6 сәғәттән кәм йоҡлау һимереүгә, депрессияға, инфаркт һәм инсультҡа килтереүе ихтимал. Аҙ йоҡлау һөҙөмтәһендә иғтибар түбәнәйә, кеше ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итә алмай башлай. Шуға ла быйдай ваҡытта автомобиль йөрөтөү ҙә хәүефле. Был иҫерек көйөнә рулгә ултырыу менән бер. Белгестәр раҫлауынса, йоҡо грелин, кортизол, лептин гормондары күләмен нормала тотоуға булышлыҡ итә. Һанап кителгән гормондарҙың аппетит менән бәйле булыуын беләбеҙ. Тимәк, йоҡо туймаһа, аппетит күтәрелә, кеше күберәк ашай башлай һәм артыҡ ауырлыҡ йыя. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, йоҡо етмәһә мейе үҙ-үҙен "ашай" башлай. Уның һөҙөмтәһендә Альцгеймер ауырыуы һәм башҡа неврологик тайпылыштар барлыҡҡа килеүе бар.

■ Хәҙерге үҫмерҙәр аҙыраҡ эшләй, ялҡауыраҡ һәм өлкән быуынға ҡарағанда бәхетһеҙерәк. Быға смартфондар ғәйепле, ти белгестәр. Элек өлкән класс уҡыусыларының 85 проценты һөйөү тойғолары кисерһә, хәҙер был һан 56 процент ҡына. Бөгөн буш ва-ҡытын дуҫтары менән уҙғарыусылар һаны ла 40 процентҡа тиклем кәмегән. Үҫмерҙәр яңғыҙлыҡ, депрессияға йышыраҡ зарлана башлаған. Хәҙерге йәштәр һирәгерәк эшләй, бының урынына ваҡытын яңғыҙлыҡта смартфонына текәлеп үткәрә. Социаль селтәрҙәрҙең үҫмерҙәргә кире йоғонто яһауы хаҡында белгестәр күптән иҫкәрткәйне инде. Уның әүҙем ҡулланыусылары үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәте менән риза түгел, ата-әсәләре менән дә йышыраҡ конфликтҡа инә.

■ Тоҙ ҡулланыуҙы кәметеү йөҙәр мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк, ти күптән түгел генә үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең авторҙары. Тоҙ - натрий хлориды тип аталған химик берләшмә. Натрий хлоридының 60 проценты хлорид, ҡалған 40 проценты натрий. Тап натрий сәләмәтлеккә зыян килтерә лә инде. Йөрәк ауырыуҙарын өйрәнеүсе Америка ассоциацияһы көнөнә 1,5 миллиграмм натрий ҡулланырға кәңәш итә. Әммә күптәр уны күберәк тотона, был һан сама менән 3,06 миллиграмм тәшкил итә, тимәк, норманан ике тапҡырға артып китә. Тоҙҙоң кеше организмына йоғонтоһон тикшергәндә натрий ҡулланыуҙы яйлап ҡына кәметеүҙең һөҙөмтәһен күреү өсөн ғалимдар компьютер ярҙамын ҡулланған. Ун йыл эсендә тоҙ ашауҙы аҙлап ҡына кәметеү ҙә яҡынса 500 мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡаласаҡ, ти улар.

МАЖАРАЛАР

# ТАМАҠ ТАМУҠҠА ТӨШӨРӘМЕ?



Киске ашҡа ит бешерергә ҡуйғанмын, һалма ҡырҡҡанмын, ғаиләмде тәмле, яратҡан ризыҡтар менән һыйламаҡсымын. Әй әттәгенәһе, картуф бөтөп ҡалған икән! Күнәк тоттом да киттем ике өй аша йәшәгән ҡәйнештәргә. Һөйөклөмдөң ике туған ҡустыһы менән килен: "Картуфыбыҙ күп артып ҡалды быйыл, кемгә кәрәк, яңы картуфҡа тиклем алып ашағыҙ", - тип ауыл халҡына әйтеп ҡуйғайны.

Килһәм, килен киске һауынға йәйләүгә һыйыр һауырға, эшкә китергә йөрөй, тракторы килеп көтөп тора. Ҡәйнешем дә эштә, кискә һуңға ғына ҡайта икән. Мин "Картуф..." тип ауыҙымды асыуға, килен: "Ой, еңгәй, картуфты баҙҙан үҙең төшөп алаһың инде ҡыйын булһа ла, мин эшкә киттем", - тип, тракторға ултырып китеп тә барҙы. Япа-яңғыҙ ҡалдым ишек алдында. Быға тиклем сит кеше баҙына түгел, үҙебеҙҙең баҙға ла төшөп ҡараған юҡ ине бит әле. Нимә эшләргә икән? Фобия булмаһа ла, тар, ҡыҫыҡ, ҡараңғы мөхиттән, бигерәк тә баҙ һымаҡ урындарҙан күңелдә ҡурҡыу хисе бар бит.

Тәүҙә төшөргә ҡыймайыраҡ баҙ эргәһендә байтаҡ икеләнеп торҙом. Шунан, төшөргә тәк төшөргә, тип, күнәгемде баҙ эсенә ырғытып, артынан йырлай-йырлай үҙем дә төшөп киттем. Береһенән-береһе эре, матур картуфтарҙы күнәгемә тултырып, баҙҙан сығып киләм. Бына бер ваҡыт, шартлап һынған таҡта тауышы менән ҡуша, ҡаҡ салҡанан баҙ иҙәненә кире осоп төштөм. Ҡыуана-ҡыуана һайлап тултырған эре картуфтарым тупыр-тупыр минең өҫтөмә ҡойолдо. Тос ҡына булды был массаж, һуңынан оҙаҡ ҡына үҙен һиҙҙерәсәк әле миңә. Ә буш күнәк алайҙа ғына емерелгән баҫҡыстың тырпайып торған ҡаҙауына эләгеп, эленеп ҡалды. Юғиһә, картуфтар артынан өҫтөмә был тимер күнәк тә килеп төшһә, яҡшы итмәҫ ине.

Бына мин баҙҙың иҙәнендә, һынған таҡталар, ағас ярсыҡтары, кәкре ҡаҙау, сәсрәп тирә-яҡҡа һибелгән картуф араһында аунап ятам. Беренсе шок үткәндән һуң, уйларлыҡ хәлгә киләм. Ҡайһы ерем ауыртты икән? Имгәндемме, әллә именменме? Ҡулдарымды, аяҡтарымды ҡуҙғатҡылап, бер күтәреп, бер төшөрөп, башымды, кәүҙәмде ҡапшап ҡарайым. Бөтәһе лә яҡшы икәненә ышанғас ҡына, ятҡан ерҙән ҡалҡып тороп ултырам. Аллаға шөкөр, именмен! Һыҙырылған, сыйылған, күгәргән ерем дә юҡ шикелле хатта, бик яҡшы.

Ҡапыл иҫемә төшә: емерек баҫҡыслы, 2,5-3 метр тәрәнлектәге был баҙ эсендә мин япа-яңғыҙ ҙаһа, ишек алдында ла бер кем дә юҡ. Ә тышта эңер төшөп килә. Нисек сығырға инде бынан хәҙер? Ҡысҡырыуҙан файҙа юҡ, ишетеүсе булмаясаҡ. Ошо баҙҙа йоҡлай алмайым да инде! Мин шашынған кеше һымаҡ һикереп торам да, бәләкәй генә баҙ эсендә өйөрөлөп-сөйөрөлөп, үрһәләнеп сығыу юлын эҙләйем. Баҙ ауыҙына аңҡайып, бер туҡтауһыҙ һөрәнләп ҡысҡыра-ҡысҡыра ярҙамға саҡырам. Кем булһа ла ишетеп, ярҙамға киллер, тигән өмөтөм, селпәрәмә килеп, юҡҡа сыҡты. Тамағым ғына әптән ҡарлығып, тауышым сипылдап ҡалды. Нисек сығырға хәҙер бынан? Ҡысҡырыуҙан файҙа юҡ, ишетеүсе булмаясаҡ. Килендең балалары ла өйҙә юҡ бит, исмаһам! Эшкә киткәндә ҡартаталарына ҡалдырып йөрөйҙәр. Бынан сыға алмай, төнгөлөккә ҡалһам, мине теләһә ниндәй имә-

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ПАРКИНСОН СИРЕ



**Һуңғы осорҙа Паркинсон ауырыуынан донъя ҡуйыусылар тураһында йышыраҡ ишетәбеҙ. Ул ниндәй сир һуң? Ғәҙәттә, был ауырыу оло йәштәгеләрҙә күҙәтелә. Икенсе төрлө уны ҡалтыратыусы фалиж (дрожательный паралич) тип тә йөрөтәләр. Был атаманы уға хеҙмәте үҙе иҫән саҡта тейешенсә баһаланмаған Британия табибы Джеймс Паркинсон хөрмәтенә бирергә француз неврологы Жан Шарко тәҡдим итә. Джеймс Паркинсон 1817 йылда "Ҡалтыратыусы фалиж тураһында эссе" баҫтырып сығарғанға тиклем бер нисә мең йыл элек был сирҙең симптомдары билдәле була һәм һүрәтләнә. Мәҫәлән, беҙҙең эраға тиклем 12-се йөҙ йыллыҡта Мысыр папирусында, Тәүратта, Аюрведа текстарында һ.б. Беҙҙең эраның 2-се йөҙ йыллығында боронғо Рим табибы Гален унның симптомдарын яҙып сыға, унан һуң бары тик 17-се быуатта ғына улар ҡабаттан һүрәтләнә.**

Был сир һәр ерҙә күҙәтелә. Уның менән 100 мең кешегә 60-100 кеше ауырый. Оло йәштәгеләр араһында ауырыусылар һаны күберәк. Әгәр 60 йәштән өлкәндәр араһында Паркинсон ауырыуы 1 процент булһа, 85 йәштән өлкәндәр араһында 2,6 проценттан 4 процентҡа тиклем. Ғәҙәттә, иң беренсе симптомдар 55-60 йәштә күҙәтелә. Ҡайһы бер осраҡтарҙа 40 йәки 20 йәштә лә күҙәтелеүе мөмкин. Ир-ат ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда йышыраҡ сирләй.

Медицинала уның стадиялары Маргарет Хен һәм Мелвин Яр классификацияһы буйынса билдәләнә.

- 0-се стадия - ауырыу билдәләре юҡ
- 1-се стадия - аяҡ йәки ҡул суҡтарының береһендә симптомдар беленә
- 1,5-се стадия - симптомдар аяҡ йәки ҡул суғында һәм кәүҙәлә күҙәтелә
- 2-се стадия - тигеҙлек һаҡланғанда ла симптомдарҙың ике яҡлы сағылышы
- 2,5-се стадия - симптомдар ике яҡлы сағылыш таба, тигеҙлек һаҡланмай
- 3-сө стадия - ике яҡлы сағылыш. Тигеҙлек һаҡланмай, ауырыу үҙен-үҙе хеҙмәтләндерә ала.
- 4-се стадия - хәрәкәтһеҙлек, сит кешенең ярҙамына мохтажлыҡ. Шул уҡ ваҡытта сирле үҙаллы хәрәкәтләнә ала.
- 5-се стадия - сирле урындыҡта ята, тора алмай. Инвалид.

Ябайлаштырып әйткәндә, кешенең хәрәкәт көйләнеше юғала, тигеҙлекте тота алмай, мускулдары йомшара, ҡулдары, башы ҡалтырай, эсе ҡата. Нервылар системаһы күҙәнәктәрендә "дөрөҫ булмаған" аҡһымдар - синуклеиндар барлыҡҡа килә. Улар бер-береһе менән йәбе-

нес үрмәкселәр, тараҡандар, сысҡан, ҡомаҡтар уратып алған икән тип күҙ алдына килтереп, сирҡанысымдан сарбайлап ҡысҡырып ебәрәм. "Б-р-р-р!" тип һелкенеп, ҡағынып, һуғынып алам. Үҙемә лә, емерелгән баҫҡысҡа ла йәнем көйөп, иң ахыры үкереп-үкереп илай башлайым. Үҙем илайым, үҙем мине юғалтып, төнө буйы эҙләп хәлдән тайған һөйөклөмдө, балаларымды күҙ алдына килтереп, уларҙы йәлләп, әрнеп, йәнем өҙөлөп, тағы ла нығыраҡ һыҡтайым. Илай-илай һыным ҡатып, үҙемдә ҡулға ала алмай, сараһыҙҙан бер төпһәгә ултырып, һеңгәҙәп шымып ҡалам. Шулай күпме ултырғанмындыр инде, белмәйем. Ниндәйҙер ҡыштырлаған тауышҡа һиҫкәнеп, ырғып торам. Күҙем шәмәреп йәш түгеүҙән файҙа юҡ! Тик үҙем генә үҙемә ярҙам итә алам! Етте, үҙеңде ҡулға ал да, ҡуҙғал! Ошо баҙҙан сығырға теләйһең икән, әйҙә, алға! Нимә булһа ла уйлап тап! Эҙлә сығыу юлын! Шулай тип бойорам үҙемә үҙем. Шунан инде үҙемде ҡотҡарыу эшен башлайым.

Тиҙ-тиҙ генә һынған таҡталарҙың оҙондарын арҡыс-торҡос һөйәп, ҡыҫҡаларын өҫтөнә һалып, баҫҡыс һымаҡ нәмә әтмәлләп алдым. Хәҙер инде бер күнәк картуфты алып сығырға ҡала. Өҫтәүенә, 112 килограмм ғына тарткан кәүҙәмде күтәреп сығарырға кәрәк баҙҙан. Аунап ятҡан картуфтарҙы күнәккә кире тултырам, баҙ иҙәнендәге эре ҡыйҙы бер мөйөшкә өйәм, таҡта һыныңы менән баҙҙың иҙәнен ҡырып таҙартам. Әгәр ҙә ҡабат осоп төшһәм, яраланыу, имгәнеү хәүефенән һаҡланыр өсөн эшләйем мин быларҙы. Ике-өс тапҡыр осоп төшөп, картуфтарҙы кире тултырып, баҙ иҙәнен таҙартып, ҡыйҙы йыйып, ҡабат-ҡабат баҫҡыс әтмәлләп хитлана торғас, ни ғиллә менәндер, мин баҙҙан килеп сығам. Әллә таҡталарҙы терәп ҡуя торғас, соҡорланып, мине күтәрерлек булып, нығынып киттеме инде баҫҡыс тигән нәмәм. Әллә Хоҙайым минең ныҡышмаллығымды күреп, йәлләп, сығыу йүнен бирҙеме, нимә булһа ла мин баҙ тотҡонлоғонан ҡотолоп, иреккә, яҡты донъяға килеп сыҡтым. Бына мөғжизә! Ҡыуанысымдан бер үҙем бер ишек алды булып, маймылдарҙың енеү бейеүен бейейем, түшемә дөңгөрләтеп һуғып, Кинг-Конгтың енеү оранын ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡотorған кеше һымаҡ бер килке ишек алды буйлап сабып бейеп йөрөйөм. Шул моментта мине ысын Кинг-Конг күрһә, ҡото осоп ҡасып китер ине... Ни тиклем ирек һөйөүсе йән эйәһе шул кеше тигәнең! Шул бәләкәй генә баҙ соҡоронда бөтә донъя емерелгәндәй тойолдо бит минә.

Шуға күрә лә иреккә сығыу ҡыуанысым ашып-ташып, шундай ҡырағай формала урғылып, ҡотороп бейеүгә әйләнә. Ниһайәт, мин тынысланам, яҡшы итеп баҙҙың ҡапҡасын ябам да, бер күнәк картуфты тотоп, ҡайтып китәм. Киске ашты өлгөртә һалырға кәрәк бит! Нисә тапҡыр осоп төшһәм дә, нисек кенә ыҙалаһам да, күнәк менән картуфты ҡалдырмай, баҙҙан һөйрәп сығыуым аҙаҡтан ғына иҫемә төшөп, бер рәхәтләнеп көлөп алам. Боронғоларҙың һәр һүҙе дөрөҫ: "Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә..." тигәндәре ошо була инде!

Кислотеп кенә, ауыл көтөүе ҡайтып, һыйырҙарҙы һауып, сепарат айыртып, эштәрҙе бөткәс, ҡәйнештәргә тағы барып килергә булдым. Баҙҙың баҫҡысы тураһында аңғартырға кәрәк бит инде. Килеп етеп, тупһаларына баҫыуым булды, өҫкө тупһаның урта таҡтаһы шартлап һынып, минең бер аяғым тупһа аҫтына төшөп тә китте. Ай Алла ғынам, был ни ғәләмәт! Ниндәй көн булды әле бөгөн? Нимәгә баҫһам да, нимә тотһам да, емерелеп барасы!

Алай ҙа үҙемә зыяны юҡ, имгәнгән, яраланған, һыҙырылған, күгәргән ерҙәрем дә юҡ, Аллаға шөкөр! Өйгә инеп, килен менән тиҙ-тиҙ генә һөйләшәм дә, ҡайтып китә һалам. Кешегә таңғы сәғәт 5-тән иртәнге һауынға эшкә, ял итә торған ҡәҙерле ваҡытын сарыф итергә ярамай. Ҡабаланып, тупһаларын да һындыра баҫҡанымды әйтергә онотоп, сығып киткәнмен.

Иртәнсәк малды көтөүгә ҡыуғанда ҡәйнеш килгән: "Еңгәй, хәлдәрең нисек? Имеһеңме? Бер еренде ауыртманымы? Ғәфү ит инде зинһар! Өйҙә булмаһыҡ бит, баҙға һине төшөрмәҫ инек. Башҡа донъя тәҙөп яткас, бынын бағырға форсат юҡ шул. Ҡартатайҙарҙан ҡалған донъя нык иҫкерҙе лә инде. Яңы өйгә күсеп сыҡһаҡ, барыбер емереп ташлайбыҙ тип, бер нәмә лә тәҙәтке лә килмәй бит әле", - тине ул көйәләнеп. "Ярай, ярай, ҡәйнеш, бары ла яҡшы, мин имеңмен, көймә юҡҡа. Иң мөһиме, өйөгөҙҙө һалып бөтөп сыҡһағыҙ, тормош үҙенәнүҙе яйға һалына ул, Алла бирһә!" - тип, ҡәйнеште тынысландырып ҡайтарып ебәрәм. Һуңғараҡ, төш ваҡытында киленде магазинда осраттып: "Кисә ҡабаланып, тупһағыҙҙы ла емерә баҫҡанымды әйтергә онотоп сығып киткәнмен. Ҡәйнеш нимә тине?"- тип һорайым. Килен рәхәтләнеп көлә: "Ҡәйнешең эштән ҡайтып инде лә, мин нимә булһа ла өндәшеп өлгөргәнсе: "Зилдә еңгәй килгәйнеме әллә?" - тип һораны. Мин көлә-көлә һин тарыған хәлдәрҙе һөйләп бирҙем дә: "Еңгәй килгәнен ҡайҙан белдең? Баҙ ҡапҡасы ябыҡ та инде, етмәһә, тышта ҡараңғы ла?"- тип һорайым. "Тупһа емерелгән бит!"- тип яуапланы ҡәйнешең...

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Бәләбеҙ, гәзит уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәре тормошобоҙҙа осрап торған төрлө мажаралар тураһында уҡырға, аҙаҡ шуға бәйләп, үҙе менән булған ҡыҙыҡ хәл-ваҡиғаларҙы көлә-көлә башҡаларға һөйләргә, ураҡлашырға ярата. Һеҙҙең арала шундай уҡыусыларыбыҙ булһа, яҙып ебәрегеҙ әле беҙгә үҙ мажараларығыҙ тураһында, бергәләп көләйек!**

шеп, мейенең сәләмәт туҡымаларын йәбештерә, һәҙәмтәлә тупланма барлыҡҡа килә. Йәғни Паркинсон ауырыуы - иммунитеттың хатаһы, уның мейенең үҙгәргән туҡымаһын сит итеп ҡабул итеүе.

Әммә Паркинсон сире мейелә барлыҡҡа килмәй, ул уға эсәктәрҙән килә. Былтыр Калифорния технология институтында тикшеренеүҙәр үткәрелә һәм тап эсәктәрҙә патологик яҡтан үҙгәргән синуклеин аҡһымы барлыҡҡа килеүе раҫлана. Бында төп сәбәпсе булып үҙгәргән микрофлора тора. Синуклеин баш мейеһенә тиклем менеп еткәнсе оҙон юл үтә һәм 3 аҙнанан һуң ғына барып етеп, мейенең урта өлөшөндә туплана, хәрәкәт нейрондары эшмәкәрлеген боҙа һәм дофаминды яба. Синуклеин бигерәк тә майлы һәм татлы ашарға яратыусыларҙа күтәрелә. Тимәк, был сирҙән һаҡланыуҙың ин яҡшы сараһы - сәләмәт эсәктәр һәм ундағы дөрөҫ микрофлора.

Заманса медицина Паркинсон ауырыуынан дауалай алмаһа ла, консерватив һәм оператив дауалау сирлеләрҙең тормошон яҡшыртыу, ауырыуҙың аҙып китеүен тотҡарлай ала. Мәҫәлән, 2015 йылдың ноябрендә Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында Башҡортостанда беренсе тапҡыр Паркинсон ауырыуын дауалау буйынса үҙенсәлекле операция эшләнә. Пациенттың мейеһенә электродтар ҡуйыла (мейе эшмәкәрлеге стимуляциялана). Улар аша түбән көсәргәнештәге һәм билдәле тирбәлештәге электр тогы ебәрелә. Импульстар алдан программаланған ҡоролмалар - пациенттың тиреһе аҫтына ҡуйылған нейростимуляторҙар ярҙамында тапшырыла. Һәр сирле өсөн стимуллау программаһы айырым һайланыла. Паркинсон ауырыуын операция юлы менән дауалау бөгөн илдең 5-7 медицина учреждениеһында тормошҡа ашырыла. Операция сығымдары һәм ҡиммәтле материалдар республика бюджеты иҫәбенән финанслана.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

*ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР*



# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

* * *

Эйе, аҡыллы врач дарыу менән генә түгел, күҙ, һүҙ менән дә дауаларға тейеш. Шәп врач ул белгес кенә түгел, педагог, хатта бағымсы, экстрасенс та. "Врачты күргәндән һәм һөйләшкәндән һуң ауырыуҙың хәле һәм кәйефе яҡшырһа, шул иң шәп врач", - тигән Бехтерев.

* * *

Һәйбәт кешеләр үҙҙәре лә белмәҫтән ғаиләһенең, йыш аралашҡандарҙың һаулығына ыңғай йоғонто яһай, рухтарын нығытыуа. Һәйбәт кеше үҙ алдына ғына яҡшы түгел, бүтәндәргә һәйбәт мөғәмәләһе менән яҡшы. Ундай кешеләрҙән нур бөркөлөп торған кеүек. Ундай кешеләр янында донъялар яҡтырып, күңелдәр күтәрелеп китә.

* * *

Яҡшы кешенең яҡшылығының бүтәндәргә тейеүе һәм үҙенә кире әйләнеп ҡайтыуы бик яҡшы.

Яман кешенең яманлығының бүтәндәргә ҡағылыуы, сарфыуы кире үҙенә ҡайтыуы хаҡ. Ни сәсһәң, шуны ураһың.

Көндәлек тормошта кешеләрҙең ғәйбәтен һөйләргә әүәҫбеҙ. Уның да бер яман сарфыуы бар икән...тештә төшөрә, имеш. Шуға тешһеҙ кешеләрҙең күплегенә хәҙер мин артыҡ аптырамайым.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Яратҡан кешеңә бәйлелек

"Зарығыу сәбәбе - нәфсе һәм теләк", тигән Будда. Кемдәлер бер үк ваҡытта теләргә һәм яратырға мөмкин түгел. Яратыу - яратҡан кешеңә кем менән теләй, шуның менән булыу, ҡайҙа булырға теләй, шунда булыу азатлығын биреү ул. Мөхәббәт - уларҙың үҙҙәренең теләге менән һинең тормошоңдоң бер өлөшө булыу мөмкинлеге биреү. Бында ла бәйлелек тураһында телгә алмай булмай. Нимәгәлер йәки кемгәлер эйә булыу өсөн тынысланырға һәм бөтөн нәмәгә тыныс ҡарарға кәрәк.

Бәйлелек һәм күрә алмаусанлыҡ... "Нисек бар, шулай ҡабул итмәйенсә тороп, бер генә күренеште лә үҙгәртә алмаясаҡһың" , тигән Карл Густав Юнг. Күрә алмаусанлыҡ - яуыз нәмә. Нимәнелер күрә алмаһаҡ, үҙебеҙ ҙә аңламаҫтан ошо объект менән күҙгә күренмәгән бәйләнештә булабыҙ, ул беҙгә унан ҡотолоу мөмкинлеген бирмәй.

Мәҫәлән, бурысҡа батҡанһығыҙ һәм ошо хәл-торошто күрә алмайһығыҙ. Был осраҡта финанс хәлегеҙҙе яҡшыртыу бик ауыр буласаҡ, сөнки көсөгөҙҙө нимәлер эшләүгә түгел, ә хәл-торошто күрә алмауға сарыф итәһегеҙ. Әгәр ошо хәлегеҙ менән килешеп, эске бураныгыҙҙы баҫһағыҙ, көрсөктән сығыу юлы мотлаҡ табыласаҡ. Баш биреү - еңелеү түгел. Ул хәл-тороштоң нисек бар - шулай икәнлеген ҡабул итеү. Тәүратта "Яуызлыҡҡа ҡаршылашма" тиелә икән, тап ошо күҙаллана. Асыуланып та, проблемаларыңды танымаҫҡа тырышыу менән дә үҙеңә ярҙам итә алмаясаҡһың. Тормошонда нимәләр оҡшамай икән, уға ҡаршыуынан туктап, хәл-тороштоң нисек бар - шулай булыуына ризалашырға һәм һуңынан уларҙы ыңғайға үҙгәртергә кәрәк.

### Ни өсөн ыңғай фекерләү кәрәк?

Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: самолетта осоп бараһығыҙ һәм ҡапыл уның бер двигателе сафтан сыға. Пилоттың ниндәй реакцияһы күңелегеҙгә яҡын буласаҡ? "Тыныслыҡ һаҡлағыҙ һәм ҡайыштарығыҙҙы эләктерегеҙ! Бер аҙ һелкетер, әммә беҙ исән-имен ултырасаҡбыҙ!" - тиеүеме, әллә: "Барыбыҙ ҙа харап буласаҡбыҙ! Беҙ үлдек!" - тип кабинаһынан сығып, креслолар араһында илап йүгереп йөрөүеме?

Ә хәҙер пилот үҙегеҙ булған шәхси тормошоғоҙ хаҡында уйланығыҙ. Ниндәй көйләнеш менән проблеманы хәл итеү мөмкинлеге күберәк? Ыңғай фекер йөрөтөүҙең асылы тап шунда ла инде. Ул эштең ыңғай хәл ителерен гарантияламай, әммә уның мөмкинлеген арттыра.

Төпкә аң - барлыҡ уй-фекерҙәребеҙҙең тулы йыйынтығы. Иң йыш уйланылған фекерҙәр иң ныҡлы программаны формалаштыра.

Уңышһыҙҙар үҙҙәренең эшләй алмағанына нык иғтибар туплай, һөҙөмтәлә эшләй алған бер генә нәмәләре лә ҡалмай. Ыңғай фекерләүселәр, киреһенсә, үҙҙәренең мөмкинлектәренә игтибар туплай һәм шулай итеп һөҙөмтәгә өлгәшә.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Солоҡсолар конкурсы шарттары иң ҡатмарлыһы булғандыр, моғайын. Бәйге мәлендә солоҡсолар йыуан бүрәнәләрҙән тумар умарта эшләне. Уларҙың был эшен күҙәтеп тороусылар бик күп булды.*



*АФАРИН!*

# РӘСӘЙҘЕҢ ИҢ ЯҠШЫ УМАРТАСЫҺЫ...

## Ишембайҙа йәшәй!



Солоҡсолар.



Шамил, Иҙел, Әҙеһәм Йәрмөхәмәтовтар.

**(Башы 1-се биттә).**

Ойоштороусылар Бөтә Рәсәй конкурсын республика кимәлендәге конкурстар менән дә байытып, Рәсәйҙең 20 төбәгенән килгән ҡатнашыусыларға, саҡырылған сит ил ҡунаҡтарына матур тамаша күрһәтеүгә өлгәште. Мәҫәлән, балалар араһында "Башҡортостандың иң яҡшы йәш умартасыһы" конкурсы быйыл 11-се тапҡыр үткәрелде һәм баһалап бөткөһөҙ тәрбиәүи сара икәнен раҫланы. "Башҡортостандың иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ умартасыһы" конкурсы яңыраҡ ҡына ойошторола башланы һәм ул да бик үҙенсәлекле, сағыу сара булып хәтерҙә ҡалды. Ә "Башҡортостандың иң яҡшы умартасылар нәҫеле", "Башҡортостандың иң яҡшы солоҡсоһо" конкурстары иһә халҡыбыҙҙың йәшәйешен, көнитмешен, рухын сағылдырған милли бәйгеләр булып танылды. Был конкурстарҙан тыш, баһалама комиссияһы ағзалары Башҡортостанда етештерелгән иң тәмле балды ла билдәләне. Был юлы әлеге наградаһы Нуриман ҡортсолары алды. Ул көндө шулай уҡ ипподром эргәһендә иртәнән кискә тиклем ҡала халҡы өсөн бал йәрминкәһе эшләне.

Конкурсты асыу тантанаһында бөтөн ҡунаҡтар ҙа башҡорт балының үҙенсәлекле төмен билдәләне, уның донъяға сығарлыҡ бренд булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Апимондия" Халыҡ-ара умарталыҡ ассоциацияһы делегацияһы составында килгән Төркиә, Танзания, Ҡырғыҙстан белгестәре, шулай уҡ Ҡытай, Германия һәм Италия граждандары бәйгеселәрҙе мөкиббән китеп тамаша ҡылды, солоҡсолар менән бик оҙаҡ фекер алышты. Итальян кешеһе башҡорт балының донъяла билдәлелек ялауын һәм уны йыл һайын 20 тонна күләмендә Италияға һатып алырға әҙер булыуын белдерҙе.

Ғөмүмән, килгән ҡунаҡтарҙы ғәжәпләндергән мәлдәр байтаҡ булған был сара мәлендә. Бөтә Рәсәй конкурсы барған майҙансыҡ өсөн яуаплы Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең сауҙа бүлеге начальнигы Илгиз Сәғәҙиев, мәҫәлән, ҡунаҡтарҙың Башҡортостандың ауыл хужалығында ҡортсолоҡ тармағы барлығына, был тармаҡҡа субсидиялар бирелеүенә иҫе китеп аптырауы тураһында телгә алды. Новгород өлкәһенән килгән Лариса Агафонова исемле бәйгесе менән һөйләшкәндә уның сараны ойоштороу кимәлен иң юғары балл менән баһалауы күңелгә һары май булып яғылды: "Конкурсанттарҙың эшен баһалау тәртибе лә, һорауҙар ҙа яҡшы уйланған. Ризаһыҙлыҡ тыуҙырған бер мәл дә булманы. Ә бына Өфө тураһында әлегә аныҡ ҡына фекер туплап өлгөрмәгәнмен. Ул беҙҙең Бөйөк Новгородтан да, Мәскәү менән Санкт-Петербургтан да нимәһе менәндер айырыла икәне күренеп тора", - тине ул.

Бүләкләү тантанаһы барыһын да ҡыуандырҙы, сөнки ҡатнашыусыларҙың береһе лә бүләкһеҙ ҡалманы. Конкурстың төп бүләгенә, 300 мең һумлыҡ сертификатҡа эйә булған егетебеҙҙе атаныҡ инде, ул Ишембай егете Илгиз Шәңгәрәев булды. Уға 300 мең һум күләмендә аҡса бирелде. Икенсе урынды һәм 200 мең һумлыҡ аҡсалата призды Дағстандан Ғәбдесамат Магомедов, өсөнсө урынды һәм 100 мең һумлыҡ аҡсалата призды Адыгей Республикаһынан Олег Кубиков яуланы.

Әбйәлил районы Асҡар ауылынан теш табибы Шамил Йәрмөхәмәтов иң яҡшы умартасылар нәҫеле бәйгеһендә ҡатнашыу өсөн атаһы Әҙеһәм һәм улы Иҙел менән килгәйне. Улар был конкурста 1-се дәрәжәләге диплом һәм ҡиммәтле бүләккә лайыҡ булды. Ә балалар араһында үткәрелгән ярышта Учалы районынан Камил Мәхмүтгәрәев, Баймаҡ районынан Ильяс Хәсәнов, Нуриман районынан Юлиә Янова, Ейәнсура районынан Булат Гәҙелбәковтар билдәләнде. Уларҙың һәр береһенә смартфон бүләк ителде.

Солоҡсолоҡ буйынса республика конкурсында 5 районадан бөтәһе 14 кеше ҡатнашты. Улар 7 команданы тәшкил итте. Солоҡсолар конкурсы шарттары иң ҡатмарлыһы булғандыр, моғайын. Бәйге мәлендә солоҡсолар йыуан бүрәнәләрҙән тумар умарта эшләне. Уларҙың был эшен күҙәтеп тороусылар бик күп булды, сөнки көс тә, таһыллыҡ та, оҫталыҡ та талап иткән был шөғөл әле башҡа күп умартасылар өсөн буй етмәҫ оҫталыҡ үре тип иҫәпләнә. Бүләкләү мәлендә бөтөн солоҡсоларҙы ла сәхнә түренә саҡырып сығарыу ҙа был һөнәргә оло хөрмәт күрһәтеү тип баһаланды. Ә еңеүселәр түбәндәгесә билдәләнде: Ишембай районынан Фирғәт Баймөхәмәтов һәм Ишбулды Иҫәнамановтар командаһы - өсөнсө, уларҙың райондаштары - аталы-уллы Ришат һәм Әнүр Вәхитовтар - икенсе урынға лайыҡ булды. Мәләүез районы биләмәһендәге "Башҡортостан" Милли паркында эшләүсе Бөрйән районы солоҡсолары Хәлил Хәкимов менән Тәлгәт Ҡолдәүләтовтар - беренсе урынға лайыҡ булды.

Бәйге майҙанында байтаҡ солоҡсолар, умартасылар менән танышырға, бер аҙ әңгәмә ҡорорға форсат тейҙе. Мәҫәлән, Белорет районы Исмаҡай ауылынан Тәлгәт ағай Фәтҡуллиндың йүкәнән арҡан һымаҡ бау ишкәнен аптырап күҙәткәндән һуң, уның менән һөйләшеп киттек. Арҡан тип түгел, кирам тип атала имеш был бау. Ул солоҡ ағасын уратып, солоҡсоно биләнән тотоп торған билбау икән: "Кирам ағасҡа үрмәләүгә уңайлы. Ағас башына менгәс, яҫы булғас, тәпәлдереккә баҫып торғанда билгә лә көс төшөрмәй", - тине Тәлгәт ағай. Уның ауылдашы Радик Мәхмүтов һырлап эшләнгән ләңгеһенә һуңғы биҙәктәр һала ине. Солоҡсолоҡ буйынса ярыштарҙы ҡалдырмауы, 2012 йылда үткән республика бәйгеһендә 3-сө урын яулауҙары тураһында ла телгә алды.

Ишембай районы Яңы Һәйет ауылы уҙаманы Ришат Вәхитов, конкурста икенсе урын алыусы команда башлығы, әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Ноғман Мусиндың ҡустыһы булып сыҡты. Ул был конкурсҡа күргәҙмә материал рәүешендә олатаһынан ҡалған, бынан 120-125 йыл элек эшләнгән ләңге алып килгән."Был ләңге ҡайын тамырынан эшләнгән. Һаҡлаһаң, мәңгелек. Уға дегет һеңдерелгән. Быуындан-быуынға күсә килә. Минән - улыма, улымдан - уның улына ҡаласаҡ", - тине Ришат ағай. "Быны әле лә ҡулланаһығыҙмы?" - тип һорауға, Ришат ағай: "Әлбиттә, быуын менән быйыл бер 100 солоҡҡа менгәнбеҙҙер әле. Уны һалып ҡуйыуҙан файҙа юҡ, - тип аптыратты. Шунан тағы дауам итте: - Ишембайҙа солоҡ менән элек райондың бик күп ауылдары шөғөлләнгән. Беҙ таулы яҡҡа - Ҡолғана ауыл советына ҡарайбыҙ. Түмәрҙәре менән бергә 200-ҙән артыҡ солоктo ҡарап торабыҙ. Беҙҙең иҫәп буйынса, Ишембай районында меңләгән солоҡ буш тора. Күбеһе, ҡарап тормағас, серей, йығылып әрәм була. Беҙ уларҙы тәрбиәләйбеҙ һәм йыл һайын үҙебеҙ 10-дан артыҡ солоҡ уябыҙ. Уралда меңйәшәр ҡарағайҙар бар әле. Төбөнә 1811 тип яҙылған бер сологоғоҙ былтыр ауып ҡуйҙы. Дауыл үтеп, әрәм итте. Әле ана шул ике быуат элек эшләнгән солоҡтоң һыҙмаһы буйынса бер солоҡ уябыҙ. Тумарҙан ғына торған 50-ләгән умартабыҙ ҙа бар. Ябай умарта ла тотабыҙ. Беҙҙең бар ғүмер, бар нәҫел ҡортсолоҡ менән бәйле..."

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Ивнәй ШАФИҠОВ, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, солоҡсолар конкурсының баһалама комиссияһы рәйесе:*** Мин солоҡсолар менән күптән бәйләнештәмен. Бөрйән районында ла, "Шүлгәнташ" курсаулығының үҙендә лә эшләнем. Солоҡсоларҙың солоҡ ағастарында нисек эшләүен дә беләм. Бөгөн ете бригада көс һынашты. Шул ҡәҙәре әүҙем эшләнеләр - туҡтамай, ял итмәй, геүләтә һуғып эшләп ҡуйҙылар солоҡтарҙы. Урындар лайыҡлы бирелгәндер тип ышанам. Әммә урындарҙы билдәләүе ныҡ ауыр булды. Барыһы ла эште яҡшы белә. Бөрйән егеттәре бик шәптәр. Улар нимәлә генә аттта ҡалды? Япраҡты ағас сөй менән ныҕытмай, тимер сөй ҡаҡҡандар - шуның менән шунда уҡ 5 мәрәй юғалттылар...

***Әмир ИШЕМҒОЛОВ, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор:*** Бөгөн беҙ Башҡортостан еренә бөтә Рәсәй умартасыларын йыйҙыҡ. Уларға ата-бабаларыбыҙҙың төп шөғөлө булған ҡортсолоҡтоң бөтөн мөмкинлектәрен күрһәттек. Был шөғөлдә балалар ҙа, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙ итеүе, ҡортсолоҡтоң нәҫелдән-нәҫелгә күсә торған һөнәр булыуы, был традицияның әле һаман һаҡланыуы, улай ғына түгел, бөгөн килеп яңынан сәскә атыуы, шулай уҡ уникаль күренеш булған солоҡсоларыбыҙ ситтән килгән ҡунаҡтарҙы бик ныҡ хайран итте. Әйткәндәй, башҡа бер генә төбәктә лә солоҡсолоҡ буйынса конкурстар үткәрелгәне юҡ.

Бөгөнгө матур тантана беҙгә Рәсәй, донъя кимәлендә умартасылыҡ өлкәһендә яңы үрҙәргә артылырға ярҙам итер тип өмөт итәбеҙ. Бер айҙан Стамбулда Башҡортостан, Рәсәй 2021 йылда үтәсәк Апимондия фестивален үҙебеҙҙә үткәреү хоҡуғын яҡлаясаҡ. Еңеп сығырға яҙһын, тип теләйбеҙ инде.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Август (Зөлҡәғиҙә - Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (29) дүшәмбе | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |
| 22 (30) шишәмбе | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 19:00 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (1) шаршамбы | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:58 | 20:28 | 21:58 |
| 24 (2) кесе йома | 4:40 | 6:10 | 13:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 25 (3) йома | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 26 (4) шәмбе | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 27 (5) йәкшәмбе | 4:45 | 6:15 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "ТУҒАНЛЫҠ" ФЕСТИВАЛЕ...

## яҡын туғандарҙы йыя



**7-14 сентябрҙә Өфөлә "Туғанлыҡ" Төрки телле театрҙарҙың VI халыҡ-ара фестивале үтәсәк. Ошо уңайҙан М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры художество етәксеһе, фестивалдең директоры Олег Ханов, Башҡортостан театр эшмәкәрҙәре берлеге рәйесе вазифаһын үтәүсе Хөрмәтулла Үтәшев һәм М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры директоры Азат Йыһаншин журналистар менән осрашты.**

Конкурс программаһында Хакасия, Төркиә, Ҡырғыҙстан, Дағстан, Әзербайжан, Ҡабарҙы-Балкар, Тыва, Сыуашстан, Ҡаҙағстан, Татарстан һәм Башҡортостандан 11 иң яҡшы театр коллективтары ҡатнашасаҡ. Башҡорт театр сәнғәте менән М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры таныштырасаҡ, фестиваль программаһы Жан Ануйҙың "Антигона" драмаһы менән асыла. 7 сентябрь сараны асыу тантанаһы милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланасаҡ. Унан һуң ҡунаҡтар йәйәүләп Актерҙар йортонан башҡорт театры алдындағы майҙанға үтәсәк. Унда театрлаштырылған тамаша ойоштороласаҡ. Бында башҡорт халҡының рухын һәм ҡунаҡсыллығын тулыһынса күрһәтергә тырышасаҡбыҙ, ти ойоштороусылар. Фестивалдә ябыу тантанаһы ла Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә үтәсәк.

Быйылғы фестиваль башҡорт халҡы өсөн изге иҫәпләнгән ете һаны менән тығыҙ бәйле. Фестиваль ете көн, ете төн барасаҡ, төп бүләктәр һаны ла - ете. Әйткәндәй, был бүләктәр тирмә формаһында махсус эшләнгән. "Тирмә - ул төрки телле халыҡтары өсөн дөйөм уртаҡ йорт. Уны башҡорт орнаменты биҙәйәсәк", - ти Олег Закир улы. Театрҙар "Иң яҡшы режиссура", "Иң яҡшы ир-ат роле", "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-ат роле", "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", "Иң яҡшы сценография", "Иң яҡшы музыкаль биҙәлеш" номинациялары өсөн көс һынашасаҡ. Бынан тыш, "Иң яҡшы спектакль" номинацияһы билдәләнәсәк. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының Альбер Камю әҫәре буйынса ҡуйылған "Калигула" һәм Салауат дәүләт башҡорт драма театрының Мостай Кәримдең "Ауыл адвокаттары" әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән "Ерҙәштәр" спектакле конкурстан тыш программала күрһәтелә. "Ерҙәштәр" - "Театр яҙы - 2017" фестивале лауреаты, ә "Калигула" актерҙар эше, ҡуйылышы, көнүҙәк темаһы яҡтыртылыуы менән үткән миҙгелдең иң сағыу спектаклдәренең береһе.

"Туғанлыҡ" фестивале сиктәрендә лекциялар, фәнни-ғәмәли конференция, этно-концерт, Рәсәйҙең халыҡ артисы Евгений Князев менән ижади осрашыу көтөлә. Шулай уҡ тамашасыларҙы Ҡырмыҫҡалы районы Тауһеңгер ауылы эргәһендә үтәсәк Театр йыйынына саҡыралар. Байрам иртәнге сәғәт унда башлана, унда башҡорт милли спорт уйындары, бәйгеләр ҡаралған.

Ғөмүмән, халыҡ-ара кимәлдә үткән был мәҙәни сара тамашасы араһында иң көтөп алынғанылыр, моғайын. "Туғанлыҡ" тигән һүҙгә ҙур мәғәнә һалынған. Фестивалдең "Туғанлыҡ" тип аталыуында ла мәғәнә ята. Беҙ төрлө фестивалдәргә йөрөйбөҙ һәм төрки телле театрҙар ҡатнашҡан сараларҙа айырылып тора. Арабыҙҙа мәнәр саҡрымдар ятһа ла, уларҙа беҙгә таныш йолалар, беҙгә таныш башҡа нәмәләр осратабыҙ һәм ошоға бала кеүек ҡыуанабыҙ. Спектаклдәрҙәге тегеҙ йәки был ваҡиғаға ла бер төрлө шатланабыҙ, бер төрлө һағышланабыҙ. Шунан, ирекһеҙҙән, беҙ бит туған, яҡын туғандар икәнен аңлайһың. Шуға ла бер-беребеҙ менән аралашыуҙан оло ҡәнәғәтлек тойғолары кисерәбеҙ, мәҙәниәт аша бер-беребеҙгә яҡынаябыҙ", - ти Милли йәштәр театры директоры, 2012 йылғы "Туғанлыҡ" фестивале лауреаты Азат Йыһаншин да. Шуға ла был ете көн театр һөйөүселәр өсөн үҙе байрамға әүереләсәк.

# СӘЛӘМ, СТУДЕНТ!



**Өфөлә 1 сентябрь көнө "Сәләм, студент!" байрамы үтә. Быйыл уны "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы, "Юлдаш" радиоһы, Өфө ҡала хакимиәте, Киров районы хакимиәте, БР Халыҡтары ассамблеяһы, БР Дуҫлыҡ йорто, БР Ректорҙар советы, Башҡортостан йәштәренең Бөтөн Рәсәй халыҡ-ара берлеге ойоштора.**

Мәҙәни-күңел асыу сараһы "Ватан" этнопаркында үтә. "Сәләм, студент!" байрамы Башҡортостандың иң ҙур сараларының береһе. Унда йыл һайын Өфө һәм республиканың башҡа уҡыу йорттарынан 10 мендән ашыу студент ҡатнаша. Программаны Филүс Ҡасимов, Йәмил Ишмөхәмәтов, Ғәзиз Әбделмәнов алып бара, унда уйындар, бәйгеләр, төрлө вуз студенттары араһында квестар, флешмоб, байрам ҡунаҡтарының, башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары сығышы, шулай уҡ сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаусы башҡа саралар көтөлә. Байрам 17.00 сәғәттә башлана.

# БАШҠОРТ ҠЫҘЫ ИҢ СИБӘРЕ



**Тыва Республикаһында үткән "Мисс Азия Альма матер-2017" бәйгеһендә 18 йәшлек Земфира Байдәүләтова гран-при яуланы. Халыҡ-ара кимәлдәге был конкурста Башҡортостан, Ҡырғыҙстан, Монголия, Ҡаҙағстан, Бүрәт, Ҡалмыҡ, Хакас, Тыва республикаларынан гүзәл заттар ҡатнашты.**

Земфира - М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенты, Ҡырмыҫҡалы районында тыуып-үҫкән. Бәйгелә ҡыҙҙарҙан сәхнә мәҙәниәте, аудитория менән аралаша, этикет, тыуған ерherең тарихын һәм мәҙәниәтен белеү талап ителгән. Уның шарттары буйынса, ҡатнашыусылар үҙ милләтенең костюмы, мәҙәниәте менән таныштырырға, шулай уҡ үҙенең ижади, дизайнер һәләттәрен күрһәтергә тейеш була. Земфира "Bashkirian Beauty" студияһында шөғөлләнә, уны бәйгелә студия директоры, "Вице Мисс Азия-2004" титулына эйә Альбина Усманова оҙатып йөрөгән.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨНЛӨГӨНӘН ЕЛ ӨРМӘЙ,

## ишегенән кеше кермәй

Өс нәмә кешене ҡартайтыр: йөрөмһеҙ ат, үтмәҫ бысаҡ, яман ҡатын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәштәрҙе ҡарттарға ярҙам итергә ҡушалар, ә мин киреһенсә эшләр һәм ҡарттарҙы йәштәргә ярҙамға ҡушыр инем.

**(Бер аҡһаҡал аҡылы).**

Һиңә ярҙам итә торған һүҙҙе һин үҙ-үҙеңә әйтә алмайһың.

**(Эфиоп мәҡәле).**

Хеҙмәткәрҙе идеялар генераторына әйләндереүҙән иң яҡшы ысулы - уға иң юғары яуаплылыҡ йөкмәтеү.

**(Д. Огилви).**

Мин киләсәк менән ҡыҙыҡһынам, сөнки үҙемдең ҡалған бар ғүмеремде унда үткәрергә йыйынам.

**(Чарльз Ф. Кеттеринг).**

Һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн ике генә фекер бар: үҙенеке һәм... дөрөҫ булмағаны.

**(Билдәһеҙ автор).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ағалы-ҡустылы ике бер туған фермерлыҡ менән шөғөлләнгән. Туғандарҙың береһе буйҙаҡ, икенсеһе ғаиләле булған. Улар һәр кис эшләп тапҡандарын ҡап уртаға бүлешә икән. Бер көн буйҙаҡ булғаны шулай тип уйлана: "Беҙҙең һәр кис эшләп тапҡаныбыҙҙы уртаға бүлешеү дөрөҫ түгелдер ул. Мин өйләнмәгәнмен, ҡарарға ғаиләм дә, балаларым да юҡ. Шуға күрә минең ихтыяждарым да ҙур түгел. Ә ҡустымдың ғаиләһе һәм балалары бар". Шулай тип уйлағандан һуң ул һәр кис үҙенең аҙбарынан бер тоҡ бойҙайҙы туғанының аҙбарына бушата башлай.**

**Эшләп тапҡандарын бер тигеҙ бүлешеү ҡустыһының да уйынан сыҡмай икән. Бер кис ул да үҙ-үҙенә: "Эшләп тапҡандарыбыҙҙы бер тигеҙ бүлешеү бер ҙә генә лә дөрөҫ түгел, - ти. - Мин өйләнгәнмен. Киләсәктә мине ҡараясаҡ балаларым бар. Ә ағайымдың ҡарарлыҡ бер кеме лә юҡ". Ул да һәр кис үҙенең аҙбарынан ағаһының аҙбарына бер тоҡ бойҙай бушата башлай.**

**Көндәр шулай үтә тора. Туғандар үҙҙәренең аҙбарындағы бойҙайҙың кәмемәгәнен һиҙеп ҡалып, аптырай төшә, нимә тип уйларға ла белмәй икән. Шулай аптыранып йөрөгәндә бер-береһенең аҙбарҙарына бойҙай бушатҡан саҡта осрашалар. Икеһе лә ваҡиғаның айышына төшөнөп, йөкмәгән бойҙайҙарын ергә ҡуйып, бер-береһе менән ҡосаҡлашалар. Икеһенең дә күҙҙәре йәш тамсыһына сылана. Ысын туғанлыҡ ошолай була".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идараһында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1671/08